✓ *Бөйөк аҡыллы кешеләр ошо өс бәләнең ҡорбаны була: ул йә иртә донъя ҡуя, йә хәйерселектә йәшәй, йә үҙенән һуң тоҡом ҡалдырмай.*

*(Боронғо һинд мәҡәле).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8 - 14 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№23 (545)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ яратҡан яраттар...**

"Киске Өфө"нө ауылы менән уҡыйҙар



3

**Өфөбөҙ...**

донъя чемпионаты үҙөге



4

**Башҡорт һабантуйы тураһында**



6-7

**Итәк ҡырҡып, ең ямаумы,**

йәки Сибай институтына аҡса бүлмәү республика иҡтисадын күпмегә байытасаҡ?



8

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Баш ҡалабыҙҙы тағы ла йәмлерәк, уңайлыраҡ итеү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?*

*Гүзәл ЯУБАҪАРОВА, "АС-Проект" проектлау институты" яуаплылығы сикләнгән ойошма директоры:* Үҙ ғүмеремдә бик күп ерҙәр гиҙҙем, Европа, Азия илдәрен айҡап сығып, ҙур-ҙур ҡалаларына һоҡландым. Рәсәйҙе лә иңләп-буйланым: Дондағы Ростовта уҡыһам, Себерҙә, Нижневартовскиҙа байтаҡ йылдар йәшәнем, ләкин бер ерҙә лә Өфөбөҙ кеүек матур, яҡты, уңайлы башҡа ҡаланы тапманым. Быны мин архитектор булараҡ та, патриот булараҡ та әйтәм. Әлбиттә, Өфөнө Лондон, Мадрид кеүек ҡалалар менән сағыштырып булмай, быны кәрәге лә юҡ. Хәҙер архитектурала, ғөмүмән, заманса һәм уңайлы булған бәләкәй ҡалалар төҙөүгә йөҙ тотола, сөнки ҙур ҡалаларҙың проблемалары ла ҙур. Мәҫәлән, алыҫтан эҙләргә түгел, Мәскәүҙәге юл-транспорт мәсьәләләре унда йәшәп ҡарамаған кешегә лә яҡшы билдәле: аэропортҡа барып-ҡайтыуға ғына ла кеше 4-6 сәғәт ваҡытын сарыф итә. Был йәһәттән Өфөлә лә бар ундай мәсьәлә, тик уны хәл итеү буйынса кардиналь саралар үҙенә юл ярып китә алмай, үкенескә күрә. Тиҙ йөрөшлө трамвай юлдарын төҙөү буйынса проект бик отошло булмаҡсы ине, юғиһә. Уны туҡтатыу сәбәптәре бик аңлашылып етмәне шулай ҙа... Ер өҫтө метроһын төҙөү ҙә транспорт тығындары мәсьәләһен йырып ебәрер ине. Бындай саралар айырым кешеләр мәнфәғәтенә бәйле булырға тейеш түгел, ул халыҡҡа уңайлы булһын өсөн уйланыла бит. Шулай булғас, уны бойомға ашырыу юлдарында ныҡышмалылыҡ күрһәтергә лә кәрәктер, тип уйлайым. Өйөндәге хәлде күршеңдән һора, тигән әйтем бар бит беҙҙә. Үҙебеҙ ғүмер буйы ошонда йәшәгәс, күреп, аңлап та бөтмәйбеҙҙер, ихтимал. Ә бына ситтән килгән дуҫтар, таныштарҙан Өфө тураһында фәҡәт яҡшы фекерҙәр, баш ҡалабыҙ менән һоҡланыуҙар ғына ишетергә тура килә. Әлхәмдулиллаһ, ике тапҡыр хажға барырға насип булды, беҙҙең төркөм етәксеһе - ғәрәп кешеһе Өфөбөҙгә өс тапҡыр килеп китте. Килгән һайын маҡтап бөтә алмай: был ҡалала иң бәхетле кешеләр йәшәй, үҙегеҙ генә һиҙмәйһегеҙ шуны, ти. Ана шул бәхетебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, ҡалабыҙҙы - баш йортобоҙҙо, уның матурлығын һаҡлайыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# МАТБУҒАТ БАҪМАЛАРЫНА ЯҘЫЛАЙЫҠ!

**Матбуғат баҫмаларының тиражы кәмеүе -ҙыялыларыбыҙҙы уйландырған мәсьәләләрҙең береһе бөгөн. Үҙгәртеп ҡороу, баҙар иҡтисадына күсеү осоронда башланған һәм әле үҙен айырыуса ныҡ һиҙҙергән был кире күренеш милли баҫмаларға, шул иҫәптән башҡорт телендәге гәзит-журналдарға ла ҡағылмай ҡалманы. Хаҡтар артыуына, финанс көрсөгөнә һәм башҡа ҡыйынлыҡтарға һылтанып тормай, күптәр матбуғат баҫмаларына тоғролоҡ һаҡлай, үҙ сиратында редакциялар ҙа уҡыусыларына һәйбәт ял сәғәттәре бүләк итергә, яңылыҡтарҙы ваҡытында еткерергә, проблемаларҙы өйрәнергә һәм күтәреп сығырға тырыша. Эйе, ихтыяж да, тәҡдим дә бар, тик...**



Ҡыҙғаныска ҡаршы, баҫмалар тиражы йылдан-йыл кәмей, сөнки гәзит-журнал уҡыусыларҙың күпселеген матбуғаттың һыналған дуҫтары, йәғни өлкән быуын тәшкил итә. Уларға алмашҡа килеүселәрҙең әүҙемлеге тойолмай. Һөҙөмтә булараҡ, бөгөн башҡорт телендә нәшер ителгән республика гәзит-журналдарының дөйөм тиражы "Башҡортостан" гәзитенең уҙған быуат аҙағындағы күрһәткесенән дә кәмерәк. Саң ҡаҡмайынса булмай, сөнки милли баҫмаларҙы яҙмыш ҡосағына ташлау - халыҡҡа ҡаршы енәйәт менән бер ул. Туған тел, мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат - үҙ-ара тығыҙ бәйле төшөнсәләр, уларҙың береһе генә бөтһә лә, ҡалғандары күҙ алдында ҡаҡшаясаҡ. Башҡорт матбуғаты - башҡорт ҡурайы, башҡорт ҡымыҙы, башҡорт балы кеүек үк, күҙ ҡараһындай ҡәҙерләп һаҡлауға мохтаж ҡиммәтебеҙ.

Ҡәҙерле милләттәштәр! Әйҙәгеҙ, халҡыбыҙҙың рухи именлеге мәнфәғәтендәге мөҡәддәс бурысыбыҙ итеп тойоп, баҫмаларыбыҙға ярҙамды һәр ҡайһыбыҙ үҙенән башлаһын. Аҙ тиражлы гәзит йә журнал дөйөм милли мәсьәләләр буйынса фекер алышыр, йәмғиәтте уятыр, берләштерер, изге маҡсаттарға әйҙәр майҙан була алмай. Күмәкләшеп тотоноп, журналист һүҙен уртаҡ мөнбәргә, ысын ҡоралға әйләндергәндә генә бер-беребеҙҙе яҡларға, аҡыл тупларға, көс-ҡеүәтебеҙҙе арттырырға мөмкин.

Бөгөнгө шарттарҙа Башҡортостандан ситтә, төрлө төбәктә йәшәгән милләттәштәребеҙгә башҡорт баҫмаларын алдырып уҡыу айырыуса ауырға тура килә. Улар ҙа төп милли гәзит-журналдарҙан мәхрүм ҡалмаһын ине. Ситтә төпләнгән башҡорттарҙы, почта хеҙмәте менән бәйле ҡатмарлыҡтар арҡаһында, республиканан тороп яҙҙырып булмай, шуға ла Рәсәй каталогына ингән баҫмаларҙы алдырыуҙы улар үҙҙәре йәшәгән урында хәстәрләһә ине.

Милли матбуғат яҙмышы бөгөн хәл ителә, дуҫтар! Матбуғатҡа яҙылайыҡ - милләтебеҙҙе ҡурсалайыҡ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты.**

✓ *Ҡалабыҙҙы тағы ла үҙенә генә хас милли йөҙлө итеп күрергә теләр инем. Һәр төрлө киоскылар, сауҙа комплекстарын төҙөгәндә милли архитектура элементтарын уңышлы файҙаланырға мөмкин бит!*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баш ҡалабыҙҙы тағы ла йәмлерәк, уңайлыраҡ итеү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рудоль ӘҮСӘХОВ, архитектор:*** Ҡалаларҙы мин һәр ваҡыт образлы рәүештә кеше организмы менән сағыштырырға яратам. Эш матурлыкта ғына түгел бит. Кешегә лә матурлығына ҡарап ҡына баһа бирелмәй. Ҡалабыҙ, әлбиттә, йылдан-йыл үҫә, матурлана бара, ләкин кешеләр йыш ҡына уның матурлығын түгел, ә проблемаларын, йәғни ҡаланың эсендәген күберәк күрә, теге йәки был уңайһыҙлыктары менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерә гәҙиттә. Һәм был, бер яҡтан, дөрөҫтөр ҙә, сөнки аяҡ аҫтындағы проблемалар күберәк күренә. Һуңғы ваҡытта, айырыуса баш ҡала хакимиәтенә яңы башлыҡ килгәне бирле, урамдарыбыҙ, проспектыбыҙ юлдарҙы киңәйтеү иҫәбенә иркенәйеп, тын алыуҙары рәхәт булып ҡалды. Сөнки ҡала өсөн юлдар - шул уҡ ҡан артериялары һымаҡ бит ул. Әйткәндәй, юлдар ҡала тормошонда иң киҫкен мәсьәләләрҙең береһе икәнлеге берәүгә лә сер түгел. Ҡалабыҙ яңы ҡан тамырҙарын тергеҙеүгә бик тә мохтаж, шуға күрә Салауат Юлаев проспектынан 21-се больница яғына үтеп сығырға тейешле тоннель төҙөлөшөн тергеҙеү, Черниковкалағы Комаров урамынан Михайловка ҡасабаһы яғына сығып китеүсе магистралде эшләү, Ағиҙел аша бер нисә урында кәрәкле булған күперҙәрҙе төҙөү баш ҡалала транспорт көсөргәнешен яйға һалырға мөмкинлек бирер ине. Ә матурлыҡ мәсьәләһенә килгәндә, шуны әйтер инем: ошоға тиклем халыҡҡа бик күп ҡуламдә һәм ашығыс рәүештә торлаҡ кәрәк ине, шуға ла архитектура өсөн социаль торлаҡ мәсьәләһе беренсе урында торҙо, ә матурлыҡ темаһы был осраҡта һәр ваҡыт артҡы планда ҡалып булды. Иркенләп, матурлап, тәбиғәт ҡосағында заманса микрорайондар төҙөү тик хыялда ғына йәшәй инде ул...

***Әлфәт ҠОБАҒОШОВ, скульптор:*** Һүҙ ҙә юҡ, Өфөбөҙ бик матур. Ултырған урыны менән бигерәк күркәм, Башҡортостандың ландшафтын сағылдырып торғандай. Икенсенән, ҡалабыҙ йыйнаҡ, таҙа, сәскәгә күмелгән. Һуңғы ваҡытта уны төҙөкләндереү, йәшелләндереүгә бик ныҡ иғтибар бирелә. Скульптор булараҡ, мин ҡалабыҙҙы тағы ла үҙенә генә хас милли йөҙлө итеп күрергә теләр инем. Был йәһәттән ниндәйҙер кимәлдә ынтылыш, тырышлыҡ бар ул, тик әлегә һүҙҙә генә. Һәр төрлө киоскылар, сауҙа комплекстарын төҙөгәндә милли архитектура элементтарын уңышлы файҙаланырға мөмкин бит! Исмаһам, мәсеттәрҙе үҙебеҙсәрәк итеп төҙөргә ине, юғиһә, тоталар ҙа Көнсығыш стилдә йә гәрәп өлгөһөндә башҡарырға тотоналар. Мәҫәлән, Салауат Юлаев проспектындағы яңы төҙөлөп ятҡан мәсет архитектураһында асыҡтан-асыҡ гәрәп мотивтары ярылып ята. Шундай уҡ уныш менән үҙебеҙҙең милли һыҙаттарҙы ҡулланырға ла мөмкин ине унда.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

ИШАРА

# ҘУР ҠАЛАНЫҢ...

## бәләкәй кешеләре

**Эҫе аштан бөркөлгән ҡайнар боҫто өрә-өрә, ялтыр ҡалағым менән тәрилкәнең төбөнә төшәм. Ғәмһеҙ ҡиәфәт менән ҡара ҡумталағы мыңғыр-мыңғыр килгән тапшырыу алып барыусыларға төбәлеп торам. Ауыр эш көнөнән һуң ләззәтләнеп кирелеп диванда ятыу, күҙ ауыртҡансы компьютерҙарға үйындарҙа, төрлө сайттарҙа аҙашып ултырыу - үҙе бер мәслихәт, уйлап ҡараһаң. Тик...**

Бөгөнгө көндә матур баш ҡалабыҙҙа әллә күпме ял итеү урындары, иҫ китмәле парктары, күккә ашҡан фонтандары, берe-һенән-береһе затлыраҡ кинотеатрҙары, спектаклдәргә бай драма театрҙары етерлек. Һы... Кеше тәбиғәте ҡыҙыҡ ҡына шул. Беҙ үҙебеҙҙе нисек тә тынысландырыу, ғәйепле икәнебеҙҙе танымау өсөн меңәрләгән һылтауҙар табып, үҙ донъябыҙҙа ғына йәшәргә ынтылабыҙ. "Теге, ни... аҡса булманы театрға барырға", тигән булабыҙ. "Балаларҙы кем менән ҡалдырырға белмәнем, шуға өйҙә ҡалдым", тип тә һылтаулайбыҙ. Ә бит Өфөбөҙҙәге күңел асыу саралары ойошторолған урындарҙа хәҙер балалар өсөн айырым залдар барлығын һәр кемебеҙ белә ләһә. Ата-әсәләр спектакль, кейем-һалым, кино ҡараған, бильярд һәм боулинг уйнаған арала күпселек сауҙа-күңел асыу үҙәктәрендә кескәйҙәр менән иҫ китмәле бала ағыусылар уйнай, уларҙың күңелен күрә. Хатта ҡайһы бер ата-әсәләр әйтеүенсә, балаларын кире алып ҡайта алмай интегәләр икән.

Ниңәләр, ваҡытыбыҙҙы төрлө юҡ-барға сарыф итәбеҙ, ә ысын мәғәнәһендә йәшәргә ваҡыт таба алмайбыҙ. Эйе, эш күп, эштән һуң ҡайтып, киске аш әҙерләгәнсе, ҡараңғы төшә, йоҡоға тарта башлай. Ҡараңғыла йөрөүе лә ҡурҡыныс - шомло заман. Күп әсәйҙәр ризалашыр - урам буйында ҡояш байығандан һуң йөрөмәү хәйерлерәк. Һым, улай булғас, йәштәр өсөн ойошторолған төрлө тамашаларҙан, матур йыр-моңға күмелгән кисәләрҙән ҡолаҡ ҡаҡтыҡ тигән һүҙ. Ә бит был ялҡаулыҡтың арьяғына сыҡҡан йә көндәрен тик эшкә һәм уҡыуға бағышлаған китап ҡорттары һәм тормошон бөйөк интернет селтәренә үргән примитив үрмәкселәр көнитмеше түгелме?

Апайымды эшенән ҡаршы алдым, бергә йәһәт-йәһәт аҙымдар менән өйөбөҙгә яҡынлашабыҙ. Ҡәҙерле кешем ауыҙ тултырып, эре ҡиәфәт менән:

- Туғаным, бөгөн ҡайтыу менән бәйләмгә ултырам. Үҙемә ма-а-атур ҡыҙыл шарф бәйләргә ниәтем... - тигән булды.

Фатирға ҡайтыу менән был изге ниәт хаҡында бер кем дә иҫкә лә алманы. Теге ҡәҙерле ваҡыт компьютер, юҡ-бар хаҡында гәп һатыуға сарыф ителде. Йоҡларға ваҡыт еткәндә лә әле һаман донъя яңылыҡтары ла түгел, сериал ҡарай инек... Ваҡыт үтер, ологайырбыҙ, балаларыбыҙ: "Һеҙҙең йәш сағығыҙ нимәләр менән иҫтә ҡалды, ниндәй батырлыҡтар эшләнегеҙ?" - тиһә, индәребеҙҙе һелкетеп кенә тирә-яғыбыҙға ҡаранырбыҙ ҙа, оялып, башты аҫка эйербеҙ шикелле.

Студент саҡта иң яратҡан урыным - Дуҫлыҡ монументы һәм Салауат Юлаев майҙаны ине. Әле булһа хәтерләйем, бер нисә ҡыҙ бергә йыйылабыҙ ҙа, геү килеп, шул майҙанға йүнәләбеҙ. Бөйөк башҡортобоҙҙоң батыр улы Салауатҡа һоҡла-

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**




● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Көрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Өфөлә йәшәүселәр өсөн** гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлы бар: Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфөматбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигe юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

МӨХӘРРИРИӘТ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республикала хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эшләүсе координация кәңәшмәһе ултырышын үткәрҙе. Унда экологик хәлгә контроллек итеү мәсьәләләре тикшерелде. "Тирә-яҡ мөхит торошонон элеккесә насар булыуын, атмосфера, ер, һыуҙы бысратыу күләмдәренең артыуын танырға мәжбүрбеҙ. Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү йәһәтенән дә эштәр насар. Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡтағы экологик хәл ентеклерәк тикшереүҙе һәм, иң мөһиме, яҡшыртыуҙы талап итә", - тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов.

✓БР Хөкүмәте Президиумы ултырышында ҡайһы бер иҫкәрмәләр менән 2030 йылға тиклем дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль юлдарын камиллаштырыу һәм үҫтереү стратегияһы ҡабул ителде. Стратегияла республика территорияһы буйлап үтәсәк перспективалы төбәк-ара маршруттар булдырыу ҡарала. 2020 йылға федераль кимәлдәге юлдар селтәренә тапшырыласаҡ маршруттарҙың дөйөм оҙонлоғо 772 километр тәшкил итәсәк. Башҡортостан буйлап үтәсәк федераль кимәлдәге юлдарҙың дөйөм оҙонлоғо 1,5 мең километрға етәсәк. Стратегияла 230 ауыл биләмәһенә илткән ҡаты япмалы юлдар төҙөү ҡаралған.

✓Республика клиник дауаханаһының Достоевский урамы, 132 адресы буйынса урынлашҡан 120 урынға иҫәпләнгән яңы биш ҡатлы акушерлыҡ-гинекология корпусы июль урталарында тәүге пациенттарҙы ҡабул итәсәк. Ошо көндәрҙә яңы корпусты Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡараны. Президент билдәләүенсә, киләһе йылда Октябрьский ҡалаһында ла акушерлыҡ-гинекология үҙәге төҙөлөп бөтәсәк. Әлеге ваҡытта Ишембайҙа бала табыу йортон төҙөү мәсьәләһе хәл ителә.

✓Екатеринбургта Италияның Почетлы консуллығы эшләй башланы. Консуллыҡ округы һинеҙ төбәкте үҙ эсенә ала. Улар - Башҡортостан, Удмуртия, Пермь крайы, Ҡурған, Ырымбур, Свердловск, Төмән өлкәләре, Ханты-Манси автономиялы округы. Почетлы консул итеп Роберто Д'Агостино тәғәйенләнде. Алда һанап үтелгән төбәктәрҙә ул Италия вәкилдәре һәм граждандарына ярҙам итәсәк; уларҙың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлаясаҡ; ике дәүләттең дә иҡтисади, мәҙәни үҫешенә, сауҙа бәйләнештәрен ныҡытыуға булышлыҡ итәсәк.

нып ҡарап торабыҙ, унын ҡолағындағы алҡаһын йөҙөнсө мәртәбә тикшереп, скульптура авторының "наҙанлығына" аптырап, Дим бисҭәһе, тимер юл күпере, ҡаршылағы шаулап үҫкән урманға ҡарап, оҙаҡҡа телһеҙ ҡалабыҙ. Ауыл балалары ни, шул хәтлем матурлыҡты күргәс, бигерәк тә шатлана инек. Ялҡауланманыҡ - һәр ваҡыт бер күнелле компания менән шунда юллана инек. Әйтерһең дә, бөгөн унда бармаһаҡ, ниндәйҙер оло ваҡиғанан ҡолаҡ ҡағырбыҙ төҫлө ине.

Бөгөн баш ҡала кисәге Өфөгә ҡарағанда әллә нисәмә тапҡырға матурыраҡ: тәҙәк юлдар, баш әйләндергес бейек йорттар, киң һәм ҡабатланмаҫ скверҙар, майҙансыҡтар, төрлө хозур һәйкәлдәр һ.б. Тик йөнең теләгән ерҙәрҙә йөрөп килергә ваҡыт еткерә алмайбыҙ. Ниңәләр, эш, уҡыу, ғаилә, ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр, тиеп, тормош геүләп торған донъябыҙҙан ситләшәбеҙ. Ата-бабаларыбыҙҙың милли һыҙаттарында ярылып ятҡан дыуамаллыҡ, бар эштәрҙә лә әүҙемлек күрһәтеүсәнлегебеҙ, талантлы йырсыбейеүсе йөрәктәребеҙҙе йәшереп, телевизорҙа күрһәтелгән йүнһеҙ тапшырыуҙарҙан үрнәк алып, шым ғына өйҙәребеҙҙә бикләнәбеҙ. Дуҫиштәр, туған-тыумасарға ла ни бары бер-ике сәғәт ваҡытыбыҙҙы бүлергә йәлләп, ҡомһоҙ бармаҡтарыбыҙ менән клавиатура төймәләрен баҫҡылайбыҙ. Һәр кемебеҙ, кескәй генә тормошонда оло уйҙарға батып, рухи яңғыҙлыҡ кисергәнебеҙҙе аңламай ҙа ҡалабыҙ. Беҙ, оло ҡалабыҙҙың бәләкәй кешеләре, эштән һуң ишектәребеҙҙе нығлы итеп, сит кешеләр, сит мөхит кермәҫлек итеп ябып, үҙ уйҙарыбыҙға талабыҙ...

Тәҙәлеп буламы икән ошо етешһеҙлектәрҙән? Ҡасан, нисек итеп? Кәңәш бирегеҙсе...

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА.**

АФАРИН!

**Баймаҡ районының Һаҡмар йылғаһын һыулаған был ауылдың исеме Ярат атлы кешенең исеменә бәйле барлыҡҡа килгән, тиҙәр. Әммә әҙәм балаһына ла исемде Аллаһы Тәғәлә ризалығы менән ҡушалар, шуға күрә фәҡәт ошо ауылға шундай исемдең тап килеүе лә осраҡлы түгелдер. Һәр хәлдә, яраттар ауыл атамаһының йөкмәткеһендә әйтелгәнсә, яратылырға, хөрмәт ителергә бик тә лайыҡлылар. Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите коллективы өсөн был ауыл шуныһы менән дә ҡәҙерле: баҫмабыҙҙы бар ауыл менән тиерлек алдырып уҡыйҙар бында. Әлбиттә, бында ошо ауылдың хөрмәтле ағинәйе Мәхмүзә Исламғолованың, шулай уҡ Ярат ауылы ҡатын-ҡыҙҙар советы етәксеһе Гүзәл Монасипованың һәм башҡаларҙың хеҙмәте бар икәнен яҡшы беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Кешене көсләп гәзит-журналға яҙҙырған совет осоро күптән артта ҡалды, хәҙер иһә, һәр уҡыусы өсөн көрәшергә, уны күңдергә тура килә. Был йәһәттән Мәхмүзә апайҙың кешеләрҙе өгөтләү буйынса алып барған тырышлығы хаҡында айырым китап яҙырлыҡ. Һәр хәлдә, яраттарға ихлас рәхмәтлебеҙ. Ошо көндәрҙә рәхмәтебеҙҙе еткерәйек, вәғәҙә иткән бүләгебеҙҙе - бәләкәй китапханабыҙҙы тапшырайыҡ, тип, үҙебеҙ килдек Ярат ауылына. Римма Исмәғилева етәкләгән ауыл китапханаһында үтте был осрашыу, унда ауылдың "Атайсал", "Ағинәйҙәр" клубтары ағзалары йыйылды. Фекер алышыу сәй табыны янында барҙы. Һөйләшеүҙә гәзиткә бәйле фекерҙәргә ил, милләт, ауыл яҙмышы, уларҙың киләсәгенә бәйле фекерҙәр ҙә яңғанды. Ғүмәр ауылы ағинәйҙәренең ҡот ҡайтарыу йолаһын башҡарыуын, башланғыс мәктәп балалары сығышын осрашыуға килеүселәр йылы ҡабул итте. Түңәрәк ҡорҙа яңғыраған ҡайһы бер сығыштарҙан өҙөктәр килтереп үтәйек:**

# БЕҘ ЯРАТҠАН ЯРАТТАР...

## "Киске Өфө"нө ауылы менән уҡыйҙар



**Гүзәл МОНАСИПОВА, Ярат ауылы ҡатын-ҡыҙҙар советы етәксеһе:** "Киске Өфө" гәзите беҙгә матур йәшәргә, уйланырға, тормоштоң йәмен табырға ярҙам итә. Ғөмүмән, гәзиттә берәр фәһемле материал сыҡһа, ауыл, район буйлап: "Шул-шул мәҡәләне уҡыһыңмы-юҡмы?" - тип шылтыратыуҙар китә. Үткәндә күрше Йомаш ауылында тыуып үҫкән ғалимыбыҙ Булат Юнысбаевтың ғаиләһе хаҡында мәҡәлә баҫылғас, шундуҡ уларға шылтырата һалдыҡ. Беҙ был гәзитте үҙебеҙҙең әшмәкәрлекте сағылдырған, уға йүнәлеш биргән бер баҫма итеп тә күрәбеҙ.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА, Ғүмәр башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы:** Беҙгә өҫтәгеләрҙең күрһәтмәһен көтөп ултырмайһыңса, үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алып йәшәй башларға ваҡыт етте. Күреп торабыҙ, беҙҙе ҡайғыртыусылар булмаясаҡ. "Киске Өфө" гәзите кинәйә, ишара менән булһа ла беҙгә ошо хәҡиҡәтте еткерергә тырыша.

**Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА, ағинәйҙәр клубы ағзаһы:** Күңелемдә халҡымдың әсе яҙмышы ята. Ул яҙмыш минең ғаиләмдә лә ситләп үтмәгән. Атайымды Әхмәтзәки Вәлидиҙе ҡунаҡ итеп, өйөндә йоҡлатып ебәргән өсөн төрмәгә ултыртҡандар. Туғыҙ ай ултырған ул төрмәлә. Мин тыумаҫ борон уҡ ана шундай яҙмыш мөнәсәбәтенә дусар булғанмын. Шуға күрә лә "Киске Өфө"гә яҙылыуға кешене димләгәндә быныһ менән ошондай ғәҙелһеҙлектәргә үҙ мөнәсәбәтемде лә белдерәмдер, тип уйлайым. Шуны ғына әйтә алам: "Киске Өфө"нө алдырмаған, уҡымаған уҡытыусыны мин уҡытыусыға иҫәпләмәйем. Беҙҙең өсөн был гәзит алтындан да ҡиммәтерәк. Рухлы, аҡыллы, барлыҡ һорауҙарға ла яуап табып була унда. Был гәзиттә баҫылғандар бер ваҡытта ла иҫкерерлек түгел, улар һәр заман өсөн дә яраҡлы. Шуға күрә был гәзит һандарын йыйып барып, киләсәк быуындарға ла еткереү хаҡында уйлайыҡ.

**Мөхтәрәмә МЫРҘАБУЛАТОВА, "Ағинәйҙәр" клубы ағзаһы:** Инде олоғайып, күҙебеҙ насар күрһә лә, беҙҙең ағинәйҙәрҙең яратҡан гәзиттәре - "Һаҡмар", "Атайсал", "Киске Өфө". Өйөбөҙҙә лә ирем Абрар менән гәзит уҡырға яратабыҙ. Яныраҡ Өфөлә булған саҡта Сипайлово бисҭәһен бер итеп киоскылар буйлап "Киске Өфө" гәзитен, башҡа башҡортса баҫмаларҙы эҙләп таба алманыҡ. Әллә алдан алып бөтөргәндәр, әллә бөтөнләй юҡ инде. Ҡыҫҡаһы, баш ҡаланан ауылға башҡортса баҫма уҡырға сарсап ҡайттыҡ. Ҡайтыуыбыҙға "Киске Өфө" гәзите редакцияһынан бандероль килеп төшкән. Беҙҙең Өфөлә гәзит эҙләгәнде белгән һымаҡ, күп итеп ауылыбыҙ ағинәйҙәре фотоһы менән сыҡҡан гәзиттәрҙе, календарҙар ебәргәндәр. Тулҡынланып, йоҡлай алманым хатта. Балаларыма шылтыраттым. Уларҙы йыйып, һәр берсенә гәзит-календарҙар өләшеп, "Киске Өфө"гә яҙылырға ҡуштым.

**Мөхтәр МОНАСИПОВ, "Атайсал" клубы рәйесе:** Тормош ауыр тиҙәр, ул ауыр түгел, ҡатмарлы. Ауырлыҡты беҙ бала саҡта һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙа күреп үҫтек. Ошондай ҡатмарлы тормошта дөрөҫ юлды табыу өсөн, ысынлап та, "Киске Өфө" маяҡ булып тора. Рухи тәрбиә мәсьәләһе күтәрелә гәзиттә, милләттең ниндәй юл менән барырға тейешлеге күрһәтелә. Ҡыҫҡаһы, был йәһәттән гәзиттең роле әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур. Гәзиттәге "Милли идеяға торош" рубрикаһын, йәштәрҙең, ғалимдарҙың фекерҙәрен яратып уҡыйым. Башҡорт халҡының тарихына бәйле мәҡәләләр ҙә оҡшай.

Сәскәләр, үләндәр, ағастар һеркәләнһен өсөн ел иҫеүе, ҡоштарҙың, ҡыбаләктәрҙең, бал ҡорттарының уларға ҡунуыы шарт булып торған кеүек, "Киске Өфө"нө мин тап шулай милли аңды, милли рухты һеркәләндереүсе үҙенсәлекле баҫма итеп күҙ алдына килтерәм. Районыбыҙҙа һәм ауылыбыҙҙа барлыҡҡа килгән "Атайсал", "Ағинәйҙәр" клубтарын да мин тап шул милли рухты һәм милли аңды һеркәләндереүселәр исемлегенә индерер инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баймаҡ районы ауылдарының бер үҙенсәлеге: ҡайһы ауылда китапхана бар, шунда "Атайсал", "Ағинәйҙәр" клубтары, ә ҡайҙа ул клубтар эшләй, шунда рухи йәнлелек, күңел күтәренкелеге, тормоштоң үҙе ҡайнап тора. Яратта ла шулай. Үҙ яҙмыштарын үҙ ҡулына алыуға йүнәлеш тотҡан был ауыл әлеге ваҡытта республика буйынса уҙған "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаша.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Китап" нәшриәте Пермдә үткән Китап йәрминкәһендә ҡатнашты. Күргәҙмә "Европа менән Азия араһында рус теле" халыҡ-ара гуманитар форумы сиктәрендә ойошторолдо. Унда федераль һәм төбәк власть органдары вәкилдәре, дипломаттар, гуманитар хеҙмәттәшлек өлкәһендәге эксперттар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, яҙыусылар, рус теле уҡытыусылары, китапхана хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Күргәҙмә йомғаҡтары буйынса "Китап" нәшриәте дипломға лайыҡ булды.

✔Августа "Өфө" аэропортында яңы халыҡ-ара терминал төҙөлә башлаясаҡ. Төҙөлөш эштәрен 2014 йылдың дүртенсе кварталында тамамлау планлаштырыла. Бөгөнгө көнгә эске авиалиниялар залының дөйөм майҙаны - 12 мең квадрат метр, халыҡ-ара зал майҙаны 4 мең квадрат метр тәшкил итә. Әле булған халыҡ-ара терминал төҙөлөп ятҡан объектҡа беркетеләсәк - уның дөйөм майҙаны 16 мең квадрат метр тәшкил итәсәк. Шулай уҡ аэропорт биләмәһен кәртәләү буйынса эштәр планлаштырыла.

✔Ишембай ҡалаһында Фәүзиә Рәхимғолова исемендәге призға Асыҡ республика балалар-үҫмерҙәр поэтик ижады конкурсы йомғаҡтары буйынса шиғриәт фестивале үтте. Йәш шағирҙар фестивалендә республиканың төрлө төбәктәренән 5-16 йәштәрҙәге 200-гә яҡын кеше ҡатнашы. Еңеүселәр өс йәш категорияһы буйынса билдәләнде. Гран-приға Межгорье ҡалаһынан Илһам Ғәлиастанов лайыҡ булды. Конкурста ҡатнашыусылар РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева менән осрашты. Депутат еңеүселәргә рәхмәт хаттары һәм махсус призлар - кеҫә телефондары тапшырҙы.

✔Өфөлә оло йәштәгеләрҙе компьютер белемәнә өйрәтеү үҙәге эшләйәсәк. Рәсми рәүештә үҙәк 10 июндә Коммунистик урамы, 39 адресы буйынса асыла. Компьютер белемәнә өйрәтеү "Өләсәй һәм ҡартатай онлайн" милли программаһы сиктәрендә ойошторола.

✔Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко Башҡортостан баш ҡалаһының иң лайыҡлы кешеләренә наградалар тапшырҙы. Тәбрикләнеүселәр араһында бөтәһе 29 кеше. Дүрт кешегә ҡаланың юғары наградаһы - Өфөнөң Почет грамотаһы тапшырылды. Ҡалғандары ҡала Советының Почет грамоталарына лайыҡ булды.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Был сарала баш судья Франк Тир йәш башҡорт шашкасыһы Айгөл Иҙрисоваға "Халыҡ-ара мастер" танытмаһын тапшырҙы. Айгөл был чемпионатта судья ярҙамсыһы ролендә сығыш яһай.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨС ТИНДӘН ДӘ... байтаҡ йыйыламы?

**Ҡала округы Советының сираттағы сессияһында ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары, финанс идаралығы етәксеһе Илгиз Насретдиновтың уҙған йылға бюджет үтәлеше буйынса яһаған отчеты тыңланды.**

Былтыр һалым түләүселәр ошо системаға дөйөм алғанда 173 миллиард һум килем килтергән. Шуларҙың төп өлөшө - 115, 8 миллиард һумы федераль бюджетка күскән, 51,9 миллиард һум республика бюджетына ингән, ҡала бюджетына 5,3 миллион һум ҡалған. Йәғни, йыйылған һәр һумдан өс тине ҡала "кеҫәһенә" кергән. Ләкин бында, ил төкөрһә күл була, тигән мәҡәлдә лә иҫтән сығарырға ярамай. Өс тиндә хәҙер һуҡыр бер тингә лә тиңләмәһәк тә, йыйылып, тупланып, ул да ҙур суммаға әйләнергә һәләтле. Быға тағы ҡала бюджетын тулыландырған һалым булмаған һәм башҡа килемдәрҙә лә индерһәк... Тап шулай итеп былтыр ҡаланың дөйөм килеме 19,1 миллиард һум тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта сығым өлөшө 20,6 миллиард һум, йәғни 2011 йыл менән сағыштырғанда 10 процентка артҡан. Әммә бында шуны ла күҙ уңында тоторға кәрәк: әгәр 2011 йылда бюджеттың килем өлөшө 17 миллиард һум булһа, былтыр ул субвенциялар һәм башҡа килем сығанаҡтары ярҙамында 3 миллиард һумға артҡан. Ә тормош ҡануны шундай: килем артҡан һайын, ихтыяж да арта бара.

-Бюджеттың килем өлөшө бюджет-ара трансферттар өлөшө артыу яғына үҙгәрҙе, - тип белдерҙе Илгиз Диҡҡәт улы. - Шулай итеп, һалым һәм һалым булмаған килем өлөшө 2011 йылда 61 процент тәшкил итһә, былтыр ул 49 процентҡаса кәмене, әммә шуға ҡарамаҫтан, ер һәм берҙәм һалым, реклама урыны өсөн түләүҙәрҙең артыуы ыңғай үҫеш тәьмин итте.

Сығымдарға килгәндә, 2012 йылда бюджеттың иң ҙур өлөшө - 71 процент торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа тура килә. Мәғариф 7,7 миллиард һум "ашай", һаулыҡ һаҡлауға 1,7 миллиард һум тотонола.

Былтыр шулай уҡ 2011 йыл менән сағыштырғанда эш хаҡы түләүгә киткән сығымдар 29 процентка арта. Йәғни муниципаль учреждениеларҙа уртаса эш хаҡы - 23, автономиялы учреждениеларҙа 35 процентка күбәйә. Сығыш яһаусы билдәләүенсә, хакимиәт алып барған бюджет сәйәсәте балалар баҡсаларында урындарҙы арттырыу, мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында капиталь ремонт үткәреү, юлдарҙы һәм ихаталарҙы төҙөкләндереү мөмкинлеге биргән.

Әйткәндәй, бюджеттың үтәлеше буйынса уҙғарылған тыңлауҙарҙа ла граждандар ыңғай динамика күҙәтелеүен билдәләй. Тыңлауҙарҙа барлығы 280 кеше ҡатнаша, уларҙың тиҫтә самаһы сығыш яһай, ҡайһы берәүҙәр тәләктәрен яҙма рәүештә тапшыра. Ыңғай күренештәр менән бер рәттән, баш ҡала халҡы киләсәктә үҙәктә генә түгел, ҡала ситендәге юлдарҙы ремонтлауға, мәктәпкәсә йәштәге етем балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға ла иғтибар бүлеү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

О, СПОРТ!

# ӨФӨБӨҘ...

## донъя чемпионаты үҙәге



**Ошо көндәрҙә Өфөлә Халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионатын асыу тантанаһы үтте. 2 июндән 19 июнгәсә дауам итәсәк Чемпионатта ҡатнашыу өсөн донъяның 24 дәүләтенән ҡырҡҡа яҡын спортсы саҡырылған. Рәсәй данын 6 спортсы, шул иҫәптән өс Башҡортостанлы - ғәмәлдәге донъя чемпионы Александр Георгиев, күп тапҡыр донъя чемпионы титулына эйә булған Мурадулла Амриллаев һәм милләттәшебеҙ, халыҡ-ара мастер Айнур Шәйбәков яҡлаясаҡ. Спортсылар "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында урынлаштырылған, партиялар шифахананың "Европа" залында уҙа. Дүрт төркөмгә бүленгән спортсыларҙан ун ике кеше финалға сығасаҡ. Рәсәйҙә тәүге тапҡыр уҙғарылыуы һәм донъяның иң көслө шашка оҫталарын бергә туплауы - сараның төп үҙенсәлектәре, ти ойоштороусылар. Беренсе урын яулаусыға - миллион, икенсе еңеүсегә - ете йөҙ мең, өсөнсөгә биш йөҙ мең һум аҡса ҡаралған.**

Үҫмерҙәр араһында шашка буйынса донъя һәм Европа чемпионы Айнур Шәйбәков фекеренсә, бындай ярыштарҙа илле осраҡтың береһе генә уңыш килтереүе мөмкин, ҡалған 49 осраҡта еңеү үҙ тырышлығыңа, етеҙлегеңә һәм отҡорлоғоңа бәйле. "Был чемпионатҡа үҙеңде ни тиклем әҙерлекле итеп тояһың?" тип һорауыбыҙға егет, 60 процентка ғына әҙермен, тип яуапланы. Күптән түгел Эстонияның Таллинн ҡалаһында ике рәсәйле - ғәмәлдәге донъя чемпионы Александр Георгиев менән Александр Шварцмандың чемпионлыҡ өсөн ярышында тәүгеһенең секундарты булараҡ ҡатнашып ҡайтыуы арҡаһында йүнләп ял итеп өлгөрмәүен төп сәбәптәрҙең береһе, тип атаны. "Шулай ҙа, ошо 60 проценттан 100 процентты "һығып" ҡараясаҡмын, сөнки бөгөн яҡташтар мине күҙәтә, минән еңеү көтә, үҙемдә лә тәүге урын яулау теләге көслө - мин бит үҙемдең Башҡортостанымда уйнайым!" - тип, шунда уҡ үҙен дә, беҙҙе лә дәртләндерергә ашыҡты.

Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған тренеры Юрий Черток фекеренсә, был чемпионатта спортсыларға бик оҙон дистанцияны уйындар үтергә тура киләсәк. Шуға күрә, йәштәргә уңышлы сығыш яһау өсөн етеҙлек тә, сыҙамлыҡ та кәрәк буласаҡ. Әйткәндәй, был сарала баш судья Франк Тир йәш башҡорт шашкасыһы Айгөл Иҙрисоваға "Халыҡ-ара мастер" танытмаһын тапшырҙы. Айгөл был чемпионатта судья ярҙамсыһы ролендә сығыш яһай. Айгөл менән Айнур - бер үк шашкасылар мәктәбенән һәм Тамара Танһыҡҡужина һалған нуҡмаҡты ышаныслы дауам итеүселәр.

Беҙ иһә, үҙ сиратыбыҙҙа, донъяның төрлө тарафтарынан килгән ҡайһы бер шашкасылар менән танышып, улар йәшәгән төбәктәрҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре менән ҡыҙыҡһындыҡ, арта-бан Өфө, Башҡортостан тураһындағы фекерҙәрен яҙып алдыҡ.

**Клод Гондеп, Камерун Республикаһының Шашка федерацияһы президенты:** Был чемпионатҡа беҙ өсәү - Жан-Марк Нджофанг менән Тому Мбонго исемле шашкасы егеттәр менән килдек. Рәсәйҙә беренсе тапҡырмын, Башҡортостан тураһында әлегәсә бөтөнләй ишеткәнем юҡ ине. Өфөгә килеп төшкәс, һеҙҙең илдең матурлығына, кешеләрҙең ябайлығына, ихласлығына хайран ҡалдым. Чемпионаттан һуң таға ла килергә ине, тигән теләгем ҙур. Шашканы беҙҙә яратып уйнайҙар. Европа халыҡтары менән тығыҙ аралашып йәшәү үҙ емештәрен бирә - беҙҙең шашкасылар донъя кимәлендәге чемпионаттарҙа уңышлы сығыш яһай.

**Фәрхәд Гусейнов, халыҡ-ара мастер, Әзербайжандың Баҡы ҡалаһынан:** Шашканы 12 йәшемдән уйнайым. 2005 йылда Амстердамда үткән донъя чемпионатында ҡатнашып, финалға сыҡҡайным. Рәсәй шашкасыларының көсө тураһында яҡшы хәбәрҙармын. Алексей Чижов, Александр Георгиев, Александр Шварцман, Айнур Шәйбәков менән бергә уйнауҙан ҡәнәғәтлек алам. Башҡорт егете Айнурҙы һуңғы тапҡыр бынан 6-7 йыл элек - уның үҫмер генә сағында күргәйнем. Бөгөн, күреүемсә, ул егет булып еткән, шашканы ла оҫтараҡ уйнай башлаған.

Шашка уйнау өсөн түҙемлек, тырышлыҡ һәм ҡайһы саҡ еңелә белеү ҙә кәрәк. Бөтә чемпиондар ҙа еңелеү аша үтә. Ултыраҡлыҡ та бик мөһим сифат. Оҙаҡ ултырып шөғөлләнә икән, иң һәләтһеҙ тип табылған кеше лә үҙенә оҡшаған өлкәлә уңышҡа өлгәшә ала. Оҙаҡ шөғөлләнеү өсөн мәктәп йә түңәрәк талап ителә. Тағы ла, үҙ алдыңа маҡсат ҡуя белеү ҙә беренсе урында торорға тейеш.

Башҡортостан тураһында уҡығаным бар, телдәребеҙ оҡшашлығы тураһында ла яҡшы беләм. Динебеҙҙең уртаҡ булыуы ла беҙҙең илдәр араһындағы туғанлыҡ ептәрен нығыта. Әзербайжан халҡының йәшәйешенә килгәндә, ул йылдан-йыл яҡшыра ғына бара. Күп кенә урындарҙа янынан-яңы эш урындары барлыҡҡа килә, шуға ла эш табыуы артыҡ ауырлыҡтар тыуҙырмай. Күп йәштәребеҙ сит илдәргә уҡырға китә лә, республикабыҙға кире әйләнеп ҡайтып, эш башлай. Башҡортостанға килгәс, мине ҡояшлы Өфө ҡалаһы, көләс йөҙлө кешеләр ҡаршы алды. Әлегә ҡала менән ентекләп танышып өлгөрмәнек, шулай ҙа батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәлен иң беренсе сиратта барып ҡараясаҡмын.

**Алишер Артыков, халыҡ-ара мастер, Үзбәкстандың Ташкент ҡалаһы:** Башҡортостанға үҙ ғүмеремдә тәүләп аяҡ баҫыуым. Мәктәптә уҡығанда милли батырыбыҙ Салауат Юлаев тураһында уҡыуыбыҙ хәтеремдә. Ул заманда беҙҙең элекке СССР дәүләте бар ине, халыҡтар бер-береһе тураһында яҡшы хәбәрҙар була торғайны. Хәҙер, нисектер, аралар һыуынып киткәндәй. Беҙҙең республикала хәлдәр күпкә яҡшыраҡ, минеңсә. Сәнәғәт тә, мәғариф та йылдам үҫә. Сит телдәрҙе өйрәнеүгә, балалар спортына бик етди ҡарайҙар беҙҙең илдә - президентыбыҙ етәкләгән махсус фонд ярҙамында был тармаҡҡа матди ярҙам мул килә, һөҙөмтәлә, балалар теләгән спорт түңәрәгенә бушлай йөрөй, спорт кәрәк-яраҡтары менән дә ошо фонд тарафынан ваҡытында тәьмин ителә. Ун биш-егерме йылдан был матур башланғыстың емештәрен татырбыҙ, тип ышанам. Бөгөнгө чемпионатҡа килгәндә, уны ҡала шау-шыуынан алыҫ ерҙә үткәреп, бик яҡшы эшләгәндәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Айнур Шәйбәков беренсе осрашыуҙа Кот д'Ивуар республикаһынан Ано Адонистан отолдо, икенсеһендә Камерун республикаһынан килгән халыҡ-ара гроссмейстер Жан-Марк Нджофанг менән тигеҙ иҫәпкә уйнаны. Өсөнсө турҙа Грузиянан Джумбер Берешвилиҙы еңде, дүртенсе, бишенсе һәм алтынсы турҙарҙа Германиянан Виталий Штумпф, Латвиянан Гантис Валнерис һәм Алексей Домчев менән тигеҙ иҫәпкә көс һынашты. Уйындар дауам итә...**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ағымдағы йылда Өфөлә өс яңы бассейн файҙаланыуға тапшырыла. Уларҙың берәүһе шәхси бассейн, икәүһе федераль һәм республика ресурстары иҫәбенә төҙөлгән. Был хаҡта ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә баш ҡала мэры Ирек Ялалов хәбәр итте. "Быйыл шәхси инвесторҙар иҫәбенә тағы дүрт бассейн төҙөлә башлаясаҡ. Шулай итеп, алдағы ике-өс йылда беҙҙә шәхси средстволар иҫәбенә төҙөлгән 10 яңы бассейн буласаҡ. Өфө өсөн был ҙур ҡаҙаныш", тип билдәләне Ирек Ялалов.

✓18 июндә Өфөлә XXVII Бөтә донъя йәйге Универсиада утын яғыу тантанаһы һәм Универсиада уты эстафетаһы үтә. Бөтә донъя йәйге Универсиада утын баш ҡала урамдары буйлап 38 кеше йөрөтәсәк. Улар араһында республиканың билдәле спортсылары, студенттары, иң яҡшы ирекмәндәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре бар. 7 километр 300 метр оҙонлоҡтағы Эстафета 15 сәғәттә Йәштәр һарайы эргәһендә старт ала. Колонна Октябрҙең 50 йыллығы, Цюрупа, Ленин, Коммунистик, Октябрь революцияһы, Пушкин, К.Маркс һәм З.Вәлиди урамдары буйлап Салауат Юлаев исемендәге майҙанға тиклем үтәсәк.

✓Киләһе аҙнала Рәсәй халҡын өҫтәмә ял көнө көтә. РФ Хеҙмәт кодексына ярашлы, 12 июнь - Рәсәй көнө - байрам һәм ял көнө булып тора. 2013 йылдың 11 июнендәге эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла.

✓12 июндә Өфөнөң Спорт һарайы алдындағы майҙансыҡта сираттағы ауыл хужалығы йәрминкәһе ойошторола. Йәрминкә барышында фольклор коллективтары һәм үҙешмәкәр артистар ҡатнашлығында концерт программаһы ойошторыласаҡ.

✓Баш ҡалала көнөнә 250 кешене ҡабул итеүгә иҫәпләнгән 8-се балалар поликлиникаһы филиалы асылды. Ул Черниковка биҫтәһендә Короленко урамында урынлашҡан. Был биҫтәлә оҙаҡламай яңы поликлиника һәм 13-сө дауахананың хирургия корпусы ла файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

✓БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы, төбәктең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы менән булдырылған "Медиапрофи" республика премияһында еңеүселәр 2013 йылдың ноябрендә билдәле була. "Медиапрофи" премияһы - яңы форматтағы ҙур төбәк проекты. 2013 йылда ул "Хеҙмәт кешеһе" темаһына арнала. Эштәр 2013 йылдың 10 ноябренә тиклем ҡабул ителә.

✓ *Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы студенттары ла был бәйгелә матур ғына уңыштарға өлгәште: команда - өсөнсө урынға, шәхси беренселектә 4 курс студенты Гөлсинә Килсенбаева икенсе урынға лайыҡ булды.*



*АФАРИН!*

**Яңыраҡ Алтай республикаһының баш ҡалаһы Таулы-Алтай ҡалаһында етенсе тапҡыр Бөтә Рәсәй студенттарының Рәсәй халыҡтары теле һәм әҙәбиәте буйынса (төрки төркөм) олимпиада уҙҙы. Унда Башҡортостан, Татарстан, Хакасия, Тыва, Саха-Яҡут һәм Алтай республикаларынан 8 команда ҡатнашты. Башҡортостан данын был сарала М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡорт дәүләт университеты һәм ошо уҡ уҡыу йортоноң Стәрлетамаҡ филиалы башҡорт филологияһы студенттары яҡланы. Өс көн барған һынауҙарҙан һуң М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы студенттарынан торған команда дөйөм төрки телдәрен, әҙәбиәтен һәм фольклорын иң яҡшы белеүселәр тип табылды. Дөйөм беренсе урындан тыш, командалағы һәр кем айырым номинацияларҙа ла билдәләнгән. Лилия Бадранова һәм Гөлзиә Наурыҙбаева "Иң яҡшы фәнни эш өсөн" номинацияһында икенсе дәрәжә дипломға лайыҡ булһа, Айтуған Ҡулансин - "Төрки телдәр грамматикаһын төплө белеүсе", Сулпан Мөхәмәтйәрова - "Әҙәби терминдарҙы оҫта ҡулланыусы" һәм Рида Тимершәйехова "Урал-Алтаистиканы яҡшы белеүсе" номинацияларында еңеү яулаған. Абруйлы саранан беренсе урын яулап ҡайтыусы студенттар менән осрашып, уларҙың тәьҫораттары хаҡында белештек.**

# АЛЫҪ АЛТАЙҘАН...

## оло еңеү менән



- Алыҫ Алтай республикаһына барып, туғандаш халыҡтар менән осрашып, аралашып һәм, иң мөһиме, еңеү яулап ҡайтыуыбыҙға ифрат шатбыҙ. Командабыҙ составындағы һәр кем был еңеүгә үҙенең тос өлөшөн индерҙе. Таулы-Алтай университеты тарафынан әҙерләнеп, Мәскәү дәүләт университеты уҡытыусылары һәм белгестәре тарафынан тикшереү үткән һорауҙар араһында ауыр һәм көтөлмәгәндәре йыш осраны, ләкин уҡытыусыларыбыҙ Әхмәр Аҙнабаев, Зөләйхә Хәбибуллина, Зәки Әлибаев, Әхмәт Дәүләтҡолов, Гөлнур Бохарова, Әхмәт Сөләймәнов һәм Вадим Толомбаевтар биргән төплө белем беҙгә юғалып ҡалмаҫҡа һәм дөрөҫ яуаптар табырға ярҙам итте. Беренсе көндә беҙ дөйөм төрки телдәре, ә икенсе һәм өсөнсө көндәрҙә, ярашлы рәүештә, дөйөм төрки әҙәбиәте һәм фольклоры буйынса төрлө һорауҙарға яуаптар бирҙек, тест һәм тәржемәләр эшләнек, ижади эштәр яҙҙыҡ. Олимпиада ҡаты контроль аҫтында үтте һәм кемдәндер күсереү кеүек мөмкинлектәр булманы. Бар яҡтан да ғәҙел уҙған сарала һәр кем тик үҙ белеменә генә таянып эш итте.

Алтайҙа Башҡортостан, Өфө, башҡорт халҡы, Мифтахетдин Аҡмулла, шулай уҡ беҙҙең университет хаҡында яҡшы беләләр һәм оло ихтирам менән телгә алалар. Шулай уҡ башҡорт халҡының фольклоры, халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыналар, уларҙы уҡыйҙар һәм өйрәнәләр. Олимпиадала, мәҫәлән, беҙҙең халыҡтың "Ҡуҙыйкүрпәс һәм Маянһылыу" эпосына, шулай уҡ ошо өлкәлә эшләгән ғалимдарыбыҙҙың китаптарына, ижадтарына ҡағылышлы һорауҙар булды. Беҙҙең еңеүҙән һуң артабанғы олимпиадаларҙа башҡорт халыҡ ижадын, телен һәм фольклорын яҡтыртҡан һорауҙар тағы ла күберәк булыр, тип ышанабыҙ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы студенттары ла был бәйгелә матур ғына уңыштарға өлгәште: команда - өсөнсө урынға, шәхси беренселектә 4 курс студенты Гөлсинә Килсенбаева икенсе урынға лайыҡ булды, Розалия Зарипова "Төрки халыҡтары әҙәбиәте һәм фольклоры өлкәһендә уңыштары өсөн" номинацияһында еңеү яуланы. Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы һәм Таулы Алтай дәүләт университеты хеҙмәттәшлеге бер-нисә йыл рәттән тормошҡа ашырыла. Быйыл март айында Таулы Алтай дәүләт университетының бер төркөм студенттары Стәрлетамаҡ филиалында стажировка үтһә, олимпиадала ҡатнашҡан башҡорт филологияһы факультеты студенттары ла Таулы Алтай дәүләт университетында белемдәрен камиллаштырҙы, тел һәм әҙәбиәт бәйләнештәрен өйрәнде, ғилми тикшеренеү эштәренә материал тупланы. Ярты айға яҡын һуҙылған был эшлекле сәйәхәттән көс-дәрт туплап, яңы маҡсаттар менән ҡайтты студенттар. "Ошондай олимпиадалар ойошторолоуы төрки халыҡтарының тарихи берҙәмлеген күрергә, халыҡ-ара ҡәрҙәшлекте, дуҫлыҡ ептәрен нығытырға ярҙам итә. Юғары уҡыу йорттары араһындағы хеҙмәттәшлек, стажировкалар буласаҡ тел һәм әҙәбиәт белгестәре өсөн яңы мөмкинлектәр аса, ғилми эҙләнеүҙәргә, ҡыҙыҡһыныуҙарға йүнәлеш бирә", - ти Алтайҙан ҡайтҡан студенттар Гөлсинә Килсенбаева, Айгөл Хисамова, Лилиә Ҡаразбаева, Тимур Рәхмәтуллин.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## УЛЫҢ - УЛ, КИЛЕНЕҢ НИ ТИЕР?

**Фатирымды улыма бүләк иткәндән һуң шунда уҡ йәшәргә ҡалырға ниәтем тураһында килешеүҙең берәй пунктында әйтеп китергә уйлағайным, нотариус, рента килешеүе төҙөү хәйерлерәк булыр, тип кәңәш бирҙе. Ошо турала аңлатма биреүегеҙҙе үтенәм.**

- Нотариус дөрөҫ кәңәш биргән. Фатирҙа йәшәргә ҡалыуға хоҡуғығыҙ тураһында рента йә булмаһа һатыу-һатып алыу килешеүҙәрендә пункт өҫтәтергә мөмкин. Бүләк итеү килешеүенә килгәндә, бүләк алыусының һеҙҙең алда бер ниндәй бурысы ла юҡ (уллыҡ бурысын иҫәпкә алмағанда, ләкин ул киленегеҙ йә башҡа туғандары йоғонтоһона бирелеп, фатирығыҙҙы һатып та ебәрә ала, кемде теләй, шуны теркәй, йәшәргә индерә аласаҡ бит), шуға күрә лә бүләк иткән милкегеҙ менән ғүмер буйы файҙалана алыуығыҙға ышаныс та юҡ. Фатирығыҙ менән ғүмер буйы файҙаланыуға хоҡуғыҙ тураһында айырым килешеү төҙөргә лә була, әлбиттә, ләкин был да һеҙгә йөҙ процент гарантия бирмәй. Бына ни өсөн нотариус һеҙгә рента килешеүе төҙөргә кәңәш биргән. Ә инде рента килешеүе буйынса, улығыҙ һеҙҙең рөхсәттән тыш фатирҙы һата ла, кемгәлер бүләк итә лә алмаясаҡ. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: әгәр улығыҙ өйләнгән икән, милек бүлешеү осрағы килеп сыҡҡан хәлдә, ҡатыны фатирҙың ҡап яртыһына дәғүә итәсәк. Ә инде бер ниндәй ҙә килешеү төҙөмәһәгеҙ, фатир улығыҙға мираҫ булараҡ тейәсәк(башҡа вариҫтар булмаһа). Тағы бер юл - улығыҙға васыят яҙыу, ләкин башҡа балаларығыҙ йә ирегеҙ бар икән, улар үҙ өлөштәренә дәғүә итергә хоҡуҡлы.

## МИЛКЕН ГЕНӘ ҺАТА АЛА

**Танышым 5 йылға ҡуртымға алған ерен миңә һатырға теләй, унда бер нәмә лә төҙөмәгән. Миңә был участканы һатып алырға буламы?**

- Танышығыҙ ер участкаһын милке итеп теркәткән хәлдә генә уны һеҙгә һата ала. Ә инде ошо уҡ участканы ҡуртымға алыуға хоҡуҡ һеҙгә ерҙе асыҡ һатыу ( публичный торг) иғлан ителгәс кенә бирелә, ә бының өсөн танышығыҙ үҙенең ҡуртым килешеүен өҙөргә тейеш. Әгәр ул ошо участкала йорттоң нигеҙен генә һалған хәлдә лә, тамамланмаған төҙөлөш объекты булараҡ, уны милке итеп теркәтеү хоҡуғына эйә булыр ине һәм шул саҡта ғына участканы арендалау хоҡуғын һеҙгә тапшыра алыр ине (РФ Ер кодексының 36-сы статьяһын ҡарағыҙ). Йортто төҙөп бөтөргәс, һеҙҙең был ерҙе милкегеҙ итеп теркәтергә хоҡуғығыҙ барлыҡҡа килер ине (РФ Гражданлыҡ кодексының 552-се статьяһы).

## БҮЛЕШЕҮЕ ЛӘ ИХТИМАЛ

**Оләсәйемдән мираҫҡа ҙур ғына дача ҡалғайны. Ирем менән айырылышырға булғас, ул ошо дачаны ла иҫәпкә алып, милек бүлешергә йыйына. Был законлымы?**

- Ир менән ҡатындың береһе өлөшөнә никахҡа тиклем йәки никах осоронда бүләккә, мираҫ итеп йәки башҡаса юл менән түләүһеҙ тейгән милек фәҡәт уның үҙенең милке булып иҫәпләнә (РФ Ғаилә кодексының 36-сы статьяһы). Кодекстың 37-се статьяһында иһә былай тип әйтелә: әгәр никах осоронда дөйөм сығымдар тотонолоп (мәҫәлән, ремонт өсөн), был милек хаҡын күтәреүгә булышлыҡ иткән осраҡта, ул уртаҡ милек тип танылырға ла мөмкин. Шуға күрә, әгәр ирегеҙ дачағыҙға тотонолған сығымдарҙы раҫлаусы ремонт- төҙөлөш материалдарына иҫәп чектарын, эшселәр, белгестәр менән төҙөгән подряд килешеүен, фотоһүрәттәр, шаһиттар күрһәтмәләрен суд иғтибарына туплап алып килһә, ҡарар уның файҙаһына сығарылыу ихтималлығын да белеп ҡуйығыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Баш ауыртыуҙан

❖ Таҙартылған бер бүлем һарымһаҡты икегә ярырға һәм шуның менән сикәләрҙе ыуырға.

❖ Арыш икмәген һындырғылап, ҡайнап сыҡҡан һыуҙа тоторға. Килеп сыҡҡан был бутҡаны сепрәккә һылап, маңлайға ябырға, икмәге кипмәҫ элек алыштырып торорға. Был ысулды 20 минут эшләһәң, баш ауыртыуы бөтә.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 1 баш һарымһаҡты таҙартып, иҙергә һәм 1 стакан таҙартылмаған көнбағыш майына ҡушып, ҡараңғы һалҡын урында 1 тәүлек торорға. Ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр ярты балғалаҡ һарымһаҡлы майға ярты балғалаҡ лимон һуты ҡушып эсергә. 1 ай дауаланғас, 3 аҙна тәнәфес эшләргә һәм дауалауҙы дауам итергә.

❖ Көнбағыштың кипкән япраҡтарынан һәм сәскәләренән торған 1 өлөш үләнгә 5 өлөш 40 градуслы спирт ҡойоп, төнәтмә эшләргә. Көнөнә ашар алдынан 2-3 мәртәбә 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Баш өйәнәге лә булғылап тора кешелә. Был осраҡта ваҡланған мелисса үләненә араҡы һалырға һәм 10 тәүлек буйы торорға, шунан һөҙөргә. Баш өйәнәге (мигрень) булғанда стакандың өстән бер өлөшө күләмендә һыу алып, уға бер балғалаҡ төнәтмә һалып, эсергә.

❖ Анальгин, курофен, парацетамол да файҙалы. Баш ауыртыуы ҡан тамырҙары ҡыҫылыуҙан икән - но-шпа, артериаль ҡан баҫымы түбән булһа-цитрамон йәки кофеин килешә.

❖ Иҙелгән гөлйемеште термосҡа һалып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға ла, 20-30 минут төнәтергә, эсергә, баш ауыртыуын бөтөрә.

## Көҙән йыйырыу

❖ Йоҡлар алдынан аяҡтарҙы йыуырға һәм табандарҙы лимон менән ышҡырға һәм ойоҡбаш кейеп ятырға. Иртәнсәк тә ошо процедураны ҡабатларға онотмағыҙ. 7-8 көндән көҙәндең нимә икәнен онотороғоҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Хәҙерге заман театр теле менән әйткәндә, Урал батыр эпосы сценарий булһа, һабантуй иһә ошо сценарийға ҡоролған тамаша була. Быының шулай икәненә башҡорт халыҡ ижадынан әллә күпме миҫалдар килтерергә була.***

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Ҡот саҡырыу.** Урта Урал башҡорттары ҡот ҡойғанда ишекте, тәҙрәләрҙе, усаҡ ауыҙын, мөрйәне, төнлөктө асалар. Аҡ таҫтамал тотоп, ҡот саҡыра башлайҙар. Шунан аҡ ҡурғашты алып, сүмескә бер аҙ май һалып иретәләр. Иреткәндә түбәндәге әпсенде әйтәләр:

*Ҡотом, кил, ҡотом, кил,*
*Тәҙрәнән сыҡһаң, тәҙрәнән кер,*
*Ишектән сыҡһаң, ишектән кер,*
*Мөрйәнән сыҡһаң, мөрйәнән кер,*
*Мейестән сыҡһаң, мейестән кер,*
*Баланың йөрәген ярһытма.*

Кил, ҡотом, кил! Әпсенде әйтеп, ҡотто саҡырып, баланың баш осонда иретелгән ак ҡурғашты һыуға һалалар. Ҡурғаш сәсрәмәһен, аҡҡа ҡот ҡунһын тип, балаға аҡтаҫтамал ябалар. Эттән ҡурҡһа, эт булып, ҡоштан ҡурҡһа, ҡош булып, кешенән ҡурҡһа, кеше булып төшә икән ҡот. Ҡото төшмәһә, килешмәне тип, тәҙрә, ишек яндарына килеп, тағы: "Ҡотом, кил, ҡотом, кил, ҡотом, кил!" - тип саҡырғандар. Ҡот төшһә, йомро ғына тәңкә йәки йөрәк кеүек була икән. Бер ерендә тишеге лә ҡала. Шул тишектән берәй еп үткәреп, ҡотто баланың муйынына тағалар икән. Бала төҙәлгәнсе, ҡот унын муйынында йөрөй, тиҙәр.

### Ололар ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Ҡарға ҡанаты менән имләү.** Башы йыш ауырыған кешенең башын, тәнен ҡарға ҡанаты менән һыйпап, шул ҡанатты эстән кейемдең күренмәгән еренә тегеп ҡуйғандар. Ҡайһы бер кешеләр ҡарғаның итен дә ашаған.

**Баш әпсене.** Иҙән аҫтында тимер бүкән, унын өҫтөндә ҡарсык, энәһе ҡоңғор, ебе ҡыҙыл, иметомо шул булһын! Тфү, тфү, тфү!

**Башты имләү.** Баш ауыртһа, башты йүкә менән бәйләйҙәр ҙә ҡолаҡ турыһынан һыҙалар. Йүкә ҡайһы яҡҡа оҙонораk, мейе шул яҡҡа ауған була. Ауһа, башҡа таҫтамал бәйләп, таҫтамалға һуғалар икән.

**Баш һылау име.** Сирләгән кешенең башын, аяҡтарын, мендәргә һалып, сикәләрен һылағандар. Ауырыуҙың йоҡоһо килһә, ятып йоҡлап алған. Терелгәс, уға күмәс менән сәй килтерәләр.

**Баш ауырыуынан бетеү.** Бетеүҙе баш ауыртһа - башҡа, үрмескә, бүтән ер ауыртһа, шул ергә тағаһын, һәр ауырыуҙың бетеүе төрлө була. Баш ауыртҡанға төрлө һыҙыҡтар менән өс юл яҙып, бетеү әҙерләгәндәр.

**Баш бетеүен сәскә үреү.** Бетеү - ул доға була. Ул доғаны сепрәккә өсмөйөшләп тегеп, бетеү итеп тағалар. Сәс үргәндә толомға ҡушып үрәһең.

**Төйөнгә һуғып имләү.** Мейе төшкәс, башты еп менән ҡоршайһың да маңлайҙан, елкәнән, ҡолаҡ турыһынан һыҙып билдәләйһең. Ҡара-ҡаршы билдәләрҙе тотоп ҡарайһың:

- Төштөмө? - тип һорайһың да һуғаһың, һорайһың да һуғаһың, һораған һайын теге кеше:

- Төштө, - тип яуап бирә. Шунан һуң башты үлсәп, епте өҙөп ташлайһың.

**Епте түңәрәккә элеү.** Мейе төшкәндә башты үлсәгән епте түңәрәккә элеп китһәң, баш ауыртыуы бөтә. Тик түңәрәккә элгәс, уға боролоп ҡарарға ярамай.

**Мейе төҙәтеү.** Мейе алға күскән булһа, имсе ултырғыстағы ауырыуҙың артына баҫҡан хәлдә, башты таҫтамал менән уратып ала ла уны елкәлә бороп ҡуя. Унан һуң, таҫтамалды һул ҡулы менән елкәлә тотоп, "Урыныңа ултыр!" тип, уң ҡулы менән һул ҡулына ҡаты итеп һуға башлай.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*РУХИӘТЕБЕҘ*

**Донъяла байрамһыҙ халыҡтар булмай. Сәнәғәте, фәне иң юғары бейеклектәргә күтәрелгән, йыһан киңлектәрен гиҙгән милләттәр ҙә, джунгли кеүек урман шырлыҡтарында берәү менән ҡатнашмай, үҙ донъяларында мәж килгән бәләкәй генә ҡәбиләләр ҙә, ниндәй ҙә булһа ваҡиғаға арнап, байрамдар үткәрә. Күренекле урыҫ ғалимы М.Бахтин байрамдарҙы, мәҙәниәттең иң тәүге төрө, ти. Ҡайһы бер ғалимдар, кешелек таш быуат замандарында уҡ байрамдар үткәргән, тигән фекерҙә. Йәғни, кешелек мәҙәниәте формалаша башлаған саҡтарҙа байрамдар ҙа формалаша башлаған, тиергә була. Борон-борондан байрамдарҙы ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға бәйләп, уларға арнап үткәрер булғандар. Был ваҡиғаларға ҡышҡы һыуыҡтар (селлә) бөтөп, йылы көндәр килеүе, сәсеүгә төшөү йәки сәсеү эштәренең тамамланыуы, көҙөн уңыш йыйып алыу, ҡышҡы һуғымдар башланыу кеүек ваҡиғаларҙы индерергә була.**

# БАШҠОРТ ҺАБАНТУЙЫ ТУРАҺЫНДА

Башҡорттар ҙа бик борондан үҙҙәренең тормош-көнкүрешенә, тәбиғәтенә яраҡлаштырылған байрамдар үткәрер булған. Бындай байрамдарға - ҡарғатуй (ҡарға бутҡаһы), кәкүк сәйе, наурыз, нардуған, һуғым кеүектәрҙе индерергә була. Ошондай эреле-ваҡлы байрамдарыбыҙ араһында иң көтөп алынғаны, төрлө мауыҡтырғыс тамашаларының күплеге, бай йөкмәткеһе менән айырылып торған байрам - ул һабантуйҙыр. Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы булыу сиктәренән сығып, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан бер байрамына әүерелде. Быға тик ҡыуанырға ғына ҡала.

Башҡорт һабантуйы тураһында фәндә иң тәүге мәғлүмәттәрҙе 18-се быуаттың урыҫ ғалимдары Георги, Лепехиндың хеҙмәттәренән табырға була. Мәҫәлән, Георги башҡорт һабантуйының эстәлеген тасуирлап яҙғандан һуң, сирмештәрҙә лә (хәҙерге мари халҡында - **З.Ә.**) һабантуйға оҡшаш байрам барлығын билдәләп киткән. Георгиның яҙмаларынан күренеүенсә, шул заман һабантуйының тамашалары һәм эстәлеге хәҙерге заман һабантуйы менән, дөйөм алғанда, тап килә, тип әйтергә була. Һабантуй, ғөмүмән, күп кенә төрки халыҡтарында бар. Мәҫәлән, башҡорт менән татарҙан тыш, нуғайҙар, ҡумыҡтар, ҡарасай-балҡарҙар ҙа уны байрам итә. Эстәлеге лә, ҡайһы бер айырымлыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, яҡынса тап килә, тип әйтергә була. Һабантуйҙы Себерҙә йәшәгән төрлө эреле-ваҡлы төрки телле халыҡтарҙың милли байрамдары менән сағыштырып тикшереү был милли байрамыбыҙҙың тамыры бик боронғо дәүерҙәрҙә һәм дөйөм бер тамырҙан икәнлеген күрһәтә. Мәҫәлән, яҡуттарҙа - ысыах, хакастарҙа -тон пайрам, тываларҙа -шагаа, алтайҙарҙа сагабайрам кеүектәр шундай уртаҡ тамырлы байрамдарҙандыр. Тарихтың тағын да тәрәнерәк осорҙарына күҙ һалһаҡ, боронғо һунндарҙың да беҙҙең һабантуй кеүегерәк байрам үткәреүе тураһында Ҡытай яҙмаларында мәғлүмәтттәр һаҡланған. Унан алдараҡ дәүерҙәрҙә шундай уҡ байрамды скифтарҙың, сактарҙың үткәреүе тураһында боронғо гректар яҙып ҡалдырған. Көнсығыш иран телдәренең береһендә һөйләшкән сактарҙың сарматтар, аландар кеүек үк, башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашыуы фәндә иҫбат ителгән бер факт булып, хәҙер быға берәү ҙә шик белдермәй. Тимәк, милли байрамыбыҙ - һабантуйҙы ата-бабаларыбыҙ беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк үткәргән һәм уның йәше бер нисә мең йыл иҫәпләнә, тип әйтә алабыҙ.



Был байрам ислам диненә ҡәҙәр үк, донъяла мифологик аң хөкөм һөргән дәүерҙә формалашҡанға күрә, уның эстәлеген дә башҡорт мифологияһынан сығып аңлатырға кәрәк. Шунһыҙ, беҙ һабантуйҙың эстәлеген тулыһынса аңлауға өлгәшә алмаҫбыҙ. Мине һабантуйҙың эстәлеге күптән, студент йылдарынан уҡ ҡыҙыҡһындыра ине. Ошо ҡыҙыҡһыныуым эҙләнергә, соҡсонорға мәжбүр итеп торҙо, һәм, ниһайәт, байрамдың семантикаһын аса алдым кеүек. Шуларҙы уҡыусыға тәҡдим итергә булдым.

Хәҙерге һабантуйҙар яҙғы сәсеү эштәре үткәс, ошо эштәргә йомғаҡ яһау кеүегерәк үткәрелә. Элек иһә, башҡорттар һабантуйҙы ҡар иреп, тау биттәрендә йәшел үлән ҡалҡып, ағастарҙа бөрөләр тулыша башлағас үткәрер булған. Был байрам башҡорттоң боронғо календарь байрамы булараҡ, тәбиғәттең терелеүен, тормоштоң яңырыуын һынландырған тамашаларҙан торған. Яҙ көндәре, тәбиғәт ҡышҡы йоҡонан уянып, донъя һәм кеше тормошо яңырған саҡта, башҡорттар һабантуйҙы байрам иткәндәр һәм уны әле лә байрам итәләр.

Һабантуйҙағы тамашаларҙан - ат сабышы (бәйге), йүгереү, көрәш, бейек текә бағана башына (һырғауылға) үрмәләү, көршәк ватыу, бер яҡ башы ергә ҡыялатып ҡаҙып ултыртылған, икенсе башына аҡ тәкә бәйләнгән сайҡалып торған бүрәнә аша үтеп, шул тәкә-бүләкте алыу, ике аяҡты ла тоҡҡа тығып, бер-береһен уҙа-уҙа йүгерергә маташыу кеүек тамашалар башҡорт һабантуйының мотлаҡ үткәрелергә тейешле ритуалдары. Борон замандарҙа был тамашаларҙың һәр береһенең башҡорт өсөн эстәлеге, мәғәнәһе (семантикаһы) аңлайышлы булған. Уларҙың тейешле итеп, тулы үтәлеше башҡорт донъяһының именлегенә йоғонто яһай, шуны тәьмин итә, тип ышанған боронғолар. Сөнки боронғо башҡорттоң уйлауынса, шулай уҡ башҡорттоң мифологик, этнографик, фольклор материалдарынан күренеүенсә, һабантуйҙа үткәрелгән тамашаларҙы донъя (Йыһан) яралған саҡта уларҙың иң боронғо ата-бабаһы Урал батыр башҡарған. Урал батыр өсөн улар тамаша ғына түгел, ә бөтә донъяны хаостан (дейеү, аждаһаларҙан) азат итеп, донъяны әҙәм балаһы һәм бүтән тере йәндәр имен-аман йәшәрлек хәлгә килтереү кеүек кеше атҡарып сыға алмаҫлыҡ ауыр эш булған. Йәғни, хәҙерге заман театр теле менән әйткәндә, Урал батыр эпосы сценарий булһа, һабантуй иһә ошо сценарийға ҡоролған тамаша була. Быының шулай икәненә башҡорт халыҡ ижадынан әллә күпме миҫалдар килтерергә була.

Боронғо замандарҙа һабантуйҙағы ике батырҙың көрәшен аҡ, саф, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше тип аңлағандар. Урал батыр эпосында Урал Ҡатил батша иленә барып сыҡҡас, был илдә үгеҙ менән көрәшеп, уны еңә һәм бөтә ҡара, яуыз көстәрҙе юҡ итә. Батырҙарҙың үгеҙ менән көрәше тураһында башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә телгә алына. Үгеҙ менән көрәш, ғөмүмән, төрки халыҡтарҙың бик борондан килгән йолаһы булған. Был турала ғалимдар күптән инде әллә күпме хеҙмәттәр яҙып сыҡты. Әлеге үгеҙ менән көрәш йолаһында үгеҙ ҡышты һынландырған, сөнки ул боронғо ата-бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштары буйынса, ҡыштың, теге донъяның символы булған. Шуға күрә, Урал батырҙың үгеҙ менән көрәшен һәм был көрәштә еңеүен яҙҙың ҡышты еңеүе тип аңларға кәрәк.

Борон шулай уҡ һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереү ярышының да үҙ мәғәнәһе булған. Хәҙер был бер ҡыҙыҡ һәм дә мәҙәк тамаша булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт этнографияһында

✓ Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән көрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр.



ярымтыҡ, шүрәле тигән әҙәм балаһына зыян килтерергә маташыусы мифологик заттар тураһында бихисап легендалар, риүәйәттәр һаҡланған. Боронғо башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, ана шул ярымтыҡ тигәненең күҙе лә, аяғы ла тик берәр генә, йәғни һыңар булған. Улар төндә атта йөрөргә яратҡандар, тип тә әйтелә фольклорҙа. Зәғифлек, боронғоларҙың уйлауынса, теге донъя менән бәйләнеште аңлатыусы бер символ. Теге донъя иһә, мифологик ҡараштар буйынса, ҡыш менән дә бәйле. Башҡорт ҡобайырҙарында "Ҡара ерҙең үлгәне - ҡар аҫтында ҡалғаны", тигән юлдарҙан ҡарҙың, ҡыштың үлем менән бәйле булыуын күрәбеҙ. Фәнни мәғлүмәттәрҙән ҡыш менән үлемдең борон синоним булараҡ йөрөүен беҙ бер башҡортта ғына түгел, һинд-иран телле һәм бүтән телле халыҡтарҙа ла күрәбеҙ.

Башҡорттарҙың боронғо инаныуҙары буйынса, теге донъяла ожмахҡа юлда сират күпере аша үтергә кәрәк. Был күпер аша үҙ ғүмерҙәрендә тик яҡшылыҡ, изгелек ҡылған кешеләрҙе аҡ тәкә үткәреп ебәрә, имеш. Беҙҙә әле лә, бик ныҡ өлкәнәйеп, йәшәргә күп ҡалмаған кеше тураһында кинәйәләп "Аяғына аҡ тәкә бәйләнгән ине", тигәнде ишетергә була. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, теге донъяла сират күпере аша үтергә күп ҡалмаған, тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа ҡыялатып ергә ҡаҙып ултыртылған, сайҡалып торған бағана аша үтеп, осона бәйләнгән тәкәне призға алыуҙы ана шул сират күпере аша уҙып, ожмахҡа әләгеүҙең символик бер һынландырылышы, тиеберәк аңларға була. Теге донъяла ниндәйҙер бер күпер аша үтеү тураһындағы инаныстар бик күп халыҡтарҙа бар.

Һабантуйҙың тағын бер мәҙәге - күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватырға маташыуҙы ла башҡорт мифологияһынан аңлатырға була. Этнографтарҙың материалдарынан күренеүенсә, яңы ваҡыт башланған мәлдә иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу, уларҙы ватыу, онтау йолаһы бик күп халыҡтарҙа бар. Күп кенә халыҡтарҙа, мәҫәлән, Европа халыҡтарында, шулай уҡ Урта Азияла йәшәгән тажик, үзбәктәрҙә яңы йыл башланыуҙы аңлатҡан Науруз байрамында был йола байрам шаярыуы булараҡ әле булһа үтәлеп килә. Был йоланың мәғәнәһе - иҫкене ватып, яңыға юл ярыу, сөнки, иҫке китмәй тороп, яңыға юл бикле. Башҡортта әле лә "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" тигән әйтем йәшәп килә. Быны мәғәнәһе - кемдер берәү үлеп, теге донъяға күсеп, урын бушатмай тороп, яңы тыуырға тейеш икенсе берәүгә урын юҡтыр.

Боронғо төркиҙәрҙең, шул иҫәптән, башҡорттарҙың мифологик ҡараштары буйынса, Тәңре йәшен уғы менән атып, табаҡтай күкте яра һәм шунан ғына йомортҡа ярылып, яңы йән эйәһе донъяға тыуған кеүек, донъя ярала. Был мотив башҡорт фольклорында бик яҡшы һаҡланған. Мәҫәлән, Буҙансы батыр, Ҡараса батыр, Етегән батыр әкиәттәрендә һәм башҡаларҙа Йүгерәк батыр йүгереү ярышында йоҡлап китә һәм уны уятыу өсөн батырҙың дуҫы уҡ менән Йүгеректең башына кейҙерелгән сүлмәкте (ҡаҙанды) яра ата. Шунан һуң Йүгерәк батыр уяна һәм хәҙерге тел менән әйткәндә, финишҡа беренсе булып килеп етә. Бында уҡ атыу шул уҡ йәшен уҡтың символы булһа, ә йоҡлап уяныуҙы үлеп һәм яңынан терелеү, яңынан йәшәй башлау, тип аңларға кәрәк. Ошоларҙан сығып, һабантуйҙағы көршәк ватыуҙы ла Тәңренең донъяны барлыҡҡа килтергән мәлдә уҡтан атып, өр-яңы донъяны барлыҡҡа килтереүенең символик һынланышы, тип аңларға була.

Һабантуйҙа бейек бағана (һырғауыл, һырғый тә әйтәләр - **З.Ә.**) башына менеп бүләк алып төшөүгә лә башҡорт мифологияһынан аңлатыу табырға була. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяуи ҡараштары буйынса, донъяның үҙәгендә Донъя тирәге (Донъя ағасы) үҫә, имеш. Был ағас яҡты донъяны аҫҡы һәм юғарылағы (күк) донъяларға тоташтырып тора. Ағастың тамыры - аҫҡы донъя, ә башы юғарылағы күк донъяһы менән тоташтырып тора. Был ағастың тамырына бик ҙур бер йылан оялаған, ә иң үрге осонда Сәмреғош оя ҡорған. Хәтерегеҙҙәлер, Аҡъял батыр әкиәтендә батыр егет Сәмреғоштың балаларын баяғы йыландан ҡотҡарғас, Сәмреғош батырҙы аҫҡы донъянан яҡты донъяға алып сыға. Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға (һырғауылға, һырғыйға) менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән көрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр. Бындайыраҡ йолалар донъялағы күп кенә халыҡтарҙың мифологик ҡараштарында булған һәм әле лә күптәрендә һаҡлана.

Һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның бик тә тәрән йөкмәткеһе бар һәм улар боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа мәғәнә менән башҡарылған. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе - донъялар имен, тәртиптә һәм ипле торһон тигән теләктәр. Тик ваҡыт үтеү менән уларҙың мәғәнәләре онотолоп бөткән, башҡорттар ислам диненә күсеп, һабантуйҙың төп мифологик нигеҙҙәрен һәм уны үткәреүҙең сәбәптәрен дә иҫтән сығарып, был байрамды матур һәм мауыҡтырғыс бер тамаша, тип кенә ҡарай башлаған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт фольклоры һәм этнографияһы материалдарынан сығып, һабантуйҙы халҡыбыҙҙың иң борондан килгән төп бер байрамы тип әйтә алабыҙ. Был байрамды боронғо ваҡыттарҙа башҡорттоң ата-бабалары булған сак, сармат, аландар, һунндар ҙа үткәрер булған. Тимәк, беҙ, башҡорттар, әле һанап киткән халыҡтарҙың туранан-тура вариҫтары булараҡ, был байрамды үҙ байрамыбыҙ тип байрам итәбеҙ.**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының ғилми хеҙмәткәре.**

*ШУНДАЙ БАЙРАМ*

# ТАРИХТЫҢ ЯҢЫ БИТЕМЕ?

**12 июнь - Рәсәй көнө, йәғни 2002 йылға тиклем аталып йөрөтөлгәнсә, Рәсәйҙең Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнө. Рәсәйҙе аҡыл менән аңлап булмай, тигәндәй, был датаның тәүге атамаһы нимәһе менән оҡшамағандыр, әммә илебеҙҙең үҙенсәлеге шунда - етәкселек, ялҡып китһә, бер тарихи датаның атамаһын тиҙ генә икенсеһенә үҙгәртеп, тарихты ҡабат яңы биттән "башлай".**

Яңыса атамаға эйә булғанға тиклем, халыҡта был байрам хаҡында төрлө ҡараш йәшәне. Ул ваҡыттағы социологик һорау алыуҙар рәсәйҙәрҙең уның асылын бөтөнләй аңламауын күрһәтә. Күптәр өсөн был дата сираттағы ял көнө, баҡсала ҡаҙыныу, дуҫтарың менән тәбиғәткә сығып күңел асыуға бер сәбәп кенә ине. Ил етәкселеге уны ҙур байрам итеп күрһәтергә, халыҡты төрлө саралар менән ылыҡтырырға тырышһа ла, әллә ни энтузиазм тойолманы.

2001 йылда Кремлдә сығыш яһап, ил президенты Владимир Путин: "Был документтан беҙҙең яңы тарих башланды. Граждандар азатлығы һәм ҡануниәттең өҫтөнлөгөнә нигеҙләнгән демократик дәүләт тарихы. Уның төп мәғәнәһе - граждандарҙың уңышы, етеш тормошо һәм именлеге", - тип белдерҙе. Ошонан һығымта яһағанда ла, Рәсәй көнө байрамы - азатлыҡ, барлыҡ кешеләрҙең закон һәм ғәҙеллек нигеҙендә тыныслығы, татыулығы байрамы, милли берләшеү һәм Тыуған илебеҙҙең хәҙергеһе һәм киләсәге өсөн дөйөм яуаплылыҡ символы.

"Панорама Евразии" фәнни журналының баш мөхәррире, философия фәндәре кандидаты Азат Бирҙин быны ниндәй фекерҙә был датаға ҡарата:

- "Суверенитет" һүҙе, ысынлап та, шуның менән үҙенсәлекле булды: уны һәр кем үҙенсә аңланы. Ғөмүмән, хоҡуҡ тәғлимәтендә һәм сәйәсәттә быға юл ҡуйылмаҫҡа тейеш, әммә ул ваҡытта уйын ҡағиҙәләре шундай ине. Башҡортостанда "суверенитет" атамаһы аҫтында киңәйтелгән автономияны күҙалланылар. Был аныҡ атама түгел, шулай ҙа тотош Рәсәй Федерацияһы буйынса ҡабул итергә тырышыуҙарынса, тарҡалған илдән уның бер ярсығының бүленеүен Бойондороҡһоҙлоҡ көнө тип атауға ҡарағанда аңлайышлыраҡ ине. Әлбиттә, Советтар Союзының фажиғәле тарҡалыуын "суверенитет алыу", йәғни бойондороҡһоҙлоҡ тип атау - абсурд һәм айыҡ аҡылды мыҫҡыллау ғына булды. Кемдән бойондороҡһоҙ булынды һуң? Баҡтиһән, үҙендең ысынлап бойондороҡһоҙ бөйөк держава роленән, үҙаллылығынан, ҡеүәтле иҡтисадынан, еңелмәҫ армиянынан, көслө фәненән, юғары мәҙәниәтенән, бушлай һаулыҡ һаҡлауҙан һәм белем алыуҙан һәм, ниһайәт, халыҡтар дуҫлығынан азат булыу икән. 2000 йылдарҙа был бәхәсһеҙ факт барыбер ҙә властың иң юғары даирәләрендә танылыу тапты. Ул ваҡытта Владимир Путин Союздың тарҡалыуын "XX быуаттың иң ауыр геосәйәси һәләкәте" тип атаны.

Эйе, СССР Конституцияһы "ҡануниәттең өҫтөнлөгөнә нигеҙләнгәйне". Хәҙер, ысынлап та, гражданлыҡ азатлығы күберәк. Ә демократияны һәр кем үҙенсә аңлай: бөгөнгө Ватан киңлегендә ул, мәҫәлән, әрләшеү һүҙе булып тора. Икенсе яҡтан, ил тарихында, ысынлап та, яңы дәүер башланды. Советтар Союзын элекке сағылышында бер нисек тә кире ҡайтарыу мөмкин түгел. Был фактҡа ниндәй генә мөнәсәбәттә булһаҡ та, быны аныҡ аңларға кәрәк. Хәл-торошто асыҡ аңламай тороп, үҙебеҙ яуаплы булған киләсәкте төҙөй алмаясаҡбыҙ. Беҙгә матур һүҙҙәр һөйләргә түгел, ә Башҡортостандың - Рәсәй Федерацияһы составында һәм Рәсәйҙең глобаль берләшмәлә үҙ бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡалыуы кәрәк. Быны өсөн дәүләттең дә, дөйөм йәмғиәттең дә ҡатмарлы һәм ентекле уйланған эшмәкәрлек алып барыуы зарур.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

XVII быуат уртаһынан башлап һәр ихтилал һайын башҡорттар меңдәрсә баш мал-тыуарынан яҙыуына ҡарамаҫтан, XVIII быуат аҙағына, И. Г. Георги һүҙҙәренсә, "һирәк булһа ла ябай кешелә лә 30 һәм 50-нән кәмерәк ат була; күптәрҙә йылҡы малы 500 баш иҫәпләнә, байҙарҙа иһә 1000, ҡайһы берҙәрендә 2000 һәм унан да күберәк ат була. Һарыҡтар һаны байҙарҙа аттар һанына тап килгән һәм унан да күберәк булған. Эре мал һаны байҙарҙа аттарҙың яртыһы иҫәбен тәшкил иткән. Барыһында ла тиерлек ҙур булмаған кәзә көтөүҙәре булған".

Шуға күрә П. И. Рычков үҙенең XVIII быуатҡа ҡараған "Башҡорт хәле тураһында фекерҙәр"ендә: "Башҡорттар үҙҙәре өсөн ер эшкәртеүҙә ихтыяж күрмәйҙәр. Сөнки бик күпләп мал тоталар, ғәҙәттә, ит, һөт һәм ҡорот менән туҡланалар", - тип яҙған. Хатта бер ни тиклем һуңыраҡ та, XIX быуат урталарында, башҡорттарҙа ер эшкәртеү үҫешә башлағас, кантон идаралығы ваҡытында яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса башҡорттарҙа ярты миллион ат, шунса уҡ һарыҡ, 300 мең баш самаһы эре мал һаналған. XIX быуат һуңында ла Урал аръяғы башҡорттарының күптәре көтөүҙәрен һәм табундарын йөҙәр баш менән иҫәпләгән.

Йорт хайуандарының барлыҡҡа килеүе һәм башҡорттарҙың боронғо малсылыҡ хужалығы тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ. Беҙгә боронғо (беҙҙең эраға тиклем икенсе мең йыллыҡтың аҙағы) йорт аттары бәләкәй буйлы булыуы билдәле. Ялан башҡорттарының ҡырағай аттарға һунар итеп, уларҙы ҡулға эйәләштереүе лә шик тыуҙырмай. 1738 йылда обер-егермейстер Волынский, императрица Анна Иоанновнаға ҡырағай аттар- тарпандар йөрөгән ерҙәр тураһында мәғлүмәт биреп, Башҡортостан, Уралдың аръяғы тураһында ла иҫкә ала. XVIII быуат һуңында Урал аръяғында ҡырағай аттарҙың йәшәүен күрһәтеүсе мәғлүмәттәр ҙә бар.

Әгәр Урал аръяғының ҡырағай аттары хәҙерге башҡорт аттарының туранан-тура тоҡом башы булмаһа ла, улар Башҡортостанда борондан билдәле йорт аттары менән ҡушылыуы ла мөмкин. Башҡорт аттары араһында бер-береһенән бер ни тиклем айырылып торған өс төрҙө билдәләргә мөмкин: таулы райондарҙа менге аттары; көньяҡ райондарҙа - ялан менге аттары; көнбайыш райондарҙа - эре, екке аттары.



Башҡорт тоҡомло аттар Урал алды рус аттарынан һәм ҡаҙаҡ тоҡомонан айырылып торған. Улар тәпәш буйлы, ҙур башлы һәм йомроланған моронло; йөндәре ҡалын, тупаҫ, ҡышын оҙон булған. Башҡорт аттарының кәүҙәһе уртаса оҙонлоҡта, хатта ҡыҫҡа булған; тән мускулдары, аяҡтарыныҡы кеүек үк, ныҡ үҫешкән. Уртаса оҙонлоҡтағы арҡаһы тура йәки саҡ ҡына ауышып һигеҙгүҙгә барып тоташҡан. Ғөмүмән, башҡорт тоҡомло аттар үҙенең сыҙамлығы һәм шәп сабыуы менән айырылып торған. Башҡорт аттары араһында бик йыш ныҡ ҡиммәт баһаланған юрғалар осраған.

**1990-1991 уҡыу йылында илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа барған ыңғай үҙгәрештәр юҫығында Сибай ҡалаһында Башҡорт дәүләт педагогия институтының "Мәктәпкә тиклемге тәрбиә педагогикаһы һәм психологияһы" һәм "Башланғыс белем биреү педагогикаһы һәм методикаһы" тигән ике факультет асыла. 1993 йылда Башҡорт дәүләт университетының юридик факультеты, ә 1994 йылда финанс-иҡтисад бүлеге асыла. 1998 йылда ошо ике юғары уҡыу йортоноң факультеттарын бергә ҡушыу һөҙөмтәһендә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты барлыҡҡа килә. Әйтергә кәрәк, ике тиҫтәнән ашыу ваҡыт арауығы юғары уҡыу йорто өсөн әллә ни ҙур түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо ваҡыт эсендә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй күләмендә лә киң билдәлелек яулап өлгөрҙө. Һәр юғары уҡыу йорто 5 йыл һайын "Рособрнадзор" федераль хеҙмәте аша аккредитация үтеп, лицензияһын яңыртып торорға тейеш. Был осраҡта беҙ нимәгә шаһит булдыҡ: федераль хеҙмәт үткәргән экспертиза һөҙөмтәләре буйынса Сибай институты Рәсәй Федерацияһындағы ошондай типтағы юғары уҡыу йорттары араһында һәр ваҡыт алдынғылар рәтендә килде. Быйыл көҙ институт сираттағы аккредитация үтәсәк. Институт етәкселеге һәм мәғариф өлкәһендәге белгестәр сибайҙарҙың был уңышының нигеҙе - уҡыу йортонда хөкөм һөргән тәртиптән, тигән фекерҙә. Өфөнән, Мәскәүҙән, Ырымбурҙан, Магнитогорскиҙан, Силәбенән килеүсе ғалимдар Сибай институты студенттарына ҡарап : "Эх, минең дә ошондай студенттарым булһа ине", - тип һоҡланыу белдереүе билдәле. Институт студенттары 100 проценты менән дәрескә йөрөй, башҡа уҡыу йорттарындағы кеүек, ирекле йөрөү тигән төшөнсә бында бөтөнләй юҡ. Бары тик яҡшы билдәләренә өлгәшеүселәр генә бындай хоҡуҡҡа эйә. Институт китапханаһы интернет селтәренә тоташтырылған, йәғни студенттар донъялағы һәр төрлө сығанаҡҡа, китапҡа йә дәреслеккә туранан-тура сығыу мөмкинлегенә эйә. Интернет каналы аша үткәрелгән тест һынауҙарында ла Сибай студенттары башҡа юғары уҡыу йорттарына ҡарағанда иртәрәк ҡатнаша башлай. Был юл менән студенттар үҙҙәренең белемен үҙҙәре һынай ала. Бынан тыш, институт студенттары илебеҙ буйынса ла, сит илдәргә лә төрлө фәнни конференцияларға барып, конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашып, еңеүҙәр яулай. Институт территорияһында тәмәке тартыу ҡәтғи тыйылған. Студенттар үҙҙәренең исем-шәрифе яҙылған бейджик менән йөрөй һәм коридорҙа осраған оло кеше, уҡытыусы менән мотлаҡ рәүештә һаулыҡ һораша.**

**Әммә, үкенескә күрә, донъяла, илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа күҙәтелгән иҡтисад көрсөгөнә бәйле оптималләштереү-яраҡлаштырыу күренештәре был уҡыу йортона ла ҡағылмай үтмәй, улай ғына ла түгел, бына быйыл уҡ беренсе курсҡа студенттар ҡабул итеү мөмкинлегенә кәртә ҡуя. Институттың тормошона бәйле ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты директоры, техник фәндәр кандидаты, иҡтисад фәндәре докторы профессор Зиннур Ғөбәйҙулла улы ЙӘРМӨХӘМӘТОВ фекер йөрөтә.**

# ИТӘК ҠЫРҠЫП, ЕҢ ЯМАУМЫ,

## йәки Сибай институтына аҡса бүлмәү республика иҡтисадын күпмегә байытасаҡ?



### Юғары белемгә - йәшел юл

Үткән быуаттың 90-сы йылдарына тиклем Башҡортостанда башҡорт милләте юғары белемле кешеләрҙең һаны буйынса иң аҙаҡҡы урында килә ине. Хәҙерге аграр университет, ул саҡтағы Башҡортостан ауыл хужалығы институтында Урал аръяғындағы 8 районда уҡыусыларҙың дөйөм һаны бер Шишмә районынан уҡыусы студенттарҙың һанынан да кәмерәк ине. Шулай уҡ был райондар мәктәптәрендә ни бары 4 кенә махсус белемле (юғары белемле түгел) музыка уҡытыусылары иҫәпләнде, физкультура уҡытыусылары араһында ла юғары белемлеләр бөтөнләй юҡ ине. Шулай уҡ 90-сы йылдарҙа юғары уҡыу йортон тамамлаусы башҡорттарҙың 75 проценты медицина, сәнғәт, педагогия институттарында, Башҡорт дәүләт университетында белем алыусылар ине. Уларының да иң ҙур өлөшө институттарҙағы һәм университеттарҙағы башҡорт факультеттарына тура килде. Ә инде ул саҡтағы Өфө авиация техник институтына уҡырға инеүселәр бармаҡ менән һанарлыҡ ине.

Башҡорттар араһында юғары белемле кешеләрҙең аҙ булыуы иң беренсе нәүбәттә улар күпләп йәшәгән райондарҙың баш ҡаланан алыҫта урынлашыуына бәйле булды. Был төбәктә ғаиләләрҙә балалар һаны күп булыуға ҡарамаҫтан, әйтәйек, Өфөлә белем алыу өсөн атаәсәнең финанс мөмкинлеге бары тик бер балаға, уҙа барһа, ике балаға ғына етә торғайны. Ул саҡтарҙа сәнәғәт, иҡтисад, финанс, нефть һәм газ етештереү өлкәләрендә, хоҡуҡ һаҡлау органдарында башҡорт милли кадрҙарының етешмәүе лә юғары белем алыуға бәйле булыуы бер кемгә лә сер түгел. Мин ҡала хакимиәтендә эшләгән саҡта ауыл хакимиәттәре, колхоз-совхоз етәкселәре туҡтауһыҙ беҙҙән теге йәки был һөнәргә эйә булған кадрҙар, башлыса юристар һорай торғайны. Кадрҙар ҡытлығы мәсьәләһе беҙгә башҡорттар компактлы йәшәгән күрше Силәбе, Ҡорған, Ырымбур өлкәләрендә лә күҙәтелде.

Аллаға шөкөр, тип әйтәйек, Сибай ҡалаһында ошондай уҡыу йортоноң асылыуы, дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт милләтенә юғары белемгә юл асты. Институт асылғандан алып беҙҙең уҡыу йортонда 11 меңдән ашыу йәш кеше юғары белемгә эйә булды. Әгәр ҙә ошоларҙың 80 проценты башҡорт милләтенән булыуын иҫәпкә алғанда, дөйөм милләт фонында юғары белемдең ниндәй кимәлгә артҡанын тоҫмалларға булалыр. Бынан тыш, Сибай институты асылыуы ҡалала Башҡорт дәүләт аграр университеты филиалын асыу мөмкинлеген дә бирҙе. Шулай уҡ был йылдарҙа Троицкиҙағы ветеринария академияһы менән килешеү нигеҙендә 1 меңдән ашыу йәш кешене уҡытып сығара алдыҡ.

### Һөҙөмтәле уҡыу йорто

Бөгөн бер генә хеҙмәт биржаһында ла Сибай институтын тамамлаған студенттар эш урыны таба алмайынса иҫәптә тормай. Уртаса алғанда беҙҙең уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 90 проценты шундуҡ үҙ һөнәре буйынса эшкә урынлаша. Ә инде ҡалған 10 процентты кейәүгә сығып, бала табыусылар, аспирантураға китеүселәр, икенсе һөнәр һайлаусылар тәшкил итә. Ә ил буйынса юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 60-70 проценты ғына һөнәре буйынса эшкә урынлаша. Был йәһәттән беҙ һөҙөмтәһеҙ юғары уҡыу йорто исемлегенә инмәйбеҙ. Беҙҙең студенттар, уҡып бөткәс, Өфөгә бара икән, унда уларҙың тартып тороусы, эшкә урынлашырға ярҙам итеүсе кешеләре булмауға ҡарамаҫтан, баш ҡаланы тиҙ яулайҙар һәм бик тиҙ генә үҫәләр, карьера яһайҙар. Сөнки беҙ уларға белем, һөнәр биреүҙән тыш, үҙаллылыҡҡа һәм эш эшләргә өйрәтәбеҙ. Йыл һайын уҡыу йортон тамамлаусы 40-50 йәш кеше Өфөгә эшкә урынлаша. Беҙҙә уҡыған студенттар һәр урында ла бер-береһен таный, белә, бер-береһенә ярҙам итергә тырыша. Урал аръяғы төбәгендә лә барлыҡ етәксе урындарҙа ла тиерлек беҙҙең элекке студенттар эшләй. Ошо төбәктең юғары уҡыу йортонда уҡыған һәр 3 студенттың 2-һе беҙҙә белем алыуын иҫәпкә алғанда, уларҙың төбәк тормошонда тотҡан урынының ни кимәлдә икәнен билдәләп булалыр.

Беҙҙә иҡтисад белеме алыусы студенттар һуңғы ун йылда Башҡортостан кимәлендә генә түгел, Рәсәй, донъя кимәлендәге конкурс-фестивалдәрҙә уңышлы сығыш яһай. Әле улар Рәсәйҙең данын Сингапурҙа яҡлап ҡайтты. Беҙҙең студенттар шулай уҡ Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары араһында "Ирекле эшҡыуарлыҡтағы студенттар" тигән конкурста еңеп сығып, Башҡортостан исемен Мәскәүҙә алты бизнес проекты менән яҡланы. Быйыл Тывала уҙған төрки халыҡтарының Бөтә донъя фестивалендә беҙҙең студенттар беренсе урын яулап ҡайтты.

Сибай ҡалаһы кимәлендә генә ҡарағанда ла, суд рәйесе, ҡала прокуроры беҙҙә уҡыны, шулай уҡ Өфөлә, башҡа райондарҙа беҙҙең студенттар ҙур урындарҙа эшләй. Әгәр ҙә беҙҙең уҡыу йорто булмаһа, улар бындай дәрәжәләргә өлгәшә алыр инеме икән?

### Яңы йүнәлеш

Мәскәүҙән тороп, һөҙөмтәһеҙ юғары уҡыу йорттарының исемлеген төҙөүселәр теге йәки был уҡыу йортон тамамлаусыларҙың алған һөнәре буйынса эшкә урынлашыу-урынлашмауын төп сәбәп итеп килтерә. Әлбиттә, был ҙур проблема һәм ул иң беренсе нәүбәттә илебеҙ иҡтисадының һөҙөмтәһеҙ булыуына бәйле. Ошо хәлдә иҫтә тотоп, беҙ үҙебеҙҙең институтта "Эшҡыуарлыҡ технологияһы" тигән һөнәр булдырҙыҡ. Был яңылыҡтың үҙенсәлеге нимәнән ғибәрәт һуң? Был һөнәрҙе үҙләштереүселәр беҙҙең уҡыу йортон тамамлағандан һуң эш урыны эҙләмәй, ә үҙҙәре үк эш урыны булдыра. Улар бәләкәй эшҡыуарлыҡтың төрлө йүнәлештәре буйынса үҙ эштәрен асып, үҙҙәренән тыш тағы ла 10-20-30 кешегә эш урындары барлыҡҡа килтерә. Хатта йөҙәрләгән кешегә эш урындары табыусылар ҙа бар беҙҙең элекке студенттар араһында. Ағас, таш эшкәртеү буйынса 30-40 кешелек бәләкәй предприятиелар ойоштороусылар араһында беҙҙең студенттар бик күп. Ошо рәүешле беҙҙең

милләттән эшҡыуарҙар күренә башланы. Улар бар, әммә әлегә барыбер ундайҙар етешмәй. Был беҙҙең институт эшмәкәрлегенең мөһим бер моменты һәм беҙ был йүнәлеште киләсәктә тағы ла киңәрәк йәйелдерергә иҫәп тотабыҙ.

Бынан тыш, был төбәктә тау инженерҙары, руда эшкәртеүселәр, энергетиктар, экологтар етешмәй. Шуға ла киләсәктә был йүнәлештә лә белгестәр әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуябыҙ.

### Башҡаса юл юҡ

Беҙҙә бюджет урындары күп түгел. Етмәһә, быйыл беҙ Рәсәй Федерацияһында иң түбән хаҡҡа уҡытып килдек. Шуға күрә, беҙ ошоға тиклем, беҙгә оптималләштереү ҡағылмаҫ, тип уйлап йәшәнек. Әммә быйыл беҙгә уҡырға инеүселәр өсөн республика бюджетынан финанс бүленмәйәсәге хаҡында белдерҙеләр. Сәбәбен дә аңлаттылар: республика бюджетының ҡойтолого. Нимә, беҙгә ана шул 170-200 бюджет урынын бирмәйенсә, шул аҡсаға республиканың иҡтисадин үҫтермәксе булалармы икән? Минеңсә, бында икенсе бер сәйәсәт барғанға оҡшаған. Әгәр ҙә бюджет урыны быйыл бирелмәһә, икенсе йылға кисектерелһә, өсөнсө йылға ул бөтөнләй булмаясаҡ бит. Әгәр ҙә түләп уҡытыу мәсьәләһен ҡуҙғатһаң, беҙҙең төбәк республиканың иң ярлыларының береһе һанала. Республика кимәлендә уртаса эш хаҡының иң түбәне лә беҙҙең төбәктә. Был төбәктә сәнәғәт тә үҫешмәгән. Шуға күрә Рәсәй хөкүмәте беҙҙә коммерция нигеҙендә уҡыусылар өсөн йыллыҡ түләү хаҡын 60 мең итеп ҡуйҙы. Ә беҙҙең ҡайһы ата-әсә балаһын ошо сумманы түләп уҡыта ала һуң? Әгәр ҙә беҙ бығаюл ҡуйһаҡ, ата-әсә балаһын да, ейән-ейәнсәрҙәрен дә уҡыта алмаясаҡ һәм тиҙ арала белемһеҙ династиялар хасил буласаҡ. Шуға күрә беҙ институтта бюджет урындарын һаҡлау буйынса мәсьәләне ныҡ итеп ҡуйырға бурыслыбыҙ. Мин бында башҡаса альтернативаны күрмәйем.

Республика кимәлендә был хәлгә Сибай институты һәм Нефтекама филиалы эләгә. Республиканан беҙгә һәм уларға бирелгән бюджет урындарын йыл һайын ҡыҫҡартып килделәр ҙә, быйыл бөтөнләй булмай, тип хәбәр һалдылар. Был хакта ишетеп ҡалып, беҙгә ата-әсәләр күпләп мөрәжәғәт итә башланы.

Әле Башҡортостан Хөкүмәтенең Урал аръяғын үҫтереү буйынса махсус программаһы ҡабул ителде. Әгәр ҙә был төбәктә йәшәүселәргә юғары белемгә юл ябылһа, был программаны тормошҡа ашырыу мөмкин булмаясаҡ, тип иҫәпләйем. Ә бит беҙҙең институттағы 200 урынды һаҡлап өсөн бюджеттан ни бары 3 миллион 600 мең һум ғына аҡса кәрәк буласаҡ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Зиннур Ғөбәйҙулла улының әңгәмәһенән шундай һығымта яһарға була: Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтын һаҡлап ҡалыу бер Урал аръяғын һәм уның халҡын ғына түгел, тотош башҡорт халҡын һаҡлауға, яҡлауға һәм үҫтереүгә тиң хәстәрлек булырға тейеш. Әгәр ҙә мәсьәләгә ошолай итеп ҡарағанда, мөғайын, итәк ҡырҡып ең ямауға юл ҡуйылмаҫ, тигән тәрән ышаныс та бар.**

**Баш ҡалалағы был белем усағы башҡаларҙан шул яғы менән үҙенсәлекле - ул заманында 20-се ҡала башҡорт мәктәбенән айырылып сығып, Инорс биҫтәһендә, Өфөнөң эшселәр районында асыла. Уны астырыу өсөн Мөхәммәт Исҡужин, Мәрйәм Бураҡаева, Тимерхан Миңлеғәлиевтар ҙур көс һала. Әммә ул ваҡытта белем усағында башҡорт балалары ғына түгел, рус балалары ла уҡыған һәм улар телде өйрәнеп, мөмкин тиклем башҡортса һөйләшергә тырышҡан. Һуңынан, суверенитет яулаған йылдарҙа, мәктәп 140-сы башҡорт гимназияһы итеп үҙгәртелә. Бөгөнгө оптималләштереү осоронда, балалар һанын һаҡлап ҡалыу маҡсатынан, унда рус балалары ла уҡырға ҡабул ителә. Хатта быйылғы уҡыу йылында белем усағы тарихында тәүге тапҡыр беренсе синыфта рус класы асыла. Уҡыусылар каникулға таралышыр алдынан уларҙың иң әүҙемдәре, мәктәптең йөҙөк ҡашы булған Ҡарлуғас Исмәғилева (7-се класс), Элина Арыҫланова, Салауат Төхвәтуллин (9-сы), Алина Нафиҡова (9-сы), Регина Яфаева (10-сы) менән осрашып, балаларҙы ғына түгел, өлкәндәрҙе борсоған, ниндәйҙер кимәлдә ололар ҙа яуап тапмай баш ватҡан һорауҙар буйынса фекер алыштыҡ.**

# ЭЛЕК БЕРҘӘМЛЕК БУЛҒАН...

## хәҙер һәр кем үҙе өсөн йәшәй

**▶ Минең өсөн туған тел - ул...**

**Элина:** ...үҙ халҡымды, атабабаларҙы хөрмәт итеү һәм башҡа халыҡтарҙан айырыу билдәһе, дөйөмләштереп әйткәндә, йәшәү рәүеше. Әгәр туған телебеҙ булмаһа, сәнғәтебеҙ генә түгел, мәҙәниәтебеҙ ҙә юҡҡа сығасаҡ. Беҙҙең телебеҙ шундай матур. Интернет селтәрендә уҡыным: донъяның иң матур телдәре араһында башҡорт теле тәүге өс урындың береһен биләй. Ошо турала белгәс, минең түбәм күккә тейгәндәй булды! Башҡорт булыуым менән ғорурландым. Күңелемдә шундай рәхәтлек тойғоһо биләп алды.

**Салауат:** ...беҙҙең тормошобоҙ, тарихыбыҙ. Башҡортостанда йәшәйбеҙ һәм телебеҙ башҡорт әҙәбиәтенең генә теле түгел, ул быуындарбыуынға килгән тарих. Ата-олаталарыбыҙҙың көнкүрешен сағылдырыу ҡоралы, уларҙың аҡылы, уларҙың тәжрибәһе. Тел аша беҙ уларҙың рухи байлығын үҙебеҙгә күсереп алабыҙ.

**Ҡарлуғас:** ...туғандарын менән аралашыу ҡоралы, күнелеңдәге кисерештәрҙе башҡаларға еткереү ысулы.

**Регина:** ...әсә теле. Беҙ хатта әле донъяға тыумаған саҡта ла әсәй менән тығыҙ бәйләнештә торабыҙ. Һәм телебеҙ ошо бәйләнеште, тимәк, ата-әсәләрҙе оноторға ярамай икәнлеген иҫкәртеп тороусы ла ул.

**▶ Тағы бер уҡыу йылы тамамланды. Уның һөҙөмтәләре менән үҙегеҙ ҡәнәғәтһегеҙме? Йылығыҙ уңышлы булдымы, ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәштегеҙме?**

**Регина:** Быйылғы уҡыу йылы минең өсөн уңышлы булды. 8-9-сы синыфтарҙа уҡығанда алгебра фәнен бигүк аңлап еткермәй инем. 10-сы синыфҡа килгәс, тик "бишле"ләр ала башланым. Минең өсөн бына ошо "бишле"ләр - алдыма ҡуйған маҡсат ине.

**Элина:** Шулай уҡ төрлө конкурстарҙа ҡатнашыуымды, Бөтә Рәсәй олимпиадаһында рус теленән дүртенсе урын яулауымды оло ҡаҙаныш тип иҫәпләйем.

**Салауат:** Йылдан-йыл белем алыу ауырлаша бара. Быйыл имтихандар ҙа икенсе төрлө форматҡа күсә. Яңынан-яңы әсбаптар, күргәҙмә материалдар менән файҙаланабыҙ, уларҙы ҡайһы бер кеше аңлап та, үҙләштереп тә өлгөрмәй һәм артта һөйрәлә башлай. Өлгәшмәүҙәр йәйләп йыйылып-йыйылып, ҙур проблемаға әүерелә. Күңелең төшә, уҡыуға дәрт һүнә. Минең өсөн дә йыл ауыр булды, әммә күңелдәге, уҡырға, тырышырға кәрәк, тигән сәм бер ваҡытта ла ташламаны, һәр көнөмдө планлаштырып, булған ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алдым. Был минең үҙ-үҙемде лә енеүем булды.

**Алина:** Гимназияла уҡыуыма әле ике йыл ғына, ләкин шул арауыҡта мин ҡайһы бер хыялымды тормошҡа ашырғанмындыр, тим. Мәҫәлән, ауылдан күсеп килгәндә "өслә"ләрем бар, улар өсөн үҙемә ҡыйын да, оят та ине. Уларҙы бөтөрөүгә өлгәштем.

**Ҡарлуғас:** Быйылғы уҡыу йылында мин "Аманат" журналының йәш хәбәрсеһе булдым. Апрель аҙағында М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында "Саф фән" тип аталған республика конференцияһы үтте. Унда сығыш яһап, икенсе урын алдым.

**▶ ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәренең береһе булараҡ, башҡа мәктәптәрҙән нимәһе менән айырыла һеҙҙең белем усағы?**

**Элина:** Күберәк мөмкинлектәр асыла. Бына мин апрелдә 98-се мәктәпкә ЮНЕСКО ойошторған сарағa барҙым һәм миңә ул шул тиклем оҡшаны. Оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде, ҡурсаҡ тегергә өйрәттеләр, ҡытай телендә уҡыттылар. Күптәр менән таныштым. Ябай мәктәп уҙ уҡыусыларына бындай мөмкинлектәр тәҡдим итә алмай.

**Регина:** Мин етенсе синыфта уҡығанда Ханты-Манси ҡалаһына халыҡ-ара конференцияға барҙым. Унда төрлө төбәктәрҙән, төрлө милләт балалары йыйылғайны: шведтар, чехтар, украиндар һ.б.

**Салауат:** ЮНЕСКО мәктәбе булыу балаларға ғына түгел, мәктәпкә лә абруй өҫтәй, баш ҡала кимәлендә башҡалар менән сағыштырыу мөмкинлеге бирә. Балаларҙы ылыҡтырыу өсөн дә ыңғай сара булып тора. Сөнки ул бар яҡтан да мәктәптең йөҙөн күрһәтә һәм балалар үҙҙәре үк ошо мәктәпкә ылыға, тартыла.

**▶ Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Рәсәй интеллект буйынса донъяла беренсе урында торһа, бөгөн иң һуңғылар рәтендә, тиергә мөмкин. Быңың сәбәптәре нимәлә, һеҙҙеңсә?**

**Регина:** Беҙҙең география уҡытыусыһы һәр саҡ әйтә: үҫешкән ҙур илдәр етәкселәре башҡа илдәрҙең белемле, аҡыллы, оло асыштар яһарға һәләтле белгестәрен үҙҙәренә йәләргә һәм эшләргә саҡыра.Рәсәйҙең аҡыллы баштары шулай ситкә аға. Ахырҙа, шулай килеп сыға, улар Рәсәйҙә нимәгә өйрәнгән, уны улар ил мәнфәғәтенә түгел, икенсе илдәр файҙаһына ҡуллана. Илдә бары тик патриоттар ғына ҡала, әммә ундайҙар ҙа кәмей бара.

**Элина:** Рәсәйҙең проблемалары бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән: эш урындары юҡ, йәштәр китә, илдә интеллект кимәле түбәнәйә. Беҙҙә теләгән ерендә уҡырға мөмкин, юғары белем алыу системаһы ла тейешле кимәлгә ҡуйылған, әммә йәштәргә эш табыуы ауыр. География уҡытыусыбыҙ сит илдәрҙә күп йөрөй һәм уның һөйләүенән шундай һығымтаға килергә мөмкин: сит илдәрҙә етәкселек халыҡ өсөн эшләй, ә беҙҙә, киреһенсә, үҙҙәре өсөн генә эшләйҙәр. Әгәр хөкүмәт ябай халыҡтың мәнфәғәтен хәстәрләнһә, тормош кимәле лә, демография ла, интеллект та яҡшырыр. Әлбиттә, мин илдә алып барылған сәйәсәткә баһа биреү өсөн бик бәләкәймен, был бары тик минең шәхси фекерем.

Тағы бер фекер: бөгөн йәштәр бигүк китап уҡып бармай. Был бик үкенесле. Мин үҙем классиканы уҡырға яратам. Сөнки улар уйларға, фекерендә туплярға һәм матур итеп һөйләм төҙөп, уйыңдағын әйтергә өйрәтә. Китап уҡымаған кешелә тар ҡараш һәм өйөр хисе формалаша. Кемдер нимәләр әйтһә, барыһы ла уның менән килешә. Ә уҡыған кешенең һәр ваҡыт үҙенең фекере була. Хатта тотош йәмғиәт менән бәхәскә инә алаһың һәм фекереңдең дөрөҫ икәнен беләһең. Сөнки китап - ул рухты, фекерләү ҡеүәһен үҫтерә. Ә белемһеҙ, уҡымаған кешеләр менән идара итеүе еңел.

**Регина:** Хәҙер бик күп уҡыусылар алкоголь ҡуллана һәм тәмәке тарта, был бер кем өсөн дә сер түгел. Бына шундай тиҫтерҙәрең һинең китап уҡыуыңды ла күрә алмай. Китап уҡыған кешенең телмәрен тыңлауы ғына ла ҡолаҡҡа май булып яғыла. Ә китап уҡымаған кешенең телмәрен тыңлап ҡарағыҙ. Бөтөнләй ҡолаҡҡа ятышһыҙ. Китап уҡыу шулай уҡ грамоталылыҡҡа ла ҙур йоғонто яһай. Хәҙер күптәр ябай ғына һүҙҙәрҙе лә хатаһыҙ яҙа алмай. Исмаһам, хатаһыҙ, дөрөҫ яҙырға өйрәнеү өсөн булһа ла китап уҡырға кәрәк.

**▶ Уҙған быуаттың 60-сы йылдарын алып ҡараһаҡ, ул ваҡытта бит "Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға!", "Белем - көс" тигән саҡырыуҙар оран һымаҡ яңғырап торған. Бер кеше генә түгел, тотош милләт, ил өлгө булырға тырышҡан. Ә хәҙер бушбоғаҙҙар ишәйҙе: бер төрлө һөйләйҙәр, икенсе төрлө уйлайҙар, өсөнсө төрлө эшләйҙәр...**

**Ҡарлуғас:** Бығa эскелек тә йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым. Хәҙер бит халыҡтың күпселеге тап эскелек арҡаһында аҡылын һыйғайта. Тап улар илдең интеллектуаль кимәлен түбәнәйтеүгә өлөш индерә лә инде.

**Салауат:** Хәҙер шундай хәл: йәш кеше алға барған кеүек, ләкин ниндәй маҡсатҡа табан атлағанын үҙе генә белмәй. Шуға ла уҡыуын ғына түгел, хатта ата-әсәләрен дә онотҡандар күбәйә. Аларҙында ниндәй иллюзия күрәләр, шуға табан баралар. Ә ул иллюзия бик йыш алмашынып тора. Элек бит белемлеләр һәр ваҡыт эргәһендәге икенсе кешене өйрәткән, уны ла белемле итеп күрергә тырышҡан. Ниндәйҙер берҙәмлек булған. Ә хәҙер һәр кем үҙе өсөн генә йәшәй. Был белем, интеллект буйынса ғына түгел, ә тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә ҡағыла.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***✓ Эшсе һөнәренең абруйын күтәрергә кәрәк. Советтар заманында бит заводта эшләүселәр иң абруйлы профессия эйәләре тип һаналған. Шундай тенденция булһа, йәштәр ҙә эшсе һөнәрен һайлаясаҡ.***



# ЭЛЕК БЕРҘӘМЛЕК БУЛҒАН...

## хәҙер һәр кем үҙе өсөн йәшәй

(Башы 9-сы биттә).

**Бөгөн хеҙмәт баҙарында эшсе профессияларына ҡытлыҡ, шул уҡ ваҡытта бик күп дипломлы белгестәр эшһеҙ йөрөй. Бының сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ һәм баланс булдырыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

**Элина:** Йәш белгестәргә мотлаҡ эш бирергә кәрәк. Иғтибар итһәгеҙ, күпме пенсионер эшләп йөрөй. Улар пенсия ла ала, эшләй ҙә. Ә бит пенсияға сыҡҡас, урам һеперергә йәки башҡа эш эшләргә теләмәйҙәр, "йылы урын"дарынан киткеләре килмәй. Минеңсә, улар ошо "йылы урын"ды йәштәргә бирергә тейеш. Мине бигерәк тә йәштәрҙең эш артынан сит илгә, Себергә сығып китеүе борсой. Икенсенән, эшсе һөнәренең абруйын күтәрергә кәрәк. Советтар заманында бит заводта эшләүселәр иң абруйлы профессия эйәләре тип һаналған. Шундай тенденция булһа, йәштәр ҙә эшсе һөнәрен һайлаясаҡ.

**Регина:** Быны тормошҡа атҡарыу ҡыйын буласаҡ. Сөнки барыһы ла диплом алырға, юғары белемгә эйә булырға тырыша. Ә эшсе ҡулдар етешмәй. Эшсе һөнәрен модаға индереү өсөн хөкүмәт тарафынан ниндәйҙер ҡарар ҡабул ителергә тейеш.

**Тормоштоң тағы бер парадоксына туҡталып китәйек. Бөгөн генә мәктәп тамамлап йәки уҡыу йорто дипломын ҡулына алып сыҡҡан йәш белгестән эшкә урынлашҡан ваҡытта иң элек стаж һорайҙар...**

**Ҡарлуғас:** Бөгөн һәр предприятие үҙенең иҡтисади үҫешен уйлай, кеше факторы һуңғы урынға ҡуйыла. Шуға ла тәжрибәһе булмаған йәш кешегә ҡарағанда, уларға тәжрибәһе булған ололарҙы эштә тотоу уңайлы кеүек күренә. Ә кем алмаш тәрбиәләргә тейеш һуң?

**Элина:** Мин иҡтисади факторҙы дәлил тимәҫ инем. Бәлки, ысынлап та, йәш кеше тиҙ арала эшкә өйрәнер ҙә, уның яңы идеялары барлыҡҡа килер һәм ул күберәк файҙа килтерер. Кешегә ҡарап ҡына бит уның нимәгә һәләтле икәнен асыҡлап булмай. Йәштәрҙе эшкә стажһыҙ ҙа алырға, уларға яуаплы эштәр йөкмәтеүҙән ҡурҡырға ярамай, минеңсә. Юҡҡа ғына, быуат йәшә, быуат буйы белем ал, тимәгәндәр бит.

**Регина:** Бында тығы бер ғәҙелһеҙлек бар - кешене эшкә алғанда ике ай һынау осоро ҡуйыла. Ә бит статистика буйынса, кеше тулыһынса асылып етһен өсөн уға өс йыл кәрәк. Яңы коллектив, яңы кешеләр, бигерәк тә йәш кеше өсөн стресс бит ул. Ҙур предприятие булһа, ике ай эсендә генә ул эш урынын да үҙләштереп өлгөрмәй. Кешеләр характерҙары буйынса бит төрлө типтарға бүленә. Кемдер еңел яраҡлаша, кемгәлер ылығып китеү өсөн бер нисә ай йәки йыл кәрәк. Ә кемдер беренсе көнөнән үк ғүмер буйы ошо коллективта эшләгән кеүек тоя үҙен.

**Салауат:** Бөгөн бит донъя менән аҡса, матди байлыҡ идара итә. Шуға был эш биреүсе менән эшсе араһында ла үҙен һиҙҙертә, тип уйлайым. Мәҫәлән, кемдер бер предприятиеға эш һорап килде, улар һиңә ике ай һынау ваҡыты бирҙеләр икән, ти. Ошо ике айҙа предприятиеға аҡса килтермәһәң, һин уларға кәрәкмәйһең. Хәҙерге ваҡытта эш биреүсе шул турала ғына уйлай, тием мин.

**Рәшит Шәкүрҙең "Кеше булып ҡалыу кәрәк, кеше булып тыуғандарға", тигән шиғыр юлдарын нисек аңлайһығыҙ?**

**Элина:** Кеше, ниндәй генә хәл-торош килеп тыумаһын, ауырлыҡтар килгәндә лә, шатлыҡҡа күмелгәндә лә һәр ваҡыт та үҙенең кеше булыуын иҫенән сығарырға тейеш түгел. Быны мин ата-әсәңә, дуҫтарыңа ярҙам ҡулы һуҙыуҙа, үҙеңә ярҙам итеүселәргә рәхмәтле булыуҙа күрәм. Бер ҡасан да хайуан хәленә төшмә, бер ваҡытта ла дуҫтарыңды һатма, хыянат итмә. Бөтөн хәл-тороштан да лайыҡлы сыға бел.

**Регина:** Кешелек сифаттарын юйып, аҡырып, баҡырып, йәмһеҙ ҡыланып йөрөргә тейеш түгелһең. Бигерәк тә ауыр ваҡыттарҙа ашығыс ҡабул ителгән ҡарарҙар хатаға килтереүе бар, шуға күрә айыҡ аҡыллы булып ҡалырға, хистойғоларҙы айыҡ аҡыл еңергә тейеш.

**Салауат:** Кеше хайуан түгел, ул үҙенең характеры, тәртибе менән генә түгел, йөрәге менән уйларға тейеш. Хайуандарҙың да аҡылы бар, уларҙы аҡылһыҙ тип әйтеп булмай. Ләкин улар тәбиғәт ҡанундары ҡушҡанса эшләй, ә кеше йөрәк менән эш итергә тейеш.

**Ҡарлуғас:** Кеше ныҡ асыуланғанда үҙенең нимә эшләгәнен дә белмәй. Шуға ла ул барлыҡ ҡарарҙарҙы тынысланғас ҡына ҡабул итергә тейеш. Сөнки таяҡ ике башлы булғандай, һәр нәмәнең яҡшы һәм насар яғы бар. Яҡшы яҡтарҙы күберәк күрергә кәрәк. Себендән фил яһарға ярамай.



**Бер ваҡыт интернетта шундай һүрәт күреп ҡалғайным. Ҙур бер ҡыуыҡ - ул белем. Уның бер яғында уҡыусы, икенсе яғында уҡытыусы тора. Уҡытыусы уҡыусының башына шул шарҙы тыңҡыслап-тыңҡыслап тултырырға тырыша, ә уҡыусы ҡаса. Уҡытыусы ҡыуыҡты күтәреп ала ла, уҡыусы артынан йүгерә. Ҡыуып тотоп, ҡыуыҡты уның башына тултырып ҡуя. Уҡытыусы тигәндә гелән шул һүрәт күҙ алдына килеп баҫа. Был юмор булһа ла, уҡытыусыларҙың фиҙаҡәрлегеге, һөнәренә тоғро ҡалыуы күрһәткесе ул.***

**Алина:** Һәр ваҡытта ла оптимист булып ҡалырға кәрәк. Проблемаларға проблема тип түгел, ә алға барырға этәргес тип ҡарарға кәрәк.

**Уҡытыусыларығыҙ тураһында күңелегеҙҙә ниндәй фекерҙәр йөрөй...**

**Элина:** Уҡытыусының һәр әйткән һүҙе беҙҙе яҡшылыҡҡа өндәү. Хатта ул тауышын күтәргәндә лә, әрләгәндә лә, сәбәбе бар. Әгәр беҙҙе гел әрләйҙәр икән, тимәк, беҙ бары тик шуға ғына лайыҡ. Гимназиябыҙҙың барлыҡ уҡытыусылары ла ғәҙел, талапсан, әммә изге күңелле. Улар беҙҙең арығанды һиҙеп тора, артыҡ эш ҡушмаҫҡа тырыша, ә инде дәртебеҙ ташып торғанын күрһәләр, күнегеүҙәрҙе лә күберәк йөкмәтәләр. Уҡытыусылар коллективы бик яҡшы беҙҙә. Мәктәпте тамамлаусыларҙың ҡайһы берҙәре менән дуҫмын, һәм уларҙың барыһы ла һайлап алынған кеүек аҡыллылар, белемлеләр, улар менән аралашҡы килеп кенә тора. Былар барыһы ла беҙҙең уҡытыусыларыбыҙҙың ауыр хеҙмәт емеше һөҙөмтәһе бит.

**Ҡарлуғас:** Миңә уҡытыусыларҙың түҙемлеге һәм ныҡышмал булыуы оҡшай. Дәрестә берәй нәмәне аңламаһаң, биш мәртәбә һораһаң да, түҙемле генә аңлата улар.

**Алина:** Юҡҡа ғына мәктәпте - икенсе өй, уҡытыусыларҙы - икенсе әсәй тимәйҙәрҙер. Ысынлап та, уҡытыусылар һине аңларға тырыша, бәләкәй ваҡытыңдан уҡ етәкләп йөрөтә. Һәр саҡ контролдә тота. Ә ҙурайғас, проблемаларыңды күҙҙәреңдән күреп, аңлап тора, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға, кәңәштәре менән дөрөҫ юл күрһәтергә әҙерҙәр. Синыф етәксеһе булараҡ Әлфирә Әнүәр ҡыҙына ҙур рәхмәтлемен. Ошо ике йылда минең уңыштарым булыуына ул ҙур йоғонто яһаны.

**Регина:** Беҙҙең мәктәп уҡытыусылары - алтын бәрәбәрендә, тиер инем. Сөнки улар барыһы ла беҙҙе шәхес итеп күреп яраталар һәм ихтирам итәләр. Беҙ бит әле үҫмерҙәр һәм ҡайһы ваҡыт юлдар сатында албырғап та ҡалабыҙ. Шул саҡтарҙа улар һәр саҡ ярҙамға килә, һәр саҡ һинең эргәңдә. Улар беҙгә күпме энергияһын сарыф итә, күпме иғтибарын бүлә.

Шундай матур маҡтауҙарҙың бәҫен ебәргем килмәһә лә, әйтергә тура килә: уҡытыусылар араһында эшенә һалҡынраҡ ҡараусылар ҙа бар. Дәрес башланып, уҡыусыларға үҙ аллы эш биреп, ҡайҙалыр сығып йөрөп килергә лә мөмкин ундайҙар. Был мине әсендерә. Теләге булғанда, былдай уҡытыусылар үҙҙәренең тәжрибәһе, оҫталығы, белеме менән беҙгә күпте бирә, ә беҙ улар менән берлектә тауҙар аҡтара алыр инек. Шулай ҙа беҙҙең өсөн ысын мәғәнәһендә янып-көйөп, беҙҙе төплө белемле итергә тырышыусы уҡытыусыларыбыҙ күберәк.

**Салауат:** Уҡытыусыларыбыҙҙа иң яҡшы сифат - ул түҙемлек. Улар беҙҙең менән нисек кенә ыҙаламайҙар, әммә түҙәләр. Шартлар сиккә еткәндә лә үҙҙәрен лайыҡлы, сабыр тоталар. Һәм беҙҙең был балалыҡ шуҡлыҡтарыбыҙ, хаталаныуҙарыбыҙ тураһында тупаҫ итеп түгел, ә иплэп кенә аңлаталар, тәнҡитләйҙәр, был һөйләшеүҙәрҙән һуң һин ысынлап та үҙеңдең хаҡ түгел икәнеңде аңлайһың

**Регина:** Бер ваҡыт интернетта шундай һүрәт күреп ҡалғайным. Ҙур бер ҡыуыҡ - ул белем. Уның бер яғында уҡыусы, икенсе яғында уҡытыусы тора. Уҡытыусы уҡыусының башына шул шарҙы тыңҡыслап-тыңҡыслап тултырырға тырыша, ә уҡыусы ҡаса. Уҡытыусы ҡыуыҡты күтәреп ала ла, уҡыусы артынан йүгерә. Ҡыуып тотоп, ҡыуыҡты уның башына тултырып ҡуя. Уҡытыусы тигәндә гелән шул һүрәт күҙ алдына килеп баҫа. Был юмор булһа ла, уҡытыусыларҙың фиҙаҡәрлеге, һөнәренә тоғро ҡалыуы күрһәткесе ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иң тәүҙә йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй, тигән һүҙбәйләнешле кем әйткәндер, әммә кемдең кемде өйрәтеүе һаман да асылмаған сер булып ҡала. Бер ҡараһаң, өлкәндәр балаларға белем бирә, йәшәргә өйрәтә һымаҡ, икенсе яҡтан, балалар өлкәндәрҙе "тәрбиәләй". Улар үҙҙәренең саф ҡарашы, тура һүҙе, ике йөҙлөләнә белмәүе менән тормошобоҙға яҡты нур бөркөп тора ла инде. Юҡҡа ғына, балалар теле менән хәҡиҡәт һөйләнә, тимәйҙәр. Өлкәндәр тыуҙырған проблемаларға үҫмерҙәрҙең үҙ ҡарашы, үҙ фекере бар һәм, ысынлап та, улар унан сығыу юлдарын үҙҙәренсә күрә, уйлана. Ә беҙҙең заманда мәктәп йылдары - ғәмһеҙ бала саҡ ине...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИЖАДХАНА

**Башҡорт халҡында "Булыр бала - бишектән" тигән бик матур мәҡәл бар. Бөгөнгө геройыбыҙ - Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының 10-сы класс уҡыусыһы Азалия Солтанованың бәләкәйҙән үк актер һөнәрен һайларға тигәндә маҡсат итеп ҡуйып, уға табан эшләгән һәр уңышлы аҙымынан һуң, был мәҡәлдең дөрөҫлөгөнә ҡабат инанаһың. Ошо көндәрҙә генә Азалия беҙҙә тағы бер шатлыҡлы хәбәре менән ҡыуандырҙы - ул шөғөлләнгән "Алтынай" башҡорт балалар театр студияһы беренсе тапҡыр Мәскәүҙә үткән XV "Рус драмаһы" Халыҡ-ара мәктәп театрҙары фестивалендә ҡатнашып, беренсе урын яулап ҡайтҡан! Фестивалдә ҡатнашыу ниндәй тойғолар уятҡан, дәрәжәле баһалама ағзалары башҡорт телендәге спектаклде нисек ҡабул иткән? Был турала уңған ҡыҙҙың үҙенән һөйләтәйек әле.**

# ЙОМРО ЙОМҒАҠ АРТЫНАН...

## яратҡан һөнәремә барам



### Изгелек усағы ул "Алтынай"

Ике йыл инде беҙҙең гимназия бинаһында "Алтынай" башҡорт балалар театр студияһы эшләй, мин шунда шөғөлләнәм. "Алтынай" Өфөлә башҡорт балалары өсөн төгәйенләнгән беренсе студия. "Һаумы, һаумы, әкиәт!" Төбәк-ара донъя әкиәттәрен һөйләүселәр конкурсы менән бер рәттән тиерлек барлыҡҡа килде ул. Ә бындай студия баш ҡала өсөн күптән кәрәк ине. Уның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, һәр хәлдә, шәхсән минең өсөн ул оло мәктәп. Унда бәләкәй артистар - балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре, мәктәп уҡыусылары ҙур теләк һәм ихласлыҡ менән актерлыҡ оҫталығы дәрестәре ала. Йырларға, бейергә өйрәнәбеҙ, профессиональ режиссерҙар менән эшләп ҡарайбыҙ. Быйыл ҙур премьера булды, беҙ Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһендә Рәсимә Ураҡсинаның "Йомро-йомро йомғағым" әкиәтен ҡуйҙыҡ. Унда 20-се ҡала башҡорт гимназияһынан, 136-сы башҡорт лицейынан, 158-се башҡорт гимназияһынан уҡыусылар ҡатнашты. Балалар баҡсаһына йөрөүсе бәләкәстәр "Йомро икмәк" әкиәтен сәхнәләштерҙе.

Альмира Ҡыуатова, Алтынай Бурина, Рәсимә Ураҡсина, Фәрдүнә Ҡасимова апайҙарға, беҙгә гимназияла махсус бүлмә биреп, сәхнәлә репетициялар яһарға рөхсәт иткән 158-се башҡорт гимназияһы директоры Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиеваға студия балалары һәм атай-әсәйҙәребеҙ исеменән оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Һәр ваҡытта, балам, тип ҡаршы алып, сәйҙәр эсереп тороусы ошо бала күңеллеололар беҙҙең өсөн был студияның изгелек усағына әүерелдерҙе.

### Бәхетле ете көн...

Әле күптән түгел булып үткән XV "Рус драмаһы" Халыҡ-ара мәктәп театрҙары фестиваленә "Йомро-йомро йомғағым" әкиәтен алып барҙыҡ. Фестивалдең девизы - "Намыҫыңды йәш саҡтан һаҡла", ул Мәскәү рус драма театрында ойошторола. Быйыл фестиваль К. Станиславскийҙың тыуыуына 150 йыл тулыуға арналды. Илебеҙҙең баш ҡалаһында үткән был ете көн минә бик оҡшаны. Шулай ҙа атай-әсәй эргәлә булмағас, яуаплылыҡ та ҙур булды. Етмәһә, һигеҙ кешелек төркөмдә бәләкәй балалар ҙа булды, минең менән бер бүлмәгә урынлашҡан Дианаға ваҡытлыса әсәй булып йәшәргә кәрәк ине. Етәкселәребеҙҙең ваҡыты сикле булыуы арҡаһында, төркөмөбөҙҙө галерея, зоопарк, музейҙарға үҙем алып йөрөнөм. Бының бер ҡыйынлығы ла булманы, метроға бараһың да, кешеләрҙән һораშаһың, белешмәләрҙән ҡарайһың һәм табып та алаһың.

Конкурс шарттары буйынса, һәр театрҙан бер вәкил жюриҙа ултырырға тейеш ине. Ошо яуаплы вазифа минә эләкте, бының менән дә бәхетлемен. Бөйөк актерҙар - Михаил Щепенко, Ольга Прокофьева, Борис Галкин, бөтөн Рәсәй театрҙары менән эшләүсе билдәле тәнҡиҫе Олег Пивоваровтар менән бер рәттән, спектаклдәр тикшерергә насип булды. Атайым, танылған артистар булһа, эргәләреңә бар, таныш, һөйләш, автографтар ал, ундай шәхестәр менән аралашыу ҙур мәртәбә бирәсәк, тип әйтеп ебәргәйне. Был да дөрөҫ икән, шул тиклем ҡанатланып ҡайттым. Берәү ҙә, мин йондоҙ, тип йөрөмәне, кешенең бөйөклөгө уның ябайлығында, ихласлығында икәненә инандым. Әллә күпме дуҫтар таптым, уларҙың барыһы менән дә интернет аша хәбәрләшеп торорға вәғәҙәләштек.

### Бер башҡа үҫеп ҡайттыҡ

Фестивалгә 142 коллективтан 15 балалар театры һайлап алынған, уларҙың береһе килә алманы, шуға ла 14 коллектив бәйге тотто. Күберәк Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһенән, шулай уҡ Санкт-Петербург, Соликамск, Ижевск һ.б. ҡалаларҙан, Калуга өлкәһенән, Латвиянан килгәйнеләр. Кемдер беҙҙең кеүек әкиәт сәхнәләштерҙе, был фестивалдә сынығыу алған театрҙар иһә етдиерәк әйбер ҡуйҙы һәм Гран-при яуланы.

Беҙ быйыл был фестивалгә үҙенсәлек өҫтәнек, сөнки 15 йыл эсендә унда бар сығыштар ҙа тик рус телендә булған, беҙ башҡорт телендә спектакль алып барҙыҡ. Тәржемә булмаһа ла, барыһы ла аңлаған, телебеҙҙе шул тиклем оҡшаттылар, матур, моңло тел, тинеләр. Һәр театр тураһында спектаклдән һуң стендта фекерҙе ҡалдырырға мөмкин ине, "Алтынай" театр студияһын оҡшатып, күп һүҙҙәр яҙғайнылар. Фестивалгә бер коллектив боронғо славян телендә спектакль алып килгәйне, бының менән улар боронғо славян донъяһын күрһәтергә теләгәйне. Бер жюри ағзаһы, ғәфү үтенеп, ошондайыраҡ һүҙҙәр әйтте: "Был минең туған телем булһа ла, мин күп нәмәне аңламаным. Башҡорттарҙың телен белмәһәм дә, уларҙың теле рус теленә ҡәрҙәш булмаһа ла, мин күп нәмәне аңланым". Был да беҙгә ҙур баһа булды. Телебеҙҙе һаҡлауға индергән өлөшөбөҙҙө тойоп, ғорурландыҡ. Минеңсә, беҙ ошо бәләкәй генә сәхнә әҫәре менән башҡорт донъяһын да күрһәтә алдыҡ. Бейеүҙәр бейенек, йырланыҡ. Кейемдәрҙә бик ентекләп әҙерләнек, орнаменттар, тәңкәләр менән биҙәнек.

Мин Мәскәй әбей ролен уйнаным, шуныһы ҡыҙыҡ, мине жюриҙа ултырған коллегаларым сәхнәлә бөтөнләй танымаған. Профессиональ актрисалыр, тип уйлағандар. Шуға ла минә "Танымаҫһың да!" тигән номинация бирелде. Бынан тыш, Эт ролен башҡарыусы Ильяс Аслаевҡа "Тоғролоҡ өсөн", Гөлбикә менән Минлебикә ролендәге Айлина Мөхәмәтйәнова һәм Диана Кучуковаға "Иң яҡшы дуэт өсөн" номинацияһы тапшырылды, шулай уҡ үҙенсәлекле пьеса өсөн Рәсимә апай Ураҡсинаға, етәкселәребеҙ Алтынай Бурина һәм Альмира Ҡыуатоваға диплом бирелде. Ә коллектив беренсе дәрәжәләге дипломға лайыҡ булды. Башҡортостан байрағын тотоп, "Ура!" ҡысҡырып ҡалған ата-әсәләребеҙ алдында әллә ниндәй батырлыҡ ҡылған геройҙар кеүек, оло хисттәр кисереп, бәхеттән бер башҡа үҫеп ҡайтып төштөк. Улар беҙҙе ошо уҡ дәрт менән ҡаршы алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлегә тиклем сәхнәлә бәләкәй ҡыҙҙарҙан алып әбей, бабайға тиклем уйнарға өлгөргән Азалия үҙен актер һөнәренә генә әҙерләү менән шөғөлләнә икән, тип уйлап ҡуймағыҙ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, биология дәрестәрен яратҡанға күрә, был фәндәрҙән олимпиадаларҙа ҡатнаша, туризмды мауыҡтырғыс шөғөл, тип иҫәпләй, ҡала буйынса үткәрелгән туристик слетта йүнәлеште билдәләү буйынса икенсе урын яулаған. Ә һөнәр һайлауға килгәндә иһә, алда теүәл бер уҡыу йылы, күңелле йәйге каникулдар бар, Азалияның, бәлки, уйҙары үҙгәреп тә китер. Ниндәй һөнәр һайлаһа ла, һөнәре - эйәһенән, тиҙәр бит.**

Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АҢЛЫ БУЛАЙЫҠ!

## Ә аңлылыҡ айыҡлыҡтан башлана

**Марс ТИМЕРБУЛАТОВ, медицина фәндәре докторы, профессор:** Халҡыбыҙҙың борон-борондан ғорур, сая һәм тәүәккәл булыуы һоҡландыра мине. Ошо сифаттары уға бик ҙур ҡорбандар биреп булһа ла тыуған ерен, илен, телен һаҡларға булышлыҡ иткән. Башҡорт өсөн иң ҡиммәтлеһе - ул тыуған ере. "Киске Өфө"нөң 21-се һанында Башҡортостанға Кипрҙан бик ҙур дин әһеле - Солтан Мәхмәт шәйех килеүе тураһында хәбәр ителде. Ул да шуны уҡ - башҡорт өсөн тыуған ерҙән дә ҡиммәтлеһе юҡ икәнен раҫланы: "Мин һеҙҙең халҡығыҙҙың тарихын да бер аҙ беләм, - тине ул.- Төрлө золомдарға, хаҡһыҙлыҡтарға ҡаршы баш күтәреп, һеҙҙең халҡығыҙ бик күп шәһит булған. Шул шәһитлектәрҙән һуң, бәлки, халҡығыҙҙың ундан бер өлөшө генә тороп ҡалғандыр. Халҡығыҙҙың үҙ еренә бәйләнеге ныҡ көслө булған. Аллаһтың ризалығы өсөн улар үҙҙәрен аямаған, йәндәрен Аллаһҡа тапшырған..." Әммә бөгөн еребеҙҙең ҡәҙере китеп бара. Сөнки беҙ ата-бабаларыбыҙ түккән ҡандың нимәгә бәрәбәр икәнен, тамырҙарыбыҙ тарихын онотабыҙ. Халҡыбыҙ хәтерен гел генә уяу тотор өсөн телебеҙҙе һаҡларға кәрәк. Йырҙарыбыҙҙа, мәҡәл-әйтемдәребеҙҙә һәм ауыҙ-тел ижадының башҡа төрҙәрендә лә һаҡлана тарихыбыҙға ҡағылышлы ҡиммәтле мәғлүмәттәр. Бөгөнгө заманда бер һүҙ, хатта бер ым ғына ла айырым кешеләрҙең, ул ғына ла түгел, ниндәйҙер бер кешеләр төркөмөнөң тормошон үҙгәртеп ебәрә торған көскә эйә. Шуға күрә, телебеҙ - беҙҙең көсөбөҙ ҙә.

Кешеләр һаулығы һағында тороусылар вәкиле булараҡ та әйтә торған һүҙем бар. Аңлы булырға кәрәк. Аңлы кеше - үҙенең генә түгел, ә яҡындарының да һаулығына битараф булмаған, ҡайғыртыусан кеше ул. Аңлы йәшәргә тырышыуҙың иң беренсе күрһәткесе - айыҡлыҡ. Айыҡлыҡтан башлана аңлылыҡ. Бөгөнгө көндә шуныһы ҡыуандыра: айыҡ тормош алып барған, айыҡлыҡты башҡа тиҫтерҙәре араһында ла тараҡҡан йәштәребеҙ күбәйҙе. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте еттәре - быға асыҡ миҫал. Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте менән берлектә райондарыбыҙ ауылдары араһында инде икенсе тапҡыр "Айыҡ ауыл" конкурсы уҙғарыуын беләһегеҙҙер. Быйыл был конкурс республика Хөкүмәт кимәлендә лә яҡлау тапты, шуныһы ҡыуандыра. Әммә физика законы буйынса, Ерҙәге һәр хәрәкәт тә, ниндәйҙер кимәлдә, ҡаршылыҡҡа осрай. Шул иҫәптән айыҡлыҡ та ҡайһы бер кешеләрҙә шик тыуҙыра. Үҙенең "байрамдарҙа ғына ртлауы" тураһында маҡтанырға яратыусылар күңелен икеләнеү биләй. Был тәбиғи ҙә, сөнки йәмғиәттә айыҡлыҡҡа әҙер булмаған кешеләр етерлек, һәм уларҙың фекере лә тәьҫир итмәй ҡалмай. Йомғаҡлап әйткәндә, миллиардлаған кешеләктең бер өлөшө булған һәр әҙәм үҙенең дә бер бөтөн шәхес, аңлы йән эйәһе булыуы тураһында онотмаҫҡа тейеш. Аңлы булайыҡ.

Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.

✓ *Ауылдаштарҙың китап уҡырға яратыуы, матбуғат менән дуҫ булыуы айырыуса матур тойғолар уятты. Кемеһенә генә инмә, һәр береһенең өҫтәлендә милли баҫмалар, китаптар ята.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИР-ЕГЕТТӘР...

## ышаныслыраҡ

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Рәсәй халҡының 51 проценты дәүләт поликлиникаларында дауаланыуҙы хуп күрә. Халыҡтың 58 проценты сәләмәтлеге менән проблемалар килеп тыуһа, мотлаҡ табиптарға мөрәжәғәт итә, ә 36 проценты үҙаллы дауалана. Яуап биреүселәрҙең 52 проценты спорт менән шөғөлләнеүен белдергән. Әммә уларҙың яртыһы быны бер сығымһыҙ һәм өйҙә эшләргә тырыша. Фитнес үҙәктәренә йөрөүселәр - 12, спорт секцияларында шөғөлләнеүселәр иҫәбе 9 процент ҡына.

■ Кокос сәтләүеге майы артыҡ һимеҙлекте дауалау, шулай уҡ инсульт һәм Альцгеймер ауырыуын иҫкәртеү өсөн файҙалы. Был турала Квинсленд (Австралия) ғалимдары белдерә. Улар фекеренсә, кокос майы диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яфаланыусыларға ярҙам итәсәк, сөнки был продукт холестерин кимәлен түбәнәйтә һәм инсулин кимәлен нормаға килтерә. Быға тиклем фәндә Британия ғалимдарының кариесты булдырмауҙа кокос майының файҙаһы тураһындағы асышы билдәле ине. Бынан тыш, кокос майы еңел үҙләштерелә һәм матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә.

■ Ни өсөн ҡайһы бер кешеләргә шунда уҡ ышанаһың, ә ҡайһы берәүҙәргә - юҡ? Баҡтиһаң, эш күҙҙәрҙең төҫөндә икән. Чехия ғалимдары тикшеренеүҙәрҙән һуң ошондай фекергә килгән. Ғалимдар һынауҙарҙа ҡатнашыусыларға йөҙ төҙөлөшө һәм күҙҙәр төҫө буйынса кешеләрҙе баһаларға ҡушҡан. Күптәр күк күҙле кешеләрҙе ышанаслы тип тапҡан. Бынан тыш, түңәрәк йөҙлө, ҙур эйәкле ир-егеттәр тышҡы ҡиәфәтенән ышаныслы күренә икән. Ә бына ҡатын-ҡыҙҙарҙа айырыуса "ышаныслы" билдәләр күренмәгән.

■ Италияның Турин ҡалаһында урынлашҡан балалар дауаханаһында бәләкәй пациенттар йөрәгенең торошон контролдә тотоусы махсус футболкалар ҡулланыла башлаған. Кардиолог футболкаға сенсорҙар тегелгән һәм табиптар кардиограмма мәғлүмәттәрен, һулыш йышлығын һәм йөрәктең башҡа күрһәткестәрен тәүлек әйләнәһенә күҙәтә ала. Был ваҡытта пациенттың дауаханала булыуы мотлаҡ түгел. Әлегә тикшеренеүҙәр ике футболкала үтә. Уларҙы йыуырға һәм күп тапҡыр ҡулланырға була.

■ Америка диетологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар ашау һәм насар сәләмәтлек араһында урталыҡ юҡ. Үҙенә аҙнаһына бер тапҡыр ғына кәнфит йә торт киҫәге ашарға рөхсәт иткән кеше көнөнә бер тапҡыр тәм-том менән һыйланған кешенән бөтөнләй айырылмай. Тикшереү барышында төрлө төркөмдәге кешеләр төрлө ваҡытта төрлө күләмдә татлы ризыҡ ашаған. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашаусыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү кеүек хәүеф янамай, эш бында туҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, был турала тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре һөйләй. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дә булдырыу хәүефе тыуҙырмаған. Әммә был тикшеренеүҙәр тәмтомдо күп итеп ашауға сәбәп була алмай, ти ғалимдар.

БОРСОҒАН ХӘЛ

**Элегерәк, һәр өй һайын ҡыуаныслы хәбәрҙәр, йыраҡ араларҙан сәләмдәр, яңы мәғлүмәттәр ташығын почтальонды ҡунаҡтай ҡаршылап, көтөп алғандар. Ауылдың абруйлы кешеләренең береһе һаналған почтальон менән аралашып ҡалыу ҙа күптәр өсөн оло ҡыуаныс булған. Тик һуңғы йылдарҙа был хеҙмәттең бәҫе төшөп, почта таратыусыларҙың абруйы ла кәмеп киткәндәй булды. Тормош мәшәҡәттәренән баҫылыпмылыр, әллә инде матди байлыҡты кәрәгенән артыҡ баһалауҙанмы, гәзит-журнал алдырыусылар ҙа һирәгәйҙе, хәл-әхүәл белдереп хат яҙыусылар ҙа юғалды. Шуға ҡарамаҫтан, почта хеҙмәте бөгөн дә эшләй, халыҡҡа хеҙмәт итә, тормошта үҙенә тәғәйен урын биләй.**

# ПОЧТАЛЬОН МЕНӘН БЕР КӨН,

## йәки Халыҡ гәзит һүҙен һанлай әле



### Төпкөл ауылдарға юл тоттоҡ

Почтальондар хеҙмәте менән яҡындан танышыу, уның абруйын һәм урынын билдәләү өсөн районда иң ҙур участкаларҙың береһе булған Инйәр почта бүлексәһен һайлап, юлға сыҡтыҡ. Теп-теүәл иртәнге сәғәт 8-гә почтаға барып ингәндә, оператор Алиса Ғәрифйән ҡыҙы Хужиәхмәтова эш көнөн башлағайны ла инде. Иртә булыуға ҡарамаҫтан, үҙ йомошо менән килеүселәр ҙә байтаҡ ҡына. Кемдер коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләй, икенсеһе посылка ебәрә, сәсеү өсөн орлоҡ, сәскәләр һатып алырға теләүселәр ҙә ошонда. Сәғәт 9-ға почтальондар ҙа йәйләп йыйыла башланы. Ҡағыҙ эшенең кәрәгенән артыҡ күбәйеүе уларҙы ла ситләп үтмәгән. Һәр баҫманың, реклама хаттарының, гәзит-журналдарҙың да, һатылған тауарҙың да теүәл иҫәбен ваҡытында һанап, отчет бирер барыу мотлаҡ. Шуға күрә лә почтальондар эште нәҡ ошонан башлай. Улар үҙ эшенең осона ла сығып өлгөрмәне, Белореттан почта машинаһы ла килеп етте. Үҙенә тәғәйенен иҫәпләп, үлсәп алғас, һәр кем ғәҙәттәгесә үҙ участкаһына ашыҡты.

Беҙ иһә, райондың төпкөлдәге Ноҡат, Арышпар, Айыс ауылдарын хеҙмәтләндереүсе почтальон Мәрйәм Миндийәр ҡыҙы Сәмситдинова менән шул тарафтарға ҡарай юлға сыҡтыҡ. Инйәрҙән Ноҡатҡа тиклем 22 саҡрым самаһы. Почтальонға буран-ямғырына, аҙлы-көҙлө бысрағына ҡарамай, күп осраҡта ошо юлды йәйәү тәпәйләргә лә тура килә. Беҙ килерҙе белгәс, Мәрйәм апайҙы Инйәргә тормош иптәше Әнүр ағай үҙ машинаһында килтергән. Шунлыҡтан, соҡор-саҡырлы ташлы юлдан һелкенә-һелкенә барыуы ла йәйәү атлауҙан күпкә яҡшыраҡ күренде. Дыңғырлай-дыңғырлай Ноҡатҡа елдергәндә, ауыл кешеһенең эҙөп-йөлкөп йыйған аҡсаһына һатып алған машинаһының был юлда ни йәне ҡалалыр инде, тигән уй килә күңелгә. Артыҡ ваҡыт, сығымдар өсөн бер тин түләнмәһә лә, почта эшенән тыш, ауылдаштарының йомоштарын да үтәүҙән баш тартмаған Әнүр ағай менән Мәрйәм апайға тағы бер һоҡланаһың, халҡыбыҙҙың матур ғәҙәттәренә, кешелекле булыуына ҡыуанаһың. Ошо урында, бөтә милләтебеҙгә хас булған артыҡ ябайлыҡ, кеше йәнле, киң күңеллелек сифаттары менән файҙаланып, түргә менеп, үҙебеҙҙе ишек төбөндә ҡалдырырға тырышыусылар күбәйеп китеүе бер аҙ һағайта ла төшә...

Һиһайәт,12-се яртыларҙа Ноҡатҡа барып еттек. Мәрйәм апайҙың ҡыҙы Гөлназ, 3 айлыҡ ҡына бәпесе булыуға ҡарамаҫтан, йорт эштәрен бөтөрөп, икмәк һалып, ашарға бешереп көтөп торған. Тиҙ-тиҙ генә ашап-эсеп алғас, 1-се яртыла 18 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Айыс ауылына почта таратырға киттек. Мәрйәм апай, иш янына ҡуш булыр, тип, үҙе хеҙмәтләндергән ауылдарҙа ярты ставкаға китапханасы эшен дә башҡара. Әле ул баҙарға барғандай йыйынған: ҡулында ике сумка китап, бер сумка гәзит-журнал, бер сумка почтаның һатыуға бирелгән тауары. Аптырап ҡарап торғанды күргәс:

- Эй-й-й, машина менән барғанда был ғына нимә ул! Һәр кемдең Инйәргә, ҡалаға барып йөрөү мөмкинлеге юҡ бит. Шуға күрә, дарыу, сәй-шәкәр, майы кәрәк булһа ла миңә әйтеп ебәрәләр. Ике аяҡлы автолавка бит ул мин, - тип көлөп ебәрҙе Мәрйәм апай.

### Айыста

Мәрйәм апай әйтеүенсә, Айыста 8 өйҙә 14 кенә кеше йәшәй. Тәбиғәте матур булһа ла, ауылдың бик боронғо һәм шул уҡ ваҡытта ташландыҡ булыуы күҙгә салына. Емерек, иҫке өйҙәрҙең күплеге бында ҡасандыр тормош гөрләп тороуын күрһәтһә лә, ауылдың бөгөнгө хәле күңелһеҙ уйҙарға төшөрә... Айыстар Мәрйәм апайҙың килеүен ҡыуанып ҡаршы алды. Һәр береһенең өйөнә саҡырып, саҡ ҡына булһа ла һөйләшеп ултырғыһы, күңелен бушатҡыһы, эргә-тирәләге яңылыҡтарҙы ла ишеткеһе, белешкеһе килә. Донъя ығы-зығыһынан ситтә ятҡангамы, әллә инде үҙҙәре шулай берҙәммә, киң күңеллемә, халыҡ асыҡ йөҙлө, ябай бында. Булғанына шөкөр итеп, юғын таптырмай, кәңгер-көңгөр генә үҙара көн итеп ятҡан көндәре. Ауылдаштарҙың китап уҡырға яратыуы, матбуғат менән дуҫ булыуы айырыуса матур тойғолар уятты. Кемеһенә генә инмә, һәр береһенең өҫтәлендә милли баҫмалар, китаптар ята. Мәрйәм апай килтергән китаптарҙың да яртыһын шунда уҡ бүлешеп алдылар. Аҡса юҡ, тормош ауыр, тип тә зарланмайҙар. Ябай ғына йәшәүҙәренә, эш булмауына ҡарамаҫтан, гәзит-журналһыҙ тороп ҡалмаһаҡ ярар ине, тип борсолалар. Көҙ көнө генә бөтә донъяһы янып, көл булған 82 йәшлек Мәрзиә Солтанова инәйҙең дә матбуғаттан айырылғыһы килмәүе ҙур һоҡланыу тыуҙырҙы. Элекке быуындың ташҡа баҫылғанға ышаныҫы ҙур булыуын, уға хөрмәт менән ҡарауын, улар өсөн матбуғаттың оло әһәмиәткә эйә булыуының асыҡ миҫалы ине был.

Бәләкәй генә булһа ла, был ауылдың проблемалары ла башҡаларҙыҡынан һис тә айырылмай. Айыс ауылы старостаһы Сәйетғәрәй ағай Дауытов иһә, итексенең итеккә йәлсемәгәне кеүек, ауылдың ташлы ерҙә ултырып та юлдарҙың батҡыл булып ятыуына, ауыл халҡы үҙе йыйылып, ҡулдан ғына эшләп ҡуйған ағас күперҙәрен дә таш ташыусыларҙың машинаһы емереп бөтөүөнә әсенә.

- Нимә генә тиһәләр ҙә, бөгөнгө тормош ҡағиҙәләре аңлашылып етмәй миңә. Бәһлеүәндәй ир-егеттәргә эш юҡ. Шул сәбәпле, гөрләп торған ауыл һүнде, эскелек көсәйә, тапҡан-таянғаны етмәгәнлектән, күптәрҙең йәшәүгә дәрте һүрелә. Үҙ ауылыбыҙҙың тәбиғәт байлыҡтары менән файҙалана алмай, ситтәрҙе байытыуыбыҙ ҙа күңелде әрнетә. Сараһыҙлыҡтан таш сығарыуға ялланған егеттәребеҙҙең хеҙмәтен яттар рәхәтләнеп файҙалана. Улар сығарған таштар ҡайҙарға ғына ебәрелмәй ҙә, кемдәрҙең генә кесәһен ҡалынайтмай. Үҙебеҙҙекеләргә иһә шул мендәрҙәрҙең тиндәре генә эләгә. Экономия яһайбыҙ, тип, әллә ҡайҙан оптималләштереү уйлап сығарҙылар, шул арҡала булған ғына эш урындары ҡыҫҡартыла, мәктәптәр ябыла. Мәктәпһеҙ ауылдың киләсәге лә булмаясаҡ. Элек пенсияны Мәрйәм килен таратты һәм был уңайлы ла ине. Бөгөн килеп, был эште инкассаторҙарға бирҙеләр. Һанап ҡараһаң, бер кеше башҡарған хеҙмәттең сығымдары хәҙер, киреһенсә, артығыраҡ та килеп сыға әле, сөнки бензинға ла, водителгә лә, пенсия таратҡан кешегә лә түләргә кәрәк. Бынан тыш, транспортты ла ваҡытында ремонтлап тороу талап ителә. Ә иң үкенеслеһе шунда: һауа шарттары, юлдар боҙолһа, көндәре почтальонға ҡала. Мәрйәм килендең кешелеклегенән файҙаланып, шундай ваҡыттарҙа пенсия таратыуын үтенәләр. Аҡсаһы - уларға, эше - почтальонға. Ҡайҙа бында ғәҙеллек? Саҡ ҡына булһа ла өҫтәп түләп, пенсияны, элеккесә, почтальондарҙан тараттырһалар, бына шунда булыр ине экономия. Кешеләрҙе лә ваҡытында һөйөндөрөрҙәр, гәзит-журналдарға ла яҙҙырырҙар, тауарын да һатырҙар ине, - тип һөйләп торҙо элекке уҡытыусы Сәйетғәрәй ағай Дауытов. Шулай ауылдарҙы халыҡ менән һөйләшә, аралаша торғас, сәғәт төшкө 3 тә бу-

✓ *Бында йәшәүселәрҙең гәзиткә яҙылыу ҡайғыһы юҡтыр инде, тип уйлау бөтөнләй хата булып сыҡты. Әңгәмә барышында был ауылда рухи байлыҡты матдиенән юғары ҡуйған рухлы, уйлы халыҡ йәшәүе асыҡланды.*



лып китте. Ә беҙгә Арышпар, Ноҡат халҡына ла почта таратаһы бар әле.

### Арышпарҙа

Арышпарға килеп инеү менән күңелһеҙ күренеш ҡаршы алды. Ауыл тулы емерек өйҙәр ишелеп ята, ҡайһыһының тәҙрәһе, икенсеһенең ҡыйығы йә ҡапҡаһы юҡ. Ситтән ҡарағанда, был ауылда кешеләр бөтөнләй йәшәмәгән кеүек күренә. Баҡтиһәң, ауылдағы 59 өйҙәң 13-ндә генә кеше йәшәй икән. Бында ла Мәрйәм апайҙың килгәнен көтөп торғандар, ахырыһы. Бер өйҙәң тәҙрәһенән "Килен, маҡтап ҡына йөрөйһөң, сәйем ҡайнап ултыра", тип ҡысҡырһалар, икенсе яҡтан "Еңгә, яңы китаптар килтерҙеңме?" тип һорашалар. Ташландыҡ ауылда кешеләрҙең шат ауаздарын ишетеү күңелде йылытып ебәргәндәй булды. Бында йәшәүселәрҙең гәзиткә яҙылыу ҡайғыһы юҡтыр инде, тип уйлау иһә бөтөнләй хата булып сыҡты. Әңгәмә барышында был ауылда рухи байлыҡты матдиенән юғары ҡуйған рухлы, уйлы халыҡ йәшәүе асыҡланды. Гәзит-журналға мотлаҡ яҙылырға тейешһең, тип ҡарайҙар бында. Ғөмүмән, насар ғына шарттарҙа йәшәүсе арышпарҙарҙың көр күңелле, асыҡ йөҙлө, иртәгәге көнгә ышаныс менән йәшәүҙәре хайран ҡалдырҙы.

### Ноҡатта

Ике ауылды урап, кире Ноҡатҡа әйләнеп ҡайтҡанда, сәғәт уктары киске 6-сы яртыны күрһәтә ине. Мәрйәм Миндийәр ҡыҙының ярты эш көнө үтте, тиергә лә була, ә бына уның тормош иптәше Әнүр ағайҙың үҙ эшендә киске сменаны башларға сәғәт ярым ғына ваҡыты ҡалған. Иртәнән кискәсә почта таратып, тип тормаясаҡтар, һәр эштең үҙ талабы - ваҡытында башларға һәм тамамларға тейешһең. Ҡыҙҙары яраштырып ҡуйған киске ашты ашап алғас, Әнүр ағайҙы 38 саҡрым алыҫлыҡтағы Александровка ауылына, бер аҙнаға эшкә оҙаттылар. Юл кәрәк-ярағтарын әҙерләгәнсе, йорт хужаһы машинаһы менән һыуын ташып, малдарына бесән һалып, кәрәк-ҡуралағы ары-бире эштәрен дә эшләп өлгөрҙө.

Мәрйәм апай бына шулай донъяһы ышаныслы ҡулдарҙа булғас, эшен дә тыныс күңел менән яратып башҡара. Шулай итеп, киске сәғәт 8-сәлә бер сумка гәзит-журнал тултырып, тағы ла почта таратырға сығып киттек. Юлыбыҙҙы ауыл китапханаһынан башланыҡ. Бәләкәйерәк кенә бер бүлмәлә урынлашыуына ҡарамаҫтан, уҡыу өсөн китаптар күп булып сыҡты бында. Бүлмә эсе таҙа, күңелле. Рух өләшеүсе, күңелгә гәм, сәм һалыусы, уйлыларға уй йомдороусы йорттан бына шундай йылылыҡ бөркөлөп торорға тейештер ҙә инде, тигән уй килә күңелгә. Яңы сыҡҡан китаптарҙың да таушала башлауы әҙәбиәт һөйөүселәрҙең күп булыуы хаҡында һөйләй. Таратыу өсөн китаптар алғас, юлыбыҙҙы ауыл буйлап дауам иттек.

Ноҡаттағы 41 өйҙә 160 тирәһе кеше йәшәй, ти Мәрйәм апай. Бында ла шул уҡ эшһеҙлек проблемаһы ярылып ята. Шулай ҙа, Айыс һәм Арышпар менән сағыштырғанда, бында халҡәр күпкә яҡшыраҡ. Урамдар, йорт алдары тәҙәк кенә. Һәр кем хәленән килгәнсә үҙ йортон бизәргә, ипләргә тырышҡан. Халыҡтың почтальонды көтөп тороуынан, уға ылығыуынан, проблемаларын һөйләп, кәңәштәр һорауынан сығып, Мәрйәм апай депутат йә иһә ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, мөғайын, тигән уй тыуғайны. Был турала һорағас, ул почтальон һәм китапханасы ғына булыуын белдерҙе. "Ике эшем дә халыҡ менән уртаҡ тел табыуҙы, аралашы, кешене тыңлай белеүҙе талап итә. Халыҡ менән бәйләнеш булдыра алмайым икән, китап уҡыусылар ҙа, гәзит-журнал алдырыусылар ҙа булмаясаҡ. Шуға күрә үҙем дә күберәк белергә, уҡырға, шуның менән кешеләрҙә йәлеп итергә тырышам", ти Мәрйәм апай. Көн дауамындағы мөнәсәбәттәрҙән күренеүенсә, булдырылған бәйләнештең ныҡлығы, хатта һәр бер ауылдашының телефон номерын яткә белеүе лә почтальонға ҡарата айырым хөрмәт уятты.

Оҙаҡ йылдар почтальон булып эшләгән Мәрйәм Миндийәр ҡыҙына ихтирам һәм ышаныс ялау еңел генә бирелмәгән, әлбиттә. Һәр эштең үҙ ауырлығы булған кеүек, әллә күпме саҡрым араны йәйәү йөрөгәндә төрлө хәлдәргә лә ҡалып бөтә ул. Эт-ҡошо, яман әҙәмдәре лә осрай юлында. Бөгөн имен ҡотолһам, башҡа был эшкә ике аяғымдың береһен баҫмайым, тигән көндәре лә әҙ булмай. Ауылынан 23 саҡрымды нисек үткән, шул ерҙән кире әйләнеп ҡайтырға лә кәрәк бит. Ҡайһы саҡтарҙа, ай буйы ыҙалап эшләгән 4 мең 500 һум аҡсаһының бер меңенә Инйәрҙән такси ялап ҡайтырға ла тура килә. Үҙ кеҫәңдән түләгәнһең, тип, аҡса сығарып тоттормаясаҡтар, ә инде ышандырып өҫтөңә бурыс алғанһың икән, теләһә нисек үтәргә бурыслыһың. Ғәҙелһеҙлек күргә бәрелеп торһа ла түҙә, һынатмай почтальон. Эшен намыҫ менән башҡара, планын арттырып үтәй, халыҡ риза үҙенән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Почта эшенә байҡау яһағанда, күрһәтелгән ышанысты аҡлай белгән, эшенә аҡса эшләү сығанағы ғына тип ҡарамаған кешеләрҙең күберәк олораҡ быуын вәкилдәренә тура килеүе асыҡланды. Район-ҡала почта бүлексәләрендә почтальондарҙың етешмәүе, бер-ике генә көн эшләп ҡарағандан һуң, эштең ауырлығына сыҙамай, эш хаҡының үтә әҙ булыуына ризалашмай китеүселәрҙең күп булыуы почта эше шулай абруйһыҙға әйләнгәнме, әллә йәшерәк быуын яуаплылыҡ тойғоһон белмәйме, тигән гәжәпләнеү тыуҙыра. Күп кенә баҫмаларҙың тиражы юғалыуына, уҡыусылар аудиторияһының кәмеүенә зарланғанда был проблема буйынса етди уйланаһы бар әле. Халҡыбыҙ ташҡа баҫылғанға ышанысын юғалтмаһын, үҙ теләндә рәхәтләнеп милли баҫмаларыбыҙҙы уҡыһын, тиһәк, Рәсәй почтаһы менән берлектә журналистар, редакциялар берҙәм эш итеп, хеҙмәттәшлектә лә көсәйтергә тейештер. Почтальон хеҙмәтенең абруйын күтәреү, ваҡытында гәзит- журнал алмаусыларҙың зарланыуын кәметеү өсөн ошо эштә конкуренция булдырып, эш хаҡын саҡ ҡына булһа ла күтәреү ҙә мәсьәләне күпкә яйға һала алыр ине, мөғайын.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

## ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

### Шәкәр - кеше уйлап тапҡан ағыуҙарҙың иң яманы

Ҡайһы бер мәсьәләләрҙә Юра урта махсус белемле кешенән өмөт иткәнгә ҡарағанда күпкә тәрәнерәк фекер йөрөтә ине. Нигеҙҙә, улар миңә бала саҡтан уҡ шулай булырға тейешле тип ҡабул ителгән нәмәләргә ҡағылды. Ғәҙәтебеҙҙә тамырланған ҡайһы бер нәмәләрҙең "тәбиғилеге" шул тиклем ҡанығыҙға һеңгәйне, хатта үҙ-үҙемдән: "Ни өсөн мин тап шулай эшләйем, ә икенсе төрлө түгел?" - тип һорарға башыма ла инеп сыҡмай ине.

Саф һауала йөрөгән кәндәребеҙҙең береһендә, нисектер, һүҙ кешегә һәм тотош кешелеккә йоғонто яһаған насар ғәҙәттәргә барып тоташты. Шунда мин үҙемдең алкоголизм һәм наркомания, был сирҙәргә ҡаршы янау һәм яҙа биреү юлы аша көрәшеүҙең һөҙөмтәһеҙ булыуы тураһындағы күҙаллауҙарым менән бүлештем. Юра уларҙың тәбиғәте тураһындағы положениелар менән килеште. "Ә һеҙ ни өсөн ун кешенең туғыҙы алкоголь йәки наркотик һынауы аша үтеүе хаҡында уйланғанығыҙ булманымы?" - тип һораны әңгәмәсем. "Былар барыһы ла ғаилә тәрбиәһенең, ғаилә институтының емерелеүе һөҙөмтәһе. Шулай уҡ мәктәп тә насар ғәҙәттәрҙе таратыуға үҙ өлөшөн индерә. Программаларҙың көсөргәнешле булыуы, ултыраҡ тормош (хәрәкәтһеҙ ултырыу), насар әсбаптар, ҡайһы бер уҡытыусыларҙың компетентһыҙлығы уҡыусыларҙың анын боҙа - мәктәптә тамамлағансы улар психик яҡтан тороҡһоҙ булып сыға. Һөҙөмтәлә йәштәр эскелек һәм наркоманлыҡ һаҙлығына бата", - тинем мин. "Әлбиттә, былар барыһы ла урынлы, - тип уйсанланып яуапланы Юра. - Әммә бындай характерлы социаль яуызлыҡтың төп сәбәбе икенсе - кеше мәхәббәтте, яратыуҙы онотто. Бында мин телевизорҙан күрһәтелгән йәки Асламова тибындағы журналистар гәзиттәрҙә яҙған яланғас ирҙәр һәм ҡатындарҙың мөнәсәбәтен күҙ уңында тотмайым. Хәҙерге йәштәр яратыу тигәндә хайуандарға хас булған тәндең механик хәрәкәттәрен аңлай. Әммә хайуандар енси бәйләнештән культ яһамай - улар бары тик Тәбиғәт тарафынан бирелгән үҙ тәғәйенләнешен генә башҡара. Һеҙ берәй ваҡыт эт йәки сусҡаның енси бәйләнеш ваҡытында ҡыуаныс кисергәнен күргәнегеҙ бармы? Уларҙың үҙ-үҙен тотошонда бары тик битарафлыҡ һәм йәшереп булмаҫтай һағыш ҡына тойорға мөмкин. Ә кеше был күп сәйнәлгән ваҡиғаны фетишҡа әйләндерә. Ысын "баллы ай"ҙан һуң ир менән ҡатын физик һәм рухи көстөң шундай йонсоу сигенә етә, хатта берберенһен күргеләре лә килмәй. Буласаҡ балаларына ата-әсәнең мөхәббәте ҡалмай. Шул ваҡытта улар мөхәббәт етешмәүен шәкәр аша тулыландыра башлай".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

### Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

164. Иң ҙур уңышҡа өлгәшеү юлында ҡаршылыҡ булып тороуы мөмкин булған кире уйҙар менән көрәшкәндә файҙалы ысул - уйҙарҙы өҙөү принцибы. Аңығыҙға кире уй килеп инеү менән уны тиҙ генә ыңғай, сәләмәт уйға әйләндереү теләген тойорға тейешһегеҙ. Бының өсөн кире уй килеп инеү менән үҙегеҙҙе семетеп алығыҙ һәм: "Мин көслө, ә көсһөҙ фекерҙәр китте", - тиегеҙ. Йә бар тауышығыҙға ҡысҡырығыҙ, йә башҡа нәмә эшләгеҙ, әммә кире уй-фекерегеҙ онотолорлоҡ булһын. Шулай үҙегеҙҙе күнектереп, күптәрҙе ғазаплап торған кире уйҙарығыҙҙың кәмеүен, улар урынын ысын еңеүсенең аң көйләнеше ала барыуын күрерһегеҙ.

165. Эш көнө тығыҙ булғанда ла, ғаилә менән ниндәйҙер сараға барыу графигы тура килгәндә лә, шәхси рухи үҫешегеҙҙе тәьмин иткән эшмәкәрлек хаҡында етди уйланырға ваҡыт табыу мөһим. Бындай шөғөлдө һис ҡасан бушҡа ваҡыт уҙғарыу тип ҡарарға ярамай. Көндөң ығы-зығылы булыуына ҡарамаҫтан, яҡындағы паркта йәки майҙансыҡта балаларҙың уйнағанын бер сәғәт күҙәтеү йәки прогулкала йөрөү күптәр өсөн ваҡытты бушҡа уҙғарыу кеүек тойолор. Әммә, тормоштоң ябай ҡыуаныстарына ҙур иғтибар бүлеп һәм эш көнөгөҙгә күберәк тигеҙлек индереп, һеҙ уның башҡа сәғәттәрен тағы ла һөҙөмтәлерәк итәсәкһегеҙ. Үҙегеҙҙе яҡшы тоймайынса яҡшы ғәмәл ҡыла алмаясаҡһығыҙ. Тыныс, көсөргәнештән арынған, энтузиазмығыҙ ташып торған саҡта һеҙ һөҙөмтәлерәк эшләйһегеҙ, яҡшыраҡ ижад итәһегеҙ, хәрәкәтсәнерәкһегеҙ. Был ябай хәҡиҡәт даими раҫланып тора, әммә беҙ тағы ла көндәлек мәшәҡәттәргә күмелеп, "ағастар артында урман шаулап үҫеүен күрмәйбеҙ".

166. Күберәк уҡығыҙ, күберәк өйрәнегеҙ, күберәк көлөгөҙ, күберәк яратығыҙ.

167. Яҡын киләсәктәге алты айҙа мөнәсәбәттәрегеҙҙе нығытырға теләгән биш кешене һайлап алығыҙ. Уларҙың исемдәрен айырым-айырым яҙып сығығыҙ, ә аҫтарына ни өсөн мөнәсәбәттәрегеҙҙе яҡшыртырға теләүегеҙҙе һәм быны ниндәй ваҡыт эсендә нисек итеп тормошҡа ашырасағығыҙҙы яҙығыҙ. Был маҡсат ҡуйыуҙың тағы бер процедураһы - яҡшы һөҙөмтә биргән практика, сөнки дуҫлыҡ нығына. Яҡшы ата-әсә, дуҫ йәки гражданин булыу тураһында ныҡлы ҡарар ҡабул итегеҙ. Яраҡкан кешеләрегеҙгә ихтирамығыҙҙы һәм иғтибарығыҙҙы күрһәтеү өсөн яһаған аҙымығыҙға ижади ҡарағыҙ. Почта аша ебәрелгән ҡотлау открыткалары - матур бүләк, ләкин гәҙәти булмаған рухи саралар, мәҫәлән, бизнес буйынса партнерығыҙ менән тәбиғәткә романтик ялға сығыу, күптәнге дуҫығыҙ менән таң алдынан балыҡҡа барыу тураһында ла уйланырға мөмкин.

168. Доғаларҙың ижади көсө хаҡында иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

169. Шәхси үҫешегеҙгә Норман Винсет Пилдың "Ыңғай фекерләү ҡеүәте" тип аталған һәм алты кассетанан торған комплекты ҙур өлөш индерер. Уны һатып алып, ҡабат-ҡабат тыңлағыҙ. Ул һеҙгә оҙайлы, бәхетле, һөҙөмтәле һәм матур тормош тәьмин итәсәк стратегиялар һәм ысулдар менән шыплап тултырылған.

170. Көн тәртибен төҙөү, матур ҡарарҙарҙы теркәү, тормошоғоҙ һәм ундағы тәртип өсөн яуаплылыҡты арттырыу маҡсатында кеҫәгә һыймалы блокнот һатып алыу тураһында уйлағанығыҙ булманымы? Бындай блокнот ҡиммәт тә тормай.

**Робин ШАРМА.**



## 10 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Защита свидетелей". Сериал (12+)
23.30 "Вечерний Ургант" (+16)
00.00 "Познер" (16+)
01.00 Ночные новости
01.25, 03.05 "Команда 49: огненная лестница". Драма (16+)
03.00 Новости
03.35 "Цой - "Кино"
04.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 100-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Поцелуйте невесту!". Сериал. Мелодрама
17.00 "Вести"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Точка взрыва". Сериал (12+)
00.30 "Девчата"
01.10 "Вести+"
01.35 "40 000 футов". Приключения (16+)
03.30 "Чак-4" (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Ынйы Вәдүтова (6+)
10.05 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (0+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мостай Кәрим". Телетапшырыу (6+)
19.00 "Башҡорт йыры-2013" (6+)
21.00 "Дуҫтар сәләме ". Концерт (6+)

### БСТ
07.00 "Сәләм" (12+)
10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)
10.30, 15.30 "Гора новостей"
10.45 "Городок АЮЯ"
11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)
11.15, 17.15 "Орнамент"
11.30 Новости (на русск. яз.)
12.00, 03.00 "Золотое наследие"
12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Уңган килен" (16+)
13.30 Новости (на башк. яз.)
13.45, 03.30 "Мелодии души" (12+)
14.45 "Я вернусь к вам сквозь столетия" Г. Хайри (6+)
15.15 "Зеркальце"
15.45 "Бауырһаҡ"
16.00 "Шатлык йыры"
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)
16.45 "Дорога к храму"
17.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"
18.30, 20.30, 01.00 "Телецентр" (12+)
19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Полезные новости" (12+)
22.00 "Следопыт"
22.30 "Деловой Башкортостан"
22.45 Художественный фильм (16+)
04.00 "Детский "Байык-2009"

## 11 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
16.10 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
17.00 "Поле чудес"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Защита свидетелей". Сериал (12+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.10 "По версии Барни". Мелодрама (16+)
02.35, 03.05 "Где угодно, только не здесь" (16+)
03.00 Ночные новости
04.50 За кулисами "Большой разнцы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 101-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Поцелуйте невесту!". Сериал
17.00 "Вести"
17.10, 19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+)
22.50 "На всю жизнь". Детектив (16+)
00.40 "4 таксиста и собака" (12+)
03.00 "Чак-4" (16+)
03.55 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Дарман" (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Роза Аккучукова (6+)
09.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Йырҙар (0+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ағыла моң". Рэдик Ефремов. Концерт (6+)
19.00 "Башҡорт йыры-2013" (6+)
21.00 "Кисултырып". Артур Туктағолов (6+)

### БСТ
07.00 "Сәләм" (12+)
10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 15.30 "Гора новостей"
10.45 "Зеркальце"
11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)
11.15, 17.45 "Орнамент"
11.30 "Итоги спорта"
12.00, 03.00 "Золотое наследие" (12+)
12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45 "Весело живем"
13.00 "Уңган килен" (16+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.45, 03.30 "Мелодии души"
14.45 "Тәмле" (на башк. яз.)
15.15 "Книга сказок"
15.45 "Бауырһаҡ"
16.00 "Йырлы кәрәҙ"
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)
17.15 "Криминальный спектр" (16+)
18.00 "Үткән ғүмер. 1960-е годы" (12+)
18.30, 20.30, 01.00 "Телецентр" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Власть отвечает" (16+)
22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)
22.30 "Деловой Башкортостан"
22.45 "Уфа-город дружбы и единства" (12+)
04.30 "Детский "Байык-2010"

## 12 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Мы, двое мужчин" (12+)
07.50 "Кубанские казаки"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Весна на заречной улице"
12.15 "Дачная поездка сержанта Цыбули". Комедия
13.40, 15.15 "Они сражадись за Родину". Военная драма
15.00 Новости (с субтитрами)
19.25 "ДОстояние РЕспублики". Лучшее
21.00 "Время"
21.30 "Офицеры". Военная драма
23.15 "Юбилейный концерт Николая Расторгуева и группы "Любэ"
01.05 "Исчезновение". Триллер (16+)
03.10 "Пожар"

### РОССИЯ 1
04.50 "Верные друзья". Лирическая комедия
06.50 "Любовь земная". Мелодрама
08.45 "Судьба". Мелодрама
11.55, 15.00 "Ящик Пандоры". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации"
16.40 "Кривое зеркало". Театр Евгения Петросяна (16+)
18.35, 20.20 "Марш-Бросок: особые обстоятельства". Остросюжетный фильм (12+)
20.00 "Вести"
22.35 "Охота на Пиранью". Боевик (16+)
01.00 "Россия молодая". Праздничный концерт
02.35 "Устрицы из Лозанны". Комедия (16+)
04.05 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.20 "Байыҡ". 1-се тур (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Илсур Тайсин (6+)
15.00 "Уйна, ҡурай". Концерт (2010й.) (6+)
20.00 "Йондоҙло күпер". Фирүзә Париж, Азат Йыһаншин (6+)

### БСТ
07.00, 16.30, 19.00 Новости (на башк. яз.)
07.15 "Я люблю тебя, Уфа!". Концерт (12+)
08.00 "Историческая среда"
08.30, 03.00 "Замандаштар" (6+)
09.00 "Солнечный город мой". Фильм-концерт
09.30 "Кукушкин чай". Фильм-концерт
10.00 "Мы - дети одной планеты". Концерт
11.00, 13.15, 16.45 "Салям, Уфа!"
13.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)
19.30 "Концерт Юрия Шевчука"
22.00 "Уфа - Ленинград. Обратный билет"
23.00 "Берҙәмлек - Содружество". Гафурийский район
01.00 Художественный фильм (16+)
02.30 "Историческая среда"
03.30 "Я люблю тебя, Уфа!". Концерт (12+)
04.15 "Детский "Байык-2011". Гала-концерт

## 13 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
16.10 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
17.00 "Свадебный переполох" (12+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Форсаж-5". Боевик (16+)
23.55 "Соблазнитель". Комедийная мелодрама (16+)
02.10, 03.05 "Кузина Бетти". Комедия
03.00 Новости
04.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 102-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Поцелуйте невесту!"
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Апофегей". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+)
22.50 "Поединок" (12+)
00.25 Валентина Терешкова. "Чайка и Ястреб". Док. фильм
01.25 "Вести+"
01.50 "Честный детектив" (16+)
02.25 "Хулиганы-2" (16+)
04.15 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Дарман" (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
09.00 "Автограф". Таңсулпан Ғарипова (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Зәңгәр шәл". Спектакль (6+)
20.30 "Кис ултырып ". Миңзәлә Хәйруллинаның ижад кисәһе (6+)

### БСТ
07.00 "Сәләм" (12+)
10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 15.30 "Гора новостей"
10.45 "Цирк в 13 метров"
11.00, 17.30, 00.15 "Замандаштар" (6+)
11.15, 17.15 "Орнамент"
11.30 "Власть отвечает" (16+)
11.45 "Мир настоящих мужчин" (16+)
12.00, 03.00 "Золотое наследие" (12+)
12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Уңган килен" (16+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.45 "Байыҡ-2013"
14.45 "Автограф" (6+)
15.15 "Ғәләмәт донъя"
15.45 "Шәп арба"
16.00 "Йырлы кәрәҙ"
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)
16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)
17.45 "Сәләм+" (12)
18.00 "Бәхетнамә"
18.30, 20.30, 01.00 "Телецентр" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Полезные новости" (12+)
22.00 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"
22.30 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)
23.15 "Смелая музыка" (16+)
03.30 "Мелодии души"
04.15 "Детский "Байык-2012"

## 14 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
16.10 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
17.00 "Жди меня" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Живая сталь". Фантастика (16+)
00.00 "Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербург". Музыкальный фестиваль
03.45 "Рубин Гуд" (12+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Дело Х. Следствие продолжается". Ток-шоу (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 103-я серия
16.00, 17.30 "Поцелуйте невесту!". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - ПФО"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Апофегей". 3-я и 4-я серии (12+)
01.25 "Время радости". Комедия (12+)
22.50 "Превратности судьбы". Мелодрама (12+)
00.50 "Контрабандист" (16+)
02.30 "Горячая десятка" (12+)
03.35 "Долгое приветствие и быстрое прощание" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Ғәзим Ильясов. Концерт (2011й.) (6+)
17.00 "Йәнкиҫәккәйем". Спектакль (6+)
20.00 "Иман нуры халҡыма". "Ҡурай" йыр-моң каналы концерты (6+)

### БСТ
07.00 "Сәләм" (12+)
10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 15.30 "Гора новостей"
10.45 "Ғәләмәт донъя"
11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)
11.15 "Орнамент"
11.30 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"
12.00, 03.00 "Золотое наследие" (12+)
12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Уңган килен" (16+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.45 "Мелодии души" (+12)
14.30 "Величие просторы" (+6)
15.15 "Зеркальце"
15.45 "Байтус" (6+)
16.00 "Сулпылар"
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)
17.15 "Криминальный спектр" (16+)
17.30 "Ко Дню работников миграционной службы"
18.00 "Йома"
18.30, 20.30, 01.00 "Телецентр"
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Полезные новости"
22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)
22.30 "Отдел культуры" (12+)
23.00, 06.30 "Бердэмлек - Содружество"
23.30 "Дарман"
03.30 Художественный фильм (16+)
05.45 "Мелодии души"

## 15 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Неподсуден". Драма
06.00 Новости
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Коммунальный рай"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Идеальный ремонт"
13.10 "Абракадабра" (16+)
15.20 "Форт Боярд" (16+)
16.55 "Отпуск с риском для жизни"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Угадай мелодию" (12+)
18.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
20.00 "Куб". Игровое шоу (12+)
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". Музыкальный фестиваль
02.00 "Коммандо". Боевик (12+)
03.40 "Холодные сердца" (16+)

### РОССИЯ 1
05.30 "Здравствуйте, я ваша тетя!". Комедия 07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Минутное дело". Развлекательная программа
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25, 14.30 "Найденыш-2". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.50 "Субботний вечер"
18.55 "Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Счастье есть". Мелодрама (12+)
00.35 "Слепой горизонт". Триллер (16+)
02.40 "Космический джем". Фантастическая комедия (16+)
04.25 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.35 "Тәмле" (12+)
09.15 "Ҡош юлы". Рамазан Йәнбәков (6+)
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "М. Искужина дуҫтарын йыя". Концерт (6+)
19.00 "Замандаштар". Ринат Рамазанов (6+)
21.00 "Беҙ йәшнәргә килдек был ергә". Гөлдәр Ишҡыуатова (6+)

### БСТ
07.00, 19.30 Новости (на башк. яз.)
07.15 "Фильм детям"
08.30 "Аль-Фатиха"
09.00 "Көндәлек" (6+)
09.30 Мультфильм (на башк. яз.)
10.00 "Сәләм+" (12+)
10.15 "Бәхетнамә"
10.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"
11.30 "Большой чемодан" (6+)
12.00 "Следопыт"
12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)
12.45 "Здоровое решение" (12+)
13.15 "Смелая музыка" (16+)
14.15 "Дарю песню". Концерт
16.16 "М. Себастиан "Мона" (16+). Спектакль Московского драматического театра под руководством А. Джигурханяна
19.00 "Башкорттар"
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Еду я деревню"
20.45 "Живое село"
21.15 "Преград.net" (12+)
22.00 "Башҡорт йыры-2013"
22.45, 05.00 "Берҙәмлек - Содружество". Уфа"
00.45 "Первый фестиваль юниор-лиги КВН РБ "Кубок надежды-2013"
03.00 Художественный фильм

## 16 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Голубая стрела"
06.00 Новости
07.40 "Армейский магазин" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания" (12+)
13.10 "Всадник без головы". Приключения
15.05 "Дети Дон Кихота". Мелодрама
16.30 "Призвание"
18.20 "Голосящий Кивин". Музыкальный фестиваль (12+)
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Вышка" (16+)
00.00 "Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". Музыкальный фестиваль. Финал
01.55 "Перевал Миллера" (16+)
04.00 Тамара Гвердцители. "Я трижды начинала жизнь с нуля" (12+)

### РОССИЯ 1
05.35 "Одиночное плавание". Драма
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Крылья ангела". Мелодрама
13.20, 14.30 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа
14.00 "Вести"
16.00 "Сваты-5". Комедийный сериал (12+)
20.00 "Вести недели"
21.30 "Невеста моего жениха" . Мелодрама (12+)
23.30 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+)
01.20 "Спросити Синди". Романтическая комедия (12+)
03.15 "Машина времени". Боевик (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (0+)
09.15 "Автограф". Рәшит Низамов (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (0+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Илгизәр+Вера". Спектакль (6+)
19.00 "Йәштәр ҡалаһы". Сәғиҙулла Байегет (2009й.) (+6)
22.00 "Алмабикә". Фильм (+6)

### БСТ
07.00 Новости (на башк. яз.)
07.15 "Доброе утро!"
07.45 "Салауат йыйыны" (12+)
08.30 "Йома"
09.00 "Еду я в деревню"
09.30 "Живое село"
10.00 "Бауырһаҡ"
10.15 "Городок АЮЯ"
10.30 "Гора новостей"
10.45 "Книга сказок"
11.00 "Байтус" (6+)
11.15 "Семәр"
11.30 "Сулпылар"
11.45 "Алтын тирмә"
12.30 "Үткән ғүмер"
13.00 "Тәмле" (на башк. яз.) (12+)
13.30 "Башкорттар"
14.00 "Дарю песню"
15.00 "Весело живем" (12+)
15.30 "Хазина"
16.00 "Дорога к храму"
16.30, 19.15 "Замандаштар" (6+)
17.00 "Историческая среда"
17.30 "Звезды Белоречья"
19.30 Новости недели (на башк. яз.)
20.00 "Сабантуй-2013"
20.15 "Любимое дело"
20.30 "Итоги спорта" (16+)
21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)
21.15 "Бизнес-обзор"
21.30 Новости недели (на русск. яз.)
22.00 "Байыҡ-2013"
23.00 "Вечер.com" (12+)
23.45, 06.00 "Берҙәмлек - Содружество"
00.45 "Свидание с джазом" (12+)
01.45 М. Себастиан "Мона" (16+)
04.30 Художественный фильм (16+)

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҠАЙҘА ТЫУҒАНБЫҘ...

## шунда ярайыҡ



**Бына тағы каникулдар, отпускылар мәле етә. Һуңғы йылдарҙа кешеләрҙең ял, сәйәхәт итеүгә ҡарашы һиҙелеп үҙгәрә. Йәйге ялын сағыу көньяҡ ҡояшы аҫтында, диңгеҙ буйында үткәреүселәр һаны арта бара. Сит илдәрҙә ял итеү ҙә әллә ни артыҡ мәшәҡәт тыуҙырмай. Бөгөн мин Төркиәлә уҙғарған ялымдан алған тәьҫораттарым, уй-фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**

Төрөк донъяһы башҡа алдынғы илдәрҙән ҡалышмай, үҙ милләтенең үҙенсәлеген, дәрәжәһен, тотҡан урынын һаҡлап ҡалыу маҡсатында, боронғо рухи ҡаҙаныштарына, ғөрөф-ғәҙәттәренә, фольклорына, һүҙ сәнғәтенә таянып, билдәле бер үҫеш кисерә, алға табан уңышлы аҙымдар яһай был ил. Иң тәүҙә мин шуға иғтибар иттем: төрөктәр тик үҙ телдәрендә генә һөйләшә. Шулай ҙа был илдә ҡурд, ғәрәп, рус, украин, ҡаҙаҡ, татар һәм башҡа милләт вәкилдәрен дә осратырға мөмкин. Ләкин улар ҙа нигеҙҙә төрөк телендә аралаша. Дөйөм алғанда, матбуғат, радио-телевидение эшмәкәрлеге, музыка, видеоклип, кинофильм сәнғәтенең үҫеше төрөк иленең милли бөтөнлөгөн сағылдыра.

Төрөк халҡы төрлө ҡатлауҙарға бүленгән, мәҙәни кимәле, һөйләшеү, аралашыу үрнәге, кейемдәре илдең географик урыны менән дә бәйле. Шуға күрә, беҙҙәге кеүек бер төрлөлөк юҡ: баштан-аяҡ оҙон кейемдәргә сорналғандары ла, ҡыҫҡа итәк кейгән, саманан тыш буянған ҡыҙҙар ҙа, ҡолағына һыңар алҡа таҡҡан, шортылы һәм заманса биҙәкле футболкалы үҫмерҙәр ҙә, башына түбәтәй кейгән, ҡулына тиҫбе тотҡан йәш егеттәр ҙә - былар бөтәһе төрөк иленең бөгөнгө йөҙө. Әммә бер нисә көн бында булғандан һуң төрөктәрҙең Европа, ҡайһылыр кимәлдә Рәсәй халҡына оҡшарға тартылыуын һиҙҙем. Сауҙа нөктәләрендә төрөктәр менән бер рәттән, рустар "кем кемде ота" көйләнешендә һатыу итә. Сауҙа өлкәһендә эшләүсе төрөктәрҙең барыһы ла тигәндәй рус телен белә, аңлай. Улар билдәләүенсә, Рәсәй туристарынан килгән килем яҡынса 60 процент тәшкил итә.

Намаҙ ваҡыттарында аҙан тауышы яңғырағанда үҙеңдең бер үк төрки тамырҙан булыуыңды, рухташ, диндәш икәнеңде тояһың, был нисектер һине уларға яҡынайта кеүек. Ниндәйҙер кимәлдә был телгә лә ҡағыла. Диҡҡәт менән тыңлаһаң, төрөк телен аңлап була. Бер көн шулай ҡатын-ҡыҙҙар кейеме магазинында ике ҡырғыҙ ҡыҙы менән һөйләшеп киттем. "Беҙгә кейем һайлашмаҫһығыҙмы икән?" тип мөрәжәғәт итте улар. Анталияла берҙән-бер Халыҡ-ара туризм колледжы бар икән. Унда Англиянан, Рәсәйҙән, Американан, Германиянан тел белгестәре килеп уҡыта. "Юғары мода үлсәмдәренә тап килерлек итеп кейенергә кәрәк беҙгә, Англияға йәки Германияға практикаға юлланасаҡбыҙ", тине йәштәр. "Белем, эске йөкмәтке өҫ-баштан торамы әллә һеҙҙең уҡыу йортонда?" тип шаяртам студенттарҙы. "Юҡ, беҙ икебеҙ ҙә яҡшы уҡыйбыҙ. Тик тәрбиәлелектең мөһим күрһәткестәренең береһе - һәр кешенең өҫтөндәге кейеме. Зауыҡ, матурлыҡ тәрбиәһе алғандар ғына төрлө милләт халыҡтары менән осрашҡанда уларға береклектә - тереклек идеяһын еткерә ала", тип йылмайҙы осраҡлы таныштарым. Ҡыҫҡаһы, Рәсәйҙән һәм бөтә БДБ илдәренән студенттар байтаҡ Анталия колледжында. Рәсәй, Украина, Ҡырғыҙстан һәм Ҡаҙағстандан күптәр икән.

Тәбиғәт хозурлығы һәр кемде һоҡландырырлыҡ, урамдарҙағы таҙалыҡ беҙҙең өсөн ысын мәғәнәһендә өлгө булырлыҡ. Урамдарҙы шау сәскәгә төрөнгән бейек-бейек ағастар биҙәй. Һутҡа тулышып алмалар, әфлисундар, сливалар үҫә. Беҙ мәктәп дәреслектәренән Урта диңгеҙ тип белгән диңгеҙҙе улар Аҡдинез тип йөрөтә. Һыуы яңы һауған һөттәй йылы, йәнгә-тәнгә сихәт бирерлек йомшаҡ, тәнде генә түгел, күңелде лә сафландыра, тынысландыра. Урта диңгеҙ буйы донъялағы иң боронғо тарихты, цивилизацияны, мәҙәниәтте, тыуҙырған тарафтар бит. Бөгөн дә уны төрөк иленең биҙәге, йөҙөк ҡашы, тиһәм дә хата булмаҫтыр, моғайын. Сөнки Төркиәнең дөйөм мәнфәғәтен, абруйын күтәрә ул.

Элек "тимер ҡоршау" артында йәшәгәндә сит-ят ҡитғаларҙы күрергә хыял иттек. Бөгөн иһә һәр беребеҙгә бөтә донъя асыҡ. Күрәбеҙ, сағыштырабыҙ... Эйе, Төркиәнең тәбиғәте, һис шикһеҙ, хозур, хас та әкиәттәге ожмах. Тәүге мәлдә ошо матурлыҡҡа һоҡланып туймайһың. Әммә сәйәхәтең оҙағыраҡҡа һуҙылһа, үҙ илеңде яратыу, һағыныу, кесе йәштән әсә һөтө менән тәбиғәт тарафынан һалынған милли әҙәбебеҙ йәнебеҙҙе йылытып торған тыуған яҡҡа тартыла. Миңә ҡалһа, сит илдәрҙе күреү-хәйерле ғәмәл, ә күңел бөтөнлөгөнә һәм бәхеткә юл тик үҙ илебеҙҙә, Башҡортостанда ята. Ҡөҙрәтле еребеҙҙе, ғәзиз халҡыбыҙҙы алыштырырлыҡ һис бер нәмә юҡ икән ул беҙ белмәгән, беҙ күрмәгән илдәрҙә. Тыуған еребеҙҙән, телебеҙҙән яҙҙырмаһын Хоҙай Тәғәлә. Ҡайҙа тыуғанбыҙ, шунда ярайыҡ, үҙ еребеҙҙең ҡәҙерен белеп йәшәйек, дуҫтар!

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# РУЛЬ АРТЫНДАҒЫ...

## иҫеректәр ҡурҡыныс

**Баш ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы матбуғат конференцияһында Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы бүлеге начальнигы Радик Аллағолов билдәләүенсә, йылдың дүрт айы һөҙөмтәләре буйынса баш ҡалала балалар ҡатнашлығында 36 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, транспорт сараларында балаларҙы йөрөтөү ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 3217 осрағы иҫкәртелгән.**

"Мәктәп йәшендәге балалар юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен яҡшы белә, уларҙың юл-транспорт һәләкәтенә тарыуы йәки юлда төрлө йәрәхәт алыуы һ.б. бары тик ололарҙың яуапһыҙлығына һәм талаптарҙы анығ үтәмәүенә бәйле", - тип белдерҙе "баш" инспектор. Дөйөм алғанда, дүрт ай эсендә 557 юл-транспорт һәләкәте теркәлгән. Был һан былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 34-кә кәмеһә лә, һәр һан артында зыян күргән, ғәрипләнгән, яҡты донъя менән хушлашҡан яҙмыштар ята. Быйыл һәләк булыусылар һаны 5-кә кәмеп, 23 кеше тәшкил итһә, төрлө дәрәжәләге йәрәхәттәр алыусылар - 669 ( -30).

Юлдағы һәләкәттәрҙең 65 проценты водителдәр өлөшөнә төшһә (йәйәүлеләргә юл бирмәү (2736 осраҡ), пассажир автобусарының килем артынан ҡыуып, бер-береһенә юл бирмәүе (17 осраҡ), транспорттың юлға төҙөк булмай сығыуы һ.б.), 35 проценты йәйәүлеләр өлөшөнә тура килә. Был инде уларҙың юлды рөхсәт ителмәгән урындан сығыуына бәйле. Дөйөм алғанда йәйәүлеләр ошо осорҙа 3597 тапҡыр ҡағиҙә боҙған.

Юл хәрәкәте ҡағиҙәләре барлыҡ граждандар өсөн дә берҙәм һәм инспекторҙар транспорт менән идара итеүселәрҙе вазифаһына ҡарап айырмай. Мәҫәлән, йыл башынан алып вазифа биләүсе 59 кешегә мотлаҡ үтәлергә тейешле күрһәтмә бирелгән, 129 вазифа биләүсе административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

Бөгөн Өфө ҡалаһы буйынса 20 наряд эшләй. Шуға ла ҡайһы бер ваҡытта граждандар тарафынан юл-транспорт ваҡиғаһы урынына уларҙың оҙаҡ килеүенә ялыуҙар була икән. Ләкин шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: бер урынға барып, ундағы хәл-торошто асыҡлағансы, 30 минуттан бер сәғәткәсә ваҡыт кәрәк. Ә көнөнә бер нисә тиҫтә авария булып тора. Шулай уҡ ҡайһы ваҡытта инспекторҙарҙың водителдәргә мөнәсәбәте буйынса ла ялыуҙар була, ти Радик Камил улы. Әммә хәҙер инспекторҙар видеотеркәү (видеофиксатор) ҡулайламалары менән тәьмин ителгән, улар һәр ваҡытта ла эшләп тора һәм арбитр ролен дә үтәй. Һөҙөмтәлә 10 ялыуҙың береһе генә ысынбарлыҡҡа тап килеүе мөмкин. Уны һүндереү инспекторҙың үҙе өсөн зыянлы булыуы ла ихтимал, сөнки артабан вазифаһында ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһе хәл ителәсәк.

Әйткәндәй, ЮХХДИ эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше - граждандарҙың ғүмерен һәм сәләмәтлеген һаҡлау, юл-транспорт ваҡиғаһына килтереүсе хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү һәм уларға юл ҡуймау. Сөнки Өфө водителдәренең тиҙлекте арттырыуға ҡарарғанда руль артына эскән килеш ултырыуы 2,5 тапҡырға артығыраҡ теркәлә икән. Мәҫәлән, дүрт ай эсендә 2600 эскән водитель тотолған. Шул уҡ ваҡытта тиҙлек яратыусылар ни бары бер мең генә булған.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ИҒЛАН

# Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты



2013 йылдың **22, 24 июнендә** 7- се, 8-се кластарҙы тамамлаған уҡыусыларҙы 2013-2014 укыу йылына ҡабул итеү өсөн һынауҙар үткәрә.

**22 июндә 10.00 сәғәттә** ҡабул итеү һынауҙары **Хәйбулла районында** Аҡъярҙың 2-се мәктәбендә (Хәйбулла һәм башҡа яҡын-тирәләге районлар балалары өсөн) үткәрелә;

**24 июндә 10.00 сәғәттә** һынауҙар **Өфө ҡалаһында**, гимназия бинаһында үткәреләсәк.

Әңгәмәлә ҡатнашырға теләүсе уҡыусыларға үҙҙәре менән 1-се кластан башлап бөтә уҡыу йылдарына өлгәшеү табеле күсермәһе, тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхәһе һәм күсермәһе), бер шаҡмаҡлы, ике буй дәфтәр, ручка алып килеү мотлаҡ.

Уҡыусыларҙың башҡорт һәм рус телдәре, математика буйынса белем кимәле тикшереләсәк, шулай уҡ әңгәмә барышында уларҙың дөйөм белем һәм мәҙәниәт кимәле лә ҡараласаҡ. Ошо дүрт һынауҙы үткән балалар уҡырға саҡырыласаҡ.

**Адрес: Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 88.**

**Иҫкәрмә: Өфө ҡалаһынан 8-11 кластарға уҡыусылар ҡабул ителмәй.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ӘЙҘӘГЕҘ, МАЙҘАНҒА...

## күңел асырға

**12 июнь баш ҡалабыҙ бер юлы өс байрам - Рәсәй, Салауат Юлаев һәм Өфө ҡалаһы көндәрен билдәләйәсәк. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, был көндә Өфө халҡын сағыу байрам саралары көтә.**

Йола буйынса, байрам республика етәкселегенең Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу тантанаһы менән башланасаҡ. Был көндә шулай уҡ Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыу планлаштырылған.

12 июндә Ленин урамы тағы йәйәүлеләр урамына әүереләсәк. Бында "Һөнәрселәр фестивале" уҙа. Пушкин урамынан Киров урамына тиклем халыҡ оҫталарының эштәренән ойошторолған күргәҙмә урынлашасаҡ, унда төрлө ҡул эштәре менән танышырға, һатып алырға, хатта оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашып, үҙеңә өйрәнергә мөмкинлек буласаҡ. Ҡала округы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был сараға Башҡортостан оҫталары ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, Белоруссиянан һәм Ҡырғыҙстандан ҡунаҡтар саҡырылған. "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы алдында Благовар районы халыҡ кәсебе һәм һөнәрҙәрен һүрәтләгән милли ихата төҙөйәсәк, ә ҡаланың Совет районы тирмә ҡорасаҡ.

Бынан тыш, был көндә Өфө "Берҙәмлек" Милли мәҙәниәттәр фестивале ҡатнашыусыларын ҡаршылай. Латвия, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Польша, Нигерия, Чад, Ҡытай, Һиндостан, Ҡаҙағстан, Тажикстан һәм Төньяҡ Осетия-Аланиянан килгән мәҙәни коллективтар ҡатнашлығындағы Гала-концертты 16 сәғәттә Ленин исемендәге майҙанда ҡарай алаһығыҙ. Фестивалдә ҡатнашыусылар 8 июндән Ҡырмыҫҡалы, Ғафури районарында, Салауат һәм Күмертау ҡалаларында төрлө сараларҙа ҡатнашасаҡ, башҡорт мәҙәниәте, көнкүреше, йолалары менән танышасаҡ, сығыш яһаясаҡ. Ғөмүмән, был көндә Ленин майҙаны иң әүҙем урынға әүереләсәк, унда байрамса саралар, төрлө коллективтар бер-берећен алыштырып торасаҡ.

Ҡала көнө музыка һөйөүселәргә ҙур бүләк яһамаҡсы. 12 июнь "Аҡбуҙат" ипподромында яҡташтарыбыҙ Юрий Шевчук менән Земфираның концерты уҙасаҡ. Концерт түләүле, ойоштороусылар әйтеүенсә, билетты 600 һумдан башлап алырға була. Бындай хаҡ ике факторға таянып билдәләнгән. Беренсенән, концертҡа ысынлап та Земфира һәм DDT төркөмөнөң талантын яратыусы "үҙ" тамашасылары йыйыласаҡ. Икенсенән, концерттан килгән килемдең бер өлөшө хәйриә акцияһына йүнәлтеләсәк. Ике музыкант та үҙе менән баш ҡалаға, дөйөм алғанда, 70 тонна яҡтыртыу һәм тауыш көсәйтеү техникаһы, видеоэкрандар, ҙур мониторҙар алып киләсәк. Шоуҙың аҙағында тамашасыларҙы байрам салюты көтә.

М. Ғафури, И. Якутов исемендәге парктарҙа, "Кашҡаҙан" паркында йылдағыса концерттар, аттракциондар, конкурстар ойошторола. Байрам концерты С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда ла үтәсәк. Байрам саралары Ленин майҙанында сәғәт 23:30-ҙа фейерверк менән тамамлана.

Бынан тыш, Өфөнөң һәр районында күңел асыу мөмкинлеге буласаҡ. Дим районының Ухтомский урамында "Кала - ул беҙ!" тип аталған йәштәр байрамы, ә район паркында "Һабантуй - 2013" үтә.

Киров районында Аксаков исемендәге баҡсала "Эндорфин" урам театрҙары фестивале менән "Йырҙарҙа рус күңеле" рус йырҙары кисәһе ойошторола.

Ленин районында район "Шәжәрә байрамы" сиктәрендә "Халыҡ оҫтаһы" сараһы планлаштырылған.

Калинин районында шулай уҡ Рәсәй һәм Ҡала көндәренә арналған бер юлы бер нисә байрам сараһы көтөлә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡала бер көндә өс байрамды ҡаршылай, әммә Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башҡа, халҡыбыҙҙың милли батырына арнап, Өфө бер сара ла ойошторшай, шуныһы ҡыҙғаныс. Хөкүмәт кимәлендә хуплау һәм таяныс тапҡан "Салауат йыйыны" фольклор байрамы ла хәҙер бер нисә йыл рәттән район һабантуйы кимәлендә генә үткәрелеүен иҫәпкә алғанда, Салауат исеме тағы ла онотолоуға дусар ителә, ахырыһы, юғиһә, рух көсөн уятыусы был сараның күңел асыу саралары аҫтында баҫылып ҡалыуына нимә әйтәһең?..**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАШВАТҠЫСТАР...

## китап булып сыҡты




**"Был башватҡыстарыңды, башэшләткестәреңде китап итеп сығар", тип нисә йыл буйы өгөтләй торғас, ниһайәт, Илдар Ғәбитов үҙенең ижад емештәрен "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәт комплексында бәләкәй генә китапсыҡ итеп баҫтырып сығарҙы. Кроссворд, сканворд сисергә яратҡан уҡыусылар өсөн был бик ҙур бүләк булды.**

Совет осоронда гәзит-журналдарҙа башватҡыстар һирәк баҫыла торғайны. Күп баҫмалар, бигерәк тә беҙҙең башҡорт баҫмалары, уларға тейешле иғтибар бирмәй килде. "Киске Өфө" гәзите был йәһәттән дә өлгөрәрәк булып сыҡты, башватҡыстарға даими рәүештә урын бирәп, уҡыусыларын ҡыуандырҙы, Илдар Ғәбитовтың сканвордтарынан, кроссвордтарынан торған махсус гәзит тә сығарҙы.

Кроссвордтар сисеү зиһенде үҫтерә, мейене эшләтә, хәтерҙе яҡшырта, ғалимдар тикшереүҙәре раҫлауынса, баш ауырыуҙарын да иҫкәртә. Кроссворд сискән кеше тик үҙе менән генә ярыша - шунын менән ул башҡа төр ярыштарҙан айырылып тора. Бында еңеүсе лә, еңелеүсе лә юҡ. Ошоноң арҡаһында кроссвордтар донъяла популярлыҡ яулап алды ла инде. Хәҙер, шөкөр, беҙҙә лә баҫмалар кроссвордтарҙы әүҙем баҫтыра башланы. Был уларҙың тиражына ла ыңғай йоғонто яһай, тип уйлайым.

Илдар Ғәбитовтың башватҡыстарын сисеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙа соҡоноп ултырыу кәрәк түгел. Уларҙы диванда ятып ҡына ла сисеп була - тик башынды ғына эшләт. Автор тик башҡорт һүҙҙәрен генә ҡулланырға тырыша. Онотолоп барған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөргә мәжбүр итеүе менән дә әһәмиәтле Илдар Ғәбитовтың башватҡыстары. Шуға ла уларҙы төрлө дәрестәрҙә ҡулланған уҡытыусылар барлыҡ тураһында ла хәбәрҙәрмын. Унан һуң, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Алтын тирмә" тапшырыуы ла башлыса Илдар Ғәбитовтың ошо башватҡыстарҙа ҡулланған һорауҙарынан тора бит.

**Ишмөхәмәт ТАҺИРОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЫУА БАЙЫҠМА...

## тора байыҡ

Уйлы уйлап торғансы, тәүәккәл эшен бөтөрөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әйберҙәр иҫкермәй, ә беҙҙең теләктәр аҙым һайын яңыра.

**(Марсель Пруст).**

Изгеләр һәләк булған урында...яуыздар еңеүҙе тантана итә.

**(Генрих Гейне).**

Тотлоҡҡандар үҙенә ышаныс тыуҙырыусан.

**(Фридрих Ницше).**

Һүҙҙәр Алиһә һымаҡ кейенергә, ҡош һымаҡ осорға тейеш.

**(Тибет халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙар иң юғары еңеүенә... кәмһенеүҙең иң түбән баҫҡысына төшөп кенә өлгәшә.

**(Симона де Бовуар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бөтөн донъяны яулап алып бөткән көндә Александр Македонский бүлмәһенә бикләнеп илаған, тиҙәр. Хәрби начальниктары бөйөк яугирҙың был ҡылығына бик аптыраған. Күпме яу юлы үтеп тә уның илағанын берәү ҙә күргәне булмаған. Ҙур ҡурҡыныс алдында ҡалғанда ла, үлем менән күҙмә-күҙ осрашҡанда ла уның йөҙөндә ҡурҡыуҙың, ҡайғыуҙың ҡалыуҙың әҫәрен дә күрмәгәндәр. Александр һәр ваҡыт бәхетле, ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған. Хәҙер, донъяны яулап алып ҡына бөткәс, ни булған һуң Александрға, ни өсөн илай?**

**Хәрби начальниктар, борсолоп, Александр Македонский бикләнгән бүлмәнең ишеген ҡаға һәм:**

**- Һеҙгә ни булды, ни өсөн илайһығыҙ? - тип һораған.**

**Александр шулай тип яуаплаған:**

**- Ошондай ҙур еңеүгә өлгәшкәс, мин үҙемдең еңелгәнемде аңланым. Мин әлеге мәлдә үҙемде, бөтөн донъяны яулаясаҡмын, тигән мәғәнәһеҙ хыялымды атҡара башлаған урында, юл башында баҫып торам, тип тоям. Быны мин әле генә аңланым. Ә элек аңламағанмын, сөнки мин юлда булғанмын, алда маҡсатым булған. Хәҙер минә бер ҡайҙа ла барырға, бер нәмәне яуларға ла кәрәк түгел. Мин үҙ күңелемдә ҡот осҡос бушлыҡ ҡына тоям. Мин еңелдем....**

**...Александр утыҙ өс йәшендә донъя ҡуя. Һуңғы юлға оҙатыу мәлендә бар халыҡ мәйеттең ҡулдарының һәленгән көйө бөүелеп барыуын күрә. Бөйөк Александрҙың үҙенең васыяты шулай булған: уның әхирәткә буш ҡулдар менән киткәнен барыһы ла күреүен теләгән..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5501
Заказ 2170